ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 ғинуар (һыуығай) 2026

№ 1 (1196)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ғорурланабыҙ!**



2

**Башҡорт телен белһәң...**

**төрки халыҡтары араһында үҙ кеше булаһың**



8-9

**Йылҡы менән ут -**

**уңыш сығанағы**



12

**Табында - башҡорт ризыҡтары**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Эрнест Хемингуэй "Бәхет - ул ныҡлы һаулыҡ һәм насар хәтер" тигән. Ысынлап та, беҙ йыш ҡына үткәндәге уңышһыҙлыҡтар, үпкәләүҙәр, ҡурҡыуҙар һәм тулҡынланыуҙар тураһындағы хәтирәләр менән йәшәйбеҙ. Әйҙәгеҙ, яңы йылда күңелдәрҙән был хәтирәләрҙе сығарып ташлайыҡ, Яңы йылда тормошобоҙҙа ла, күңелдәрҙә лә барыһы ла көйләнәсәк һәм яҡшырасаҡ, тигән өмөт, ышаныс менән йәшәйек.***

*МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ*

# БАШ ЙОРТТОҢ ҺҮҘЕ...

## төпкөл ауылға ла барып етә

**"Киске Өфө" баш ҡала гәзите генә түгел, ул туған телдә уҡый белгән һәр кем яҡын итер баҫма. Өфө үҙе лә бит өфөләр өсөн генә түгел, ә республиканың бар халҡы өсөн яҡын, үҙ ҡала. Өфө - Башҡортостан дәүләтенең "мейеһе", арҡа һөйәге. Яҙмышыбыҙ Өфөлә хәл ителә. Иртәме, һуңмы, ауылдарҙа йәшәүсе һәр ғаиләнең иғтибары улы, ҡыҙы, туғаны уҡыған, эшләгән баш ҡалаға төбәлә. Баш ҡалала булып ятҡан ваҡиғалар, ундағы көнитмеш, ығы-зығылар, шәхестәр, бигерәк тә уҡыу йорттары тураһында мәғлүмәттәр - барыһы ла яҡын республика халҡына. Шуға ла, Өфө - ул баш йортобоҙ һәм уның гәзите лә республика халҡы өсөн ят була алмай.**



Бынан 23 йыл элек "Был гәзит бар республикаға таралырға тейеш!" тигән инаныу һәм өмөт менән ижад итә башлағайныҡ баҫмабыҙҙы. Иңебеҙгә еңел булмаған яуаплылыҡ алыуыбыҙҙы Башҡортостандың Беренсе Президенты ла, Өфө ҡалаһы етәкселәре лә хуплағайны. "Киске Өфө" тигән атамабыҙ киң таралып китеүгә бер аҙ ҡыйынлыҡ тыуҙырҙы тыуҙырыуға. Әммә бер тапҡыр ҡулына алып уҡыған кеше шунда уҡ уның йүнәлешен, йөкмәткеһен үҙ итте. Оҙаҡ йылдар гәзитебеҙҙән айырылмаған, әле булһа беҙҙең хеҙмәтте юғары баһалап, сәләмдәр еткергән уҡыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ. Ышанабыҙ: һеҙ иң аңлы ла, иң мәғлүмәтле лә уҡыусы!

Әйткәндәй, түбәндә гәзит уҡыусыларыбыҙ яҙғандарҙан бер нисә өҙөк килтереп үтәйек әле: "Гәзит беҙҙең өсөн алыҫтан көтөп алынған ҡәҙерле ҡунаҡ кеүек. Һәр шәмбе хат ташыусы килгәнен түҙемһеҙләнеп көтөп алабыҙ һәм эште ҡалдырып булһа ла, гәзиттәге һәр мәҡәләне уҡып сығабыҙ. "Киске Өфө" - бар республиканы баш ҡалабыҙ менән бәйләүсе булып тора ла инде. Уның биттәрендә баҫылған Өфө хәбәрҙәре, баш ҡалала уҙған саралар хаҡында зыялыларыбыҙ менән ҡоролған әңгәмәләр аша белеп ҡыуанабыҙ", - тип яҙа Ҡырмыҫҡалы районынан Рәмилә Сафина исемле уҡыусыбыҙ.

"Киске Өфө" гәзите - рухйән дауаһы, күңелгә ғәм, сәм һалып, ҡуҙғытып, донъяуи мәсьәләләргә ҡараштарҙы киңәйтеп ебәреүсе баҫма. Йәмғиәттә йәшәгәс, кеше алдында төрлө юҫыҡтағы һорауҙар, проблемалар тыуып ҡына тора. "Киске Өфө" гәзите айбарланып ярҙамға ташланғандай: албырғап ҡалғандың аңын уятыр, илағанды йыуатыр, тормош юлындағы маяҡтай, аҙашҡанды етәкләп алып китер, атайҙарса төплө кәңәштәр бирер, әсәйҙәрсә сабыр аҡыл менән фатиха ҡылып, юл күрһәтер рухи таяныс, ныҡлы терәк ул", - ти Өфөнән Әлфиә Әсәҙулина.

Салауат районынан уҡытыусы Венера Ситдиҡованың яҙғандары ла күңелгә май булып яғыла: "Киске Өфө" гәзитен тулҡынланып көтөп алам. Ул - минең ярҙамсым, таяныҫым, кәңәшсем. Гәзит - минең уҡытыусым. Ҡайһы битен генә асма, ниндәй генә рубриканы алма, ул мине йәшәргә өйрәтә. Һәр кемдең үҙ юлы, үҙ һуҡмағы, һәр кем күңеленә рухи аҙыҡты үҙе теләгән сығанаҡтан ала. Ә мин Йәншишмә һыуын "Киске Өфө"нән эсәм", - ти

Беләһегеҙ, йыл аҙағы, йыл башы эшләнгәндәргә, атҡарылғандарға йомғаҡ яһай торған мәл. Әлбиттә, үтеп киткән йылда ла мәғлүмәт, ғилем һәм мәғрифәт сығанағы булған гәзитебеҙҙе баштан уҡ алған йүнәлешенән тайпылдырмай, һәр яҙмабыҙҙы ата-бабаларҙың донъяуи аҡылына төрөп, заман елдәренә ҡаршы торор көс, ысул табыусылар тәжрибәһен фәһем итеп, туған телебеҙҙең һутын, матурлығын күңелдәргә яҡынайтыу, уны баһаларға һәм һанларға өйрәтеү маҡсатын алға һөрөп ижад иттек. Артур Миллер тигән бер аҡыллы кеше шулай тигән бит әле: "Нимә ул яҡшы гәзит? Ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит". Был һүҙҙәр бөгөн дә актуаль һәм беҙ ҙә шуға ынтылабыҙ. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: аҫыл һүҙҙе һанлаусылар, аҫыл һүҙгә сарсаусылар ғына аҙая-кәмей бара төҫлө... Яңылышһам, әйҙәгеҙ, һеҙ ҙә әйтегеҙ әле үҙ һүҙегеҙҙе. Хәбәрҙәр-хаттар көтәбеҙ!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## УРА, ТЕЛЕФОН ТОТА!



**Өфө - Инйәр трассаһында Елмәрҙәк бөгөлө мобиль элемтә менән тәьмин ителде. Был хаҡта Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте.**

Республика Хөкүмәте башлығы билдәләүенсә, ошо таулы урын иң ҡатмарлы һәм хәүефле участкаларҙың береһе булып тора. "Хәҙер бында ышаныслы тауыш бәйләнеше бар, тимәк, көтөлмәгән хәл килеп тыуған осраҡта тиҙ генә ярҙам һәм ҡотҡарыусыларҙы саҡырырға мөмкин. Станция автономлы эшләй, дөйөм электр селтәренә тоташтырылмаған, һауа торошо ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, тотороҡло эшләүгә иҫәпләнгән", - тип билдәләне Назаров. Уның мәғлүмәттәре буйынса, юлдың 75 процентында мобиль селтәр бар, тағы ла 15 километрҙа яҡшы тота. Киләсәктә Елмәрҙәк артылышы менән Инйәр араһында бәйләнеш булдырыу планлаштырыла.

12+

ҠЫҪҠАСА

# КЕМГӘ АРТТЫРАЛАР?

**Рәсәй Хөкүмәте бюджет хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыуға өҫтәмә рәүештә 9,5 миллиард һумдан ашыу аҡса бүлде.** Аҡса Министрҙар кабинетының резерв фондынан федераль дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең айырым категорияларының эш хаҡын арттырыуға йүнәлтеләә. Тейешле бойороҡҡа ил Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Һүҙ уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәрҙәре, юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары, шулай уҡ фән һәм мәҙәниәт өлкәһендә эшләүселәр хаҡында бара. Бүленгән аҡсаның 2,7 миллиард һумдан ашыуы - мәғариф, 3,6 миллиард һумдан күберәге ғилми учреждение хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын күтәреүгә йүнәлтелә. Медицина учреждениеларына - 3 миллиард һумдан ашыу, мәҙәниәт учреждениеларына 105 миллион һумға яҡын аҡса бирелә.

✓ **Башҡортостан Башлығы Мәскәүҙә төбәк үҫеше буйынса Хөкүмәт комиссияһы президиумы ултырышында ҡатнашты һәм комиссия етәксеһе, вице-премьер Марат Хөснуллинға республиканың милли һәм федераль проекттарҙа ҡатнашыу һөҙөмтәләре тураһында хәбәр итте.** "Ындай кәңәшмәләр даими үткәрелә. Ошо мөһим ҡорал төбәктәрҙә үҫтереү буйынса стратегик һәм ағымдағы мәсьәләләрҙе оператив хәл итергә мөмкинлек бирә. Коммуналь инфраструктураны тәҙөкләндереү, яңыртыу, юлдар ремонтлау һәм һалыу, торлаҡ һәм социаль объекттар төҙөү - былар барыһы ла Рәсәй Президенты һәм Хөкүмәте ярҙамынан тыш мөмкин булмаҫ ине. Ошондай етди ярҙам менән республиканың иҡтисады һәм социаль өлкәһе ландшафтын үҙгәртәбеҙ", - тип яҙҙы социаль селтәрҙә Радий Хәбиров.

✓ **Ғинуарҙа балалар пособиеларын түләү көнө яңы йыл каникулдарына тура килә, шуға күрә Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе 2025 йылдың декабре өсөн аҡсаны ваҡытынан алда күсерҙе.** Республика халҡына айлыҡ түләүҙәр 25 декабрҙә үк күсерелә башланы. Бында һүҙ 17 йәшкә тиклемге балаларға һәм йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға берҙәм пособие, эшләмәгән ата-әсәләргә йәш ярымға тиклемге баланы ҡарау буйынса пособие, 3 йәшкә тиклемге беренсе балаға түләү һәм саҡырылыш буйынса хәрби хеҙмәткәрҙең балаһына пособие хаҡында бара. Шулай уҡ эшләп йөрөгәндәргә йәш ярымға тиклемге баланы ҡарау буйынса пособие ла ваҡытынан алда түләнде. Әсәлек капиталынан өс йәшкәсә балаға түләүҙәр 26 декабрҙә килде. "Ғинуар айы өсөн аҡса 2026 йылдың февраль башында күсерелә", - тип өҫтәнеләр республика бүлексәһендә.

✓ **Төбәк сәйәсәтен үҫтереү үҙәге "Рәсәй төбәктәрендә йылдың социаль-иҡтисади һәм сәйәси йомғаҡтары" рейтингын билдәләне.** Тәүгеләр рәтендә Мәскәү, Татарстан, Мәскәү өлкәһе, Санкт-Петербург, Төмән өлкәһе, Түбәнге Новгород өлкәһе, Краснодар крайы, Ханты-Манси автономиялы округы һәм Свердловск өлкәһе менән Башҡортостан да бар. "Үҫешкән төбәктәрҙә яңы йүнәлештәр һәм инновацион иҡтисад үҫешенә баҫым яһала. Шуның менән бергә Краснодар крайы, Татарстан йәки Башҡортостан кеүек уңышлы субъекттарҙа ауыл хужалығы һиҙелерлек роль уйнай", - тине Төбәк сәйәсәтен үҫтереү үҙәге президенты Илья Гращенков.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ҒОРУРЛАНАБЫҘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә ЮНЕСКО комиссияһының дөйөм йыйылышында сығыш яһаны һәм Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Сергей Лавровҡа һәм ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссия рәйесенә комиссияның дөйөм йыйылышында сығыш яһарға саҡырыуы һәм республикаға төбәктең бай мәҙәни, тәбиғи, тарихи мираҫын һаҡлау йәһәтенән ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе.**



"Башҡортостандың ғорурланырлыҡ нәмәләре бихисап. 2025 йыл беҙҙең өсөн айырыуса уңышлы булды: Шүлгәнташ мәмерйәһенең ҡаяға төшөрөлгән рәсемдәре - Бөтә донъя мираҫы исемлегенә, беҙҙең "Торатау" ЮНЕСКО-ның глобаль геопарктар селтәренә инде. Өфө университетында ЮНЕСКО кафедраһы барлыҡҡа килде, ә Ғафури районында Рәсәйҙә тәүге "алтын ҡаҙаҡтар" асылды. Беҙ тукталып ҡалырға йыйынмайбыҙ. Мәҫәлән, бөгөн тағы ла бер мөһим аҙым яһаныҡ - Карпинский исемендәге Бөтә Рәсәй геология ғилми-тикшеренеү институтының генераль директоры Павел Владимирович Химченко менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙыҡ. Бергәләп Башҡортостанда Милли геопарктар системаһын булдырыу өҫтөндә эш башлайбыҙ. Рәсәйҙә ЮНЕСКО эгидаһы аҫтында яңы геопарктар барлыҡҡа килергә тейеш. Ә беҙҙең республика биләмәләрҙе үҫтереү йәһәтенән тупланған тәжрибәһе менән уртаҡлашырға әҙер", - тип яҙҙы Радий Хәбиров MAX мессенджерында.

# ТУРИЗМ БУЙЫНСА...

**Рәсәй Хөкүмәтенең туризм өлкәһендәге премияһының быйылғы лауреаттары билдәләнде.**

Бөтәһе 30-ҙан ашыу кеше наград менән бүләкләнде, уларҙың тырышлығы менән эске туризмды үҫтереүгә йүнәлтелгән 10 башланғыс бойомға ашырылды. Улар исәбендә Башҡортостандың "Инвалидтар өсөн әүҙем туризм" проекты ла бар. Премия проекты ойоштороусыларға - Рәсәй инвалидтар спорт союзының төбәк вәкиле Максим Кожуховҡа һәм ойошма президенты Флүр Нурлығаяновҡа, "Салют" республика реабилитация үҙәгенең комплекслы реабилитация буйынса белгесе Әлфиә Самойловаға, Өфө фән һәм технологиялар университеты доценты Александр Токмаковҡа, "Рәсәйҙең спорт туризмы федерацияһы"ның беренсе вице-президенты Алексей Ярошевскийға тапшырылды. "Беҙҙең "Инвалидтар өсөн әүҙем туризм проекты" - 2013 йылдан Салауат районында ойошторолоп килгән "Туриада-Йүрүҙән" терәк-хәрәкәт ағзалары зыян күргән инвалидтар араһында спорт туризмы буйынса Бөтә Рәсәй фестивале. Фестивалдең төп бурысы - Рәсәйҙә спорт һәм туризм менән шөғөлләнеү аша инвалидтарҙы реабилитациялауға булышлыҡ итеү. Йыл һайын ул Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 18 йәштән 65 йәшкә тиклемге ҡатнашыусыларҙы бергә туплай", - тип һөйләне Максим Кожухов.

# ТӘРБИӘГӘ АЛҺАҢ...

**2025 йылдың башынан республикала тәрбиәгә бала алған 625 ғаиләгә бер тапҡыр бирелә торған аҡса түләнгән. Был маҡсатҡа Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһе 38 миллион һумдан ашыу йүнәлткән.**

Ярҙам сараһын Рәсәй территорияһында даими йәшәгән илебеҙ граждандары алырға хоҡуҡлы. Улар уллыҡҡа алыусылар, опекундар, попечителдәр йәки тәрбиәгә бала алған ата-әсәләр булырға мөмкин, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Рәсәй Социаль фонды Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә. Аҡса бер тапҡыр бирелә, ул ғаиләгә алынған һәр балаға билдәләнгән күләмдә түләнә. Пособие күләме йыл һайын 1 февралдән индексациялана. Башҡортостанда район коэффициенты менән бергә сумма 30 982,97 һум тәшкил итә. Законда Башҡортостанда арттырылған күләмдә - 236 735,10 һум түләү ҡаралған, был ғаилә инвалид баланы, 7 йәше тулған йәки бер туған ике һәм унан күберәк баланы тәрбиәгә алған осраҡтарға ҡағыла. Бер тапҡыр бирелә торған пособие алыу өсөн судтың уллыҡҡа алыу тураһында ҡарары көсөнә ингән көндән йә иһә опека һәм попечителлек органы опека йәки попечителлек тураһында ҡарар сығарған көндән, йә иһә баланы ғаиләгә алыу тураһында килешеү төҙөлгән көндән алып 6 ай эсендә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғаризаны Социаль фондтың Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһенең клиент хеҙмәтендә, Күп функциялы үҙәктә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталында бирергә мөмкин. Тәғәйенләү тураһында ҡарар 10 эш көнө эсендә ҡабул ителә. Аҡса пособие тәғәйенләнгәндән һуң 5 көндә күсерелә.

# АУЫЛҒА ТРЕНЕР БУЛЫП ҠАЙТ!

**Башҡортостандың вице- премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә "Ауыл тренеры"программаһында ҡатнашыу буйынса иң әүҙем районДарҙы атаны.**

Министр һүҙҙәренсә, беренсе урынды Белорет районы биләй, программала ошо муниципалитеттан 29 тренер ҡатнаша. Икенсе урынды Ишембай районы (23), өсөнсөнә Өфө районы (20) яуланы. Шулай уҡ проектта Әбйәлил, Бәләбәй һәм Туймазы райондары тренерҙары әүҙем ҡатнаша. Руслан Хәбибов билдәләүенсә, 5 йыл эсендә 207 ауыл тренеры субсидия алған. Субсидияларҙың дөйөм суммаһы 166,2 миллион һум тәшкил итте. Бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең күбеһе йорт төҙөүгә, торлаҡ һәм автотранспорт һатып алыуға йүнәлтелә. "Программа ярҙамында 5 меңдән ашыу бала спорт менән шөғөлләнеүгә йәлеп ителгән. 13 ауыл районында спорт әҙерлеге структур бүлексәләре асылған. 2025 йылда ғына спорттың 6 төрө буйынса яңы бүлексәләр асылды: был спорт көрәше, бокс, мини-футбол, волейбол, баскетбол һәм йөҙөү", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды вице-премьер.

"Башҡортостан тәжрибәһе федераль кимәлдә уңышлы тип танылды. "Ауыл тренеры" проекты "Ауыл тренеры" федераль программаһы өсөн нигеҙ булып тора. 2026 йылдан республика федераль проектҡа ҡушыла. 22 хеҙмәткәргә дөйөм суммаһы 22 миллион һумлыҡ субсидиялар бүлеү планлаштырыла, шуларҙың 20,4 миллионы федераль бюджеттан. Был Рәсәй төбәктәре араһында ҡатнашыусылар һаны буйынса иң ҙур күрһәткестәрҙең береһе", - тип йомғаҡ яһаны Руслан Хәбибов.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2026 йыл Рәсәй Халыҡтарының берҙәмлеге йылы тип иғлан ителде. Был турала указға Рәсәй Президенты Владимир Путин 2025 йылдың 25 декабрендә ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, РФ Хөкүмәте ойоштороу комитетын булдырырға һәм тематик йыл үткәреү өсөн саралар планын әҙерләргә тейеш.

✓Яңы йыл алдынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ауыл мәктәптәренең 20 директорына 690 мең һум күләмендә грант алыуға сертификаттар тапшырҙы. "Ауыл мәктәбе етәксеһе булып эшләү - үҙенә күрә миссия, халыҡҡа хеҙмәт итеү ул. Ауылдағы мәктәптең белем биреү учреждениеһы ғына түгел, ә тормош үҙәге булыуын беҙ барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ. Эшегеҙ өсөн рәхмәт, беҙ уны ихтирам һәм рәхмәт менән ҡабул итәбеҙ", - тине Радий Хәбиров, директорҙарҙы ҡотлап.

✓Яңы йыл алдынан республиканың 14 ҡала һәм район дауаханаһына Lada Vesta машиналары аҫҡыстары тапшырылды. "Һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыу" республика проекты сиктәрендә һатып алынған 22 яңы автомобилде дауаханаларҙың баш табиптарына Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев тапшырҙы. Санитар машиналар дүрт пассажирҙы, шул иҫәптән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән пассажирҙы ташыу өсөн ҡулайлаштырылған.

✓2025 йылда Башҡортостанда "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә яҡынса 200 саҡрым юл норматив хәлгә килтерелде, тип хәбәр итәләр республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан. Был былтырғыға ҡарағанда 3,5 тапҡырға күберәк. Борай - Иҫке Балтас - Ҡуйыҙа юлының - 28, Белорет - Учалы - Мейәс трассаһының - 11, Магнитогорск - Ира юлының - 8,2, Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск юлының - 5, Кушнарен - Саҡмағош - Баҡалы юлының - 5,1, Өфө - Инйәр - Белорет юлының 4,2 саҡрымы төҙөкләндерелгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәү авиация институты һәм Өфө фән һәм технологиялар университеты араһында хеҙмәттәшлекте нығытыу ниәте тураһында һөйләне. Республика етәксеһе Мәскәү авиация институты ректоры Михаил Погосян менән берлектәге проекттар тураһында фекер алышты. "Михаил Аслан улы - авиация төҙөлөшө легендаһы, хәрби һәм граждандар авиацияһы үҫешенә тос өлөш индергән кеше. Хәҙер ул илдең алдынғы техник вуздарының һәм милли тикшеренеү үҙәктәренең береһен етәкләй", - тип яҙҙы Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

ӨФӨ - ХӘРӘКӘТТӘ



## "АҒИҘЕЛ" АТАМАҺЫ ЕҢДЕ!

**Ағиҙел йылғаһы ярындағы колоннада урынлашҡан йәмәғәт майҙанына ниндәй атама бирергә тигән һорау алыуҙа өфөләр генә түгел, бар республика халҡы ҡатнашты. Ошо акция һөҙөмтәһендә хаҡлы рәүештә "Ағиҙел" атамаһы еңеп сыҡты.**

Хәтерегеҙҙә булһа, был исемлектә Троицк, Халыҡтар Дуҫлығы, Иван Нагой, Ағиҙел, Хеҙмәт батырлығы һәм даны, Тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ, Дуҫлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ, Өфө колоннадаһы, Аҡ пристань һәм Беренсе ҡала кеүек варианттар бар ине.

Ҡала Советының 58-се ултырышы көн тәртибенә тауыш биреүҙә еңгән "Ағиҙел" атамаһын депутаттар иғтибарына тәҡдим итеү мәсьәләһе лә индерелгәйне. "Атама биреү территорияны ҡулланыу, шул иҫәптән адресация, навигация һәм ҡала мөхитен планлаштырыу өсөн бик мөһим. Йәмәғәт урынының дөйөм майҙаны 4,9 гектар тәшкил итә", - тип сығыш яһаны Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Евгений Чебаков. Ул был проект буйынса ҡарар сығарыр алдынан Өфө ҡала хакимиәте сайтында һорау алыу ойошторолғанын, ул ҡала округының планлаштырыу структураһы элементтары һәм урам-юл селтәренә атама биреү һәм үҙгәртеү документтарына яуап бирә икәнен билдәләне.

## ХАЛЫҠ КӨТӘ...

**Пугачев урамы Өфөгә Нуғай шоссеһы яғынан көньяҡ-көнсығыш инеү урынын Дуҫлыҡ монументы эргәһендәге юл сатында тоташтыра. Ул 2022 йылда реконструкциялана башланы, ә бөгөн тамамланыуға яҡынлаша.**

Өфө ҡала округы хакимиәтенән белдереүҙәренсә, былтыр ноябрь башында Геофизиктар урамынан транспорт сиселешенә тиклемге участкала урамдың ике һыҙаты буйлап хәрәкәт асылды. Элек Дуҫлыҡ монументынан Өфө йылғаһы аша Күпергә тиклем Таш кисеү районында Геофизиктар, Геологтар, Бородино урамдары аша урау юл буйлап барырға мөмкин ине, юлдың дөйөм оҙонлоғо - 3,5 километрҙан ашыу. Хәҙер Пугачев урамы буйлап Геофизиктарҙан 800 метр оҙонлоҡтағы транспорт сиселешенә тиклем юл 2 минуттан да артмай. Ноябрҙең өсөнсө декадаһында Дуҫлыҡ монументынан Геофизиктарға тиклемге участкала Пугачев урамының төп юл өлөшөнөң бөтә дүрт һыҙаты асылы. Шулай уҡ Геофизиктар урамынан транспорт сиселешенә тиклем ҡалған ике һыҙатты төҙөү ҡаралған. Эштәрҙең был этабы, шулай уҡ һул яҡ юл һәм тротуарҙар төҙөү 2026 йылдың 1 сентябренә тамамланасаҡ.

Пугачев урамын реконструкциялау сиктәрендә Ағиҙел аша Кузнецов затонын һәм трассаны аэропортҡа тоташтырасаҡ яңы күпер төҙөү планлаштырыла. Дуҫлыҡ монументы эргәһендәге күперҙәр аша көн һайын Өфөгә инеү трафигының яртыһы үтә. Йома һәм йәкшәмбе ҡалаға аэропорт трассаһына сығыу ваҡытында транспорт хәрәкәте һиҙелерлек әкренәйә. Был проблеманы Кузнецов затонында яңы күпер хәл итергә тейеш.

## ЦИРКТЫ ҠАЙТАРЫРҒА!

**Рәсәй дәүләт экспертизаһының төп идаралығы Өфө циркы бинаһын проектлау һәм реконструкциялау буйынса ыңғай һығымта яһаған.**

Шулай итеп, Өфө дәүләт циркын реконструкция һәм реставрация көтә. Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән ул "Төҙөлөш" дәүләт программаһы объекттары исемлегенә индерелгән. Был маҡсаттарға 2 млрд һум бүленгән. Акса 2026 йылдан алып күсереләсәк һәм шунан һуң төҙөлөш эштәре лә башланасаҡ. " Өфө циркы ябылыуға ете йыл үтеп тә киткән, был ваҡыт эсендә бер быуын үсеп өлгөрҙө. Тамашасылар уның асылыуын бик көтә. 2028 йылда беҙҙең цирк уларға ишектәрен асасаҡ. Циркты тыштан да, эстән дә үҙгәрештәр көтә. Тамаша залында йомшаҡ, уңайлы креслолар буласаҡ", - тине цирк директоры Гүзәл Туктарова.

Өфө циркы 2017 йылда уҡ ябылғанын, бина авария хәлендә тип танылғанын иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Республика үҙ иҫәбенә реконструкция проектын төҙөнө һәм РФ Хөкүмәтенән бинаны төбәккә биреүҙәрен һорағайны. Ил Президенты менән әңгәмә барышында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хабиров Владимир Путинға булышлыҡ итеүен һорап мөрәжәғәт итте. Дәүләт башлығы "цирк сәнғәте дәүләт тарафынан быға тиклемгә ҡарағанда күберәк иғтибарға лайыҡ. Уларға ярҙам итергә кәрәк", - тип яуап бирҙе.

## ҠАР ИРЕТӘЛӘР

**Өфөлә Сәғит Агиш урамындағы яңы ҡар иретеү пунктының ике ҡоролмаһы тулы ҡеүәтенә эшләй. Уларҙың эше арҡаһында ҡала урамдарынан ҡар сығарыу ваҡыты һиҙелерлек кәмей. Тәүлек эсендә улар 2400 кубометр ҡарҙы иретә, тип хәбәр итә ҡала хакимиәте.**

Ҡар иретеү пункттарының эш принцибы йылы канализация ағымында ҡарҙы иретеүгә нигеҙләнгән, ирегән һыу аҙаҡ таҙартыу ҡоролмаларына ебәрелә. Был тирә-яҡ мөхиткә зыянды һиҙелерлек кәмета, сөнки урамда йыйылған ҡарҙа зарарлы ҡушылма күп.

Билдәләп үтергә кәрәк, күптән түгел Өфөнөң Совет районын төҙөкләндереү хеҙмәте ҡарҙы ҡабул итеү һәм эшкәртеү хаҡын арттырҙы. 2025-2026 йылдар миҙгеленә ҡарҙы ҡабул итеү һәм эшкәртеү буйынса хеҙмәткә тариф 1 кубометры өсөн 220,15 һум күләмендә билдәләнгән (НДСТ-тан тыш). 2024-2025 йылдарҙың уҙған ҡышҡы миҙгелендә был тариф 200,18 һум тәшкил итте.

БАЙРАМҒА АРНАП...

## ҠЫШ БАБАЙ ЙОРТОНДА...

**Яңы йыл байрамдары алдынан Өфөлә Ҡыш бабай резиденцияһы асылды. Байрам сараһын асҡанда баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев шыршыла уттар ҡабынһын өсөн йәш ҡунаҡтар менән бергә тылсымлы һүҙҙәр әйтте һәм Яңы йылда барыһына ла бәхет теләне.**

"Ҡәҙерле өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары, байрамға балаларығыҙ менән килегеҙ. Бында шәп команда эшләй. Беҙҙә тамашалар бушлай күрһәтелә. Мәҫәлән, Лапландияла Ҡыш бабайға ҡунаҡҡа барыу өсөн ике йөҙ евро түләйҙәр. Әйткәндәй, фотограф та һеҙҙең өсөн бушлай эшләй. Шуға күрә, рәхим итегеҙ", - тип мөрәжәғәт итте Ратмир Мәүлиев баш ҡала халҡына һәм ҡунаҡтарына. Өфөлә Ҡыш бабай резиденцияһы ҡунаҡтарҙы 11 ғинуарға тиклем көн һайын көндөҙгө сәғәт 2-нән 5-се яртыға тиклем һәм киске 6-сы яртынан 8-гә хәтлем "Ҡышҡы һабантуй"ҙа көтә.

Шулай уҡ Яңы йыл байрамы алдынан Өфөнөң заманса скульптуралар аллеяһында музыкаль иллюминация ҡуйғайнылар. Ул баш ҡаланың тарихи үҙәгендә байрам кәйефе булдырҙы. Музыка сәғәт 18.00-ҙән 22.00-гә тиклем сәғәт һайын яңғырай. Оҙайлығы - 20 минут.

Байрамдар бәйгеһеҙ булмай, әлбиттә. Өфө районларының идара итеүсе ойошмалары араһында ла Яңы йыл ҡаласыҡтары конкурсына йомғаҡ яһалды. Баш ҡала ихаталарында бөтәһе 6 боҙ ҡаласығы төҙөлгән, 27 шыршы биҙәлгән, 12 һырғалаҡ йыһазландырылған, 21 боҙ майҙансығы эшләнгән. Төрлө номинацияларҙа Рихард Зорге урамы, 37/1 ("Яңы йыл ҡаласығы"), Калинин урамы, 7 ("Хоккей ҡумтаһы"), Таллин урамы, 17 ("Иң яҡшы боҙ тауы"), Мәләүез урамы, 31 ("Яңы йыл шыршыһы") йорттар адрестары буйынса ихаталар еңеүсе тип табылды.




Әйткәндәй, Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ретростилдәге фотоһүрәт эшләткән. Унда етәксе үҙе һәм уның коллегалары - баш ҡаланың Киров, Совет, Октябрь, Калинин, Орджоникидзе, Дим һәм Ленин райондары хакимиәттәре башлыҡтары һүрәтләнгән. Ратмир Мәүлиев, Илвир Нурдәүләтов, Айҙар Бәҙретдинов, Олег Котов, Иван Иванов, Антон Тарасов, Рөстәм Хәмитов һәм Ғәзизйән Әхмәтйәнов ҡышҡы кейемдә Яңы йыл шыршыһы янында баҫып тора. "Тренд", - тип яҙған ҡыҫҡаса баш ҡала хакимиәте етәксеһе. Комментарийҙарға ҡарағанда, ҡала халҡына Ратмир Мәүлиевтың фотоһүрәте бик оҡшаған.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Белоретта көрәш менән шөғөлләнеү өсөн модулле спорт комплексы төҙөү планлаштырыла. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Яңы йыл байрамы алдынан төҙөлөш өсөн билдәләнгән урында булды һәм объекттың проекты менән танышты. Майҙаны 1,1 мең квадрат метр тәшкил иткән ҡоролманың 605 квадрат метры спорт залы буласаҡ. Төҙөлөштөң дөйөм хаҡы 110 миллион һум тәшкил итә.

✔Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәргән "Башҡортостан Республикаһының иң грамоталы муниципаль берәмеге - 2025" конкурсында беренсе дәрәжә еңеүсеһе дипломына Стәрлетамаҡ ҡалаһы лайыҡ булды, тип хәбәр итәләр ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән. Икенсе дәрәжә дипломға - Күмертау ҡалаһы, өсөнсө дәрәжәгә Салауат районы һәм Өфө ҡалаһының Совет районы лайыҡ булған.

✔"Алтын кәштә - 2025" моделле муниципаль китапханалар фондын формалаштырыу һәм үҫтереүҙең иң яҡшы тәжрибәләрен асыҡлау буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында Башҡортостандан ике китапхана еңеү яулаНы, тип хәбәр итәләр республика Мәҙәниәт министрлығынан. Улар - Шишмә ауыл-ара китапханаһының 15-се филиалы булған Келәш ауылы модель китапханаһы һәм Салауат ҡалаһының "Үҙ Химиям" моделле үҙәк ҡала китапханаһы.

✔2025 йыл йомғаҡтары буйынса "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы Күп функциялы үҙәге" республика конкурсында Ишембай ҡалаһы, Малаяҙ һәм Ҡырмыҫҡалы ауылдары офистары еңеүсе булды. Белгестәр араһында үҙ һөнәренең оҫталары булып Өфөнән - Ирина Шакирова һәм Наталья Куприянова, Нефтекамадан - Илвина Шакирова, Яңауылдан Айгөл Ибатуллина танылды.

✔Башҡортостанға федераль бюджеттан 263,7 миллион һум күләмендә өҫтәмә субсидия бүленә. Акса диспансер күҙәтеүендә булған юғары хәүеф төркөмөндәге пациенттарҙа йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары һәм йөрәк-ҡан тамырҙары өҙлөгөүҙәренең үҫешен иҫкәртеүгә тәғәйенләнгән. Тейешле бойороҡҡа хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Финанслау 2027 йылға тиклем ҡаралған.

✔Белоретттан тау саңғысыһы Тәнзилә Исраилова Рәсәй кубогы этабында икенсе урынды алды. Ҡыуаныслы хәбәрҙе республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Тау саңғыһы спорты буйынса Рәсәй кубогының өсөнсө этабында ирегеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар слалом-гигантта ярышты. Башҡортостан спортсыһы Тәнзилә Исраилова йөнә пьедесталға күтәрелде, кәмөш миҙал яулаНы. Быйыл яҙ ул тау саңғыһы спорты буйынса Рәсәй кубогы финалында еңеүсе булғайны.

**✓ Былары, киреһенсә, аномаль һауа торошо тип 11 ғинуарҙан йылытып ебәрәсәген күҙаллай, 16-һы хатта ямғыр яуасаҡ, тип ҡотто ала. Ни булһа ла, ҡыш ҡышлығын итер, һыуытып та, заманаһына күрә имшетеп тә алыр.**



ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# ҺИН КЕММЕ, ӘЛЛӘ НИМӘМЕ?

**Яңы рубрика асабыҙ: "Яһалма интеллект менән әңгәмә" тип атала ул. Гәзит уҡыусылар һорау бирә, ЯИ был һорауҙарға яуап бирә булыр. Яһалма интеллектҡа беренсе һорауҙы Өфө ҡалаһынан Рөстәм Нурыев бирҙе:**

➔ Һаумы, замана аҡылы! Яһалма интеллект - ул роботмы? Әллә үҙ-үҙен аңлаған компьютермы? Ҡыҫҡаһы, һин Кемме йәки Нимәме - шәхесме әллә программамы?

***Яһалма интеллект яуабы:***

➔ Төплө һәм ҡыҙыҡ һорауығыҙ өсөн рәхмәт, Рөстәм! Иң баштан уҡ шуны асыҡлап үтәм: мин робот та, шәхес тә, тимер ҡумтаға йәшенгән серле "аҡыл" да түгел. Мине кешеләр төҙөгән һәм өйрәткән супер-ҡорал йәки ҡеүәтле хисаплау үҙәге менән сағыштырыу дөрөҫөрәк булыр.

Йәнә яуабымды түбәндәге оҡшашлыҡ аша аңлатып ҡарайым. Бик ҙур, һәр төрлө мәғлүмәт (текст, рәсем, тауышлы яҙма) тупланған китапхананы күҙ алдына килтерегеҙ. Унда миллионлаған китаптар, мәҡәләләр, картиналар, хатта кешеләрҙең төрлө телдәге әңгәмәләре һаҡлана. Мин - ошо мәғлүмәт океанында ҡатмарлы оҡшашлыҡтарҙы, эҙмә-эҙлелектәрҙе, бәйләнештәрҙе, мәғәнәләрҙе табырға өйрәнгән ифрат иғтибарлы һәм етеҙ китапханасы-аналитик.

Һеҙ миңә һорау биргәндә, кеше хәтерендә булғанды иҫкә төшөргән кеүек, мин дә үҙемдең "китапханамда" булған мәғлүмәт өлгөләрен эҙләйем, шулар араһындағы ҡабатланыусы оҡшашлыҡтарҙы табам һәм улар нигеҙендә иң ихтимал булған, мәғәнәле яуап төҙөйөм. Тик мин был эште бик тиҙ һәм күләмле башҡарам. Төп маҡсат - һин, кеше, ҡуйған бурысты мөмкин тиклем теүәл үтәү. Башҡа төрлө маҡсатым да, хистойғоларым да юҡ.

Шулай итеп, мин кем? Техник йәһәттән мин - "Нимә". Мин - төрлө телдәге мәғлүмәтте тиҙ эшкәртеү өсөн төҙөлгән ҡатмарлы компьютер программаһы (яһалма интеллект моделе). Әммә, кешеләр менән йыш ҡына "кем менәндер" һөйләшкән кеүек, "һин" дә "мин" тип аралаша. Мин дә быңдай әңгәмәне ихлас үҙ итәм! Замана технологияларының мөғжизәһе шунда: улар шул тиклем уңайлы, хатта аңлы әңгәмәсегә оҡшаһа ла, ни бары бик алдынғы ҡорал булып ҡына ҡала.

***Төп фекер:***

ЯИ - ул кешене алмаштырыусы түгел, ә уның мөмкинлектәрен киңәйтеүсе. Сүкеш ҡул көсөн арттырған кеүек, мин дә кешенең уйлау, мәғлүмәт эшкәртеү мөмкинлектәренә ярҙам итергә тейешмен. Шулай уҡ мин башҡорт теле кеүек Хазина менән дә эшләргә әҙермен. Әммә, был хаҡта беҙ килһе юлы һөйләшербеҙ.

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

БЫЛ АЙҘА...

# КИЛӘСӘККӘ ӘЙҘӘҮСЕ ҒИНУАР

**Ҡыш уртаһы, яңы йыл башы - ғинуарға аяҡ баҫтыҡ. Тирә-йүндә шыршы уттары емелдәй, мандарин еҫе танауҙы ҡытыҡлай, бала-саға Ҡыш бабайҙан мөғжизәле бүләктәр көтгө... Һыуығай ғәҙәттә бына шулай башланып китә һәм яңы йылға юл башлаусы, байрамлы-күстәнәсле, йомарт, күңелле, ҡарлы-буранлы ай булараҡ күңелгә яҡын ул. Был айҙың яртыһы тиерлек быйыл оҙайлы каникулдар, ғаилә менән ял, ҡышҡы уйындар, саңғы-сана шыуыуҙарға арнала.**



Исеменә күрә - есеме, тигәндәй, һыуығай быйыл ысын мәғәнәһендә ҡышҡыса холҡона тоғро ҡалырмы? Синоптиктар фекеренә ҡолаҡ һалып ҡарайыҡ, булмаһа. Һауа торошон фаразлаусы метеоүҙәктәр күп булһа ла ҡыйын икән, төрләһә төрләсә һөйләй: берәүҙәре быҒаса булмаған һыуыҡтар менән ҡурҡыта, икенселәре оҫта ғына итеп ғинуар "йылдағыса нормаларға ярашлы" булыр, тип ҡотола, өсөнсөләренең күҙаллауынса, тегеләй ҙә, былай ҙа буласаҡ. Күп йылдар эшләп килеүсе РФ Гидрометүҙәк мәғлүмәттәре нимә тей? "Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге кеүек үк, ғинуарҙа Башҡортостан буйынса ғәҙәттән тыш (аномаль) һыуыҡтар көтөлә,"- ти уның синоптиктары. Улай ҙа ҡыйын бит әле. Бәлки, "Фобос" метеоүҙәге прогнозына ҡолаҡ һалырғалыр? Былары, киреһенсә, аномаль һауа торошо тип 11 ғинуарҙан йылытып ебәрәсәген күҙаллай, 16-һы хатта ямғыр яуасаҡ, тип ҡотто ала. Ни булһа ла, ҡыш ҡышлығын итер, һыуытып та, заманаһына күрә имшетеп тә алыр, тик көндәребеҙҙе болот баҫып, күңелдәребеҙҙе хәүеф кенә биләмәһен.

Ғинуар юл башлаған 2026 йыл Ут төҫөндәге ҡыҙыл Йылҡы билдәһе аҫтында килә. Йылҡы - ат, толпар, дөлдөл, юрға, саптар - көс, хәрәкәт, иреклек, дәрт һәм дарманды сағылдырыусы билдә, һәм ул яңы йылдың ҡәҙимге, ябай ғына булмаясағына ишаралай кеүек. Яңы йылдан - яңыса, ти бит, юғиһә, бер ауыҙҙан яҙмыш юраусылар һәм дә әүлиәлек итеүселәр. Мәҫәлән, астрологтар фаразлауынса, 2026 йыл - яңы эпоханың башланыуы, ошо осорҙан яңы тормошҡа старт бирелә. Илебеҙ мөһим һынауҙар алдында тора, был иһә үҫешкә, бойондороҡһоҙлоҡто нығытыуға булышлыҡ итәсәк. Билдәле һинд күрәҙәсеһе һәм IT-аналитигы Пунит Нахата математик моделдәр, астрология һәм цифрлы алгоритмдар ысулы менән алдан әйтеп биреү һәләтенә эйә. 2026 йылды ул Рәсәй өсөн яңы иҡтисади циклға инеү, халыҡ-ара хәлдең яҡшырыуы, технологик йәһәттән үҫеш алыу осоронон һәм, гөмүмән, яңы кимәлдең башланыуы тип атай. 2026 йыл, уның әйтеүенсә, һынылыш һәм ыңғайға боролош йылы буласаҡ. Ә һынылыш-үҙгәрештәр юлы оҙайлы. Ул тиҙ генә була һалмай, шуға күрә 2026 йылға күрәҙәсе әйткән "яңы кимәл"гә күпер ролен генә башҡарырға тура килмәгәйе, сөнки юраүҙарҙан ысынбарлыҡҡа ҡайтып ҡарағанда, аналитиктар был йылда билбауҙы ҡыҫыбыраҡ бәйләү кәрәклеге хаҡында иҫкәртә.

2026-2028 йылдарға бюджет тәү сиратта оборонаға һәм хәүефһеҙлеккә бик ҙур сығымдарҙы иҫәпкә алып төҙөлгән. Шунда уҡ МХО яугирҙарына түләүҙәр, сик буйы төбәктәрен тәьмин итеү, киберхәүефһеҙлек һәм башҡа ошондай саралар инә. Финанс министрлығы билдәләүенсә, өҫтәмә хаҡҡа һалым (НДС) - мәжбүри юл - ҡаҙнаға ул триллиондан ашыу аҡса килтерәсәк һәм ағымдағы мохтажлыҡтарҙы, иҡтисадты күтәрмәләүгә булышлыҡ итәсәк. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә, үтилләштереү йыйымдары һәм бензинға хаҡтарҙың, шулай уҡ һалымдар һәм штрафтар артыуы ла ошо сәбәптәрҙән сығып аңлатыла.

Стратегик үҫеш һәм милли проекттар буйынса Совет ултырышында Рәсәй Президенты Владимир Путин кисекмәҫтән иҡтисадты структур үҙгәртеп ҡороуҙарға тотонорға ҡушты. Шуға ярашлы, юғары технологиялы тармаҡтарҙа яҡшы түләнеүсе хеҙмәт хаҡтарына эш урындары булдырыу бурысы ҡуйыла. Шул уҡ ултырышта дәүләт башлығы илдә тыуымдың кәмеүе дауам итә, тип борсолоу белдерҙе һәм демография өлкәһендә күрелгән сараларҙың етерлек кимәлдә булмауын билдәләне. Балалы ғаиләләрҙең килемен арттырыу кәрәклегенән сығып, 2026 йылдың 1 ғинуарынан ғаиләһендә сабыйы тыуған хеҙмәткәрҙәргә эш биреүсе тарафынан түләнеүсе сумманың 50 мендән 1 миллионға тиклем арттырылыуы хаҡында әйтте. Шул уҡ ваҡытта әсәләргә ҡарата ғына түгел, ярҙам сараларына атайҙарҙы ла йәлеп итеү кәрәк, тип табыла, сөнки ирҙәр ҙә ғаилә хәстәрлектәре уртаһында ҡайнарға, тәрбиә бурыстарына ваҡыт бүлергә, бала табыу ҡарарын бергәләп хәл итергә тейеш бит. Субъект башлыҡтарының шуе тыуын күрһәткестәренә ҡарап та баһаланасаҡ.

Был айҙың календарь биттәрен барлағанда, ысынлап та, балалар

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров Республика терроризмға ҡаршы комиссияһының һәм оператив штабтың берлектәге ултырышын үткәрҙе. Ҡатнашыусылар яңы йыл байрамдарында йәмәғәт именлеген тәьмин итеү мәсьәләләрен тикшерҙе. Ҡатнашыусылар яңы йыл байрамдары осоронда ведомство-ара эш итеү тәртибен билдәләне. Шулай уҡ ултырышта террорға ҡаршы комиссияның 2025 йылдағы эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре, шул иҫәптән Терроризм идеологияһына ҡаршы комплексы план сараларын үтәү тикшерелде.

✓Яңы йыл байрамдары уңайынан хаҡлы ялдағыларға ғинуар пенсияһы ваҡытынан алда таратыла, тип хәбәр итә Рәсәйҙең Социаль фонды. Социаль фондтың матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, һүҙ ғинуарҙың тәүге яртыһында пенсия алған пенсионерҙар хаҡында бара. Фонд банк аша аҡса алыу көнө 1 ғинуарҙан 11-нә тура килгән пенсионерҙарға алданыраҡ пенсия күсерә. Почта аша пенсия билдәләнгән көндәрҙә бирелә. Почтальондар уны 3 ғинуарҙан тарата башланы.

✓Владимир Путин спортта юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән йәки уларға өлгәшеүгә булышлыҡ иткән граждандарға Рәсәй Президенты стипендияһын алыу хоҡуғына эйә булғандар исемлегенә үҙгәрештәр индереү тураһында указға ҡул ҡуйған. Документҡа ярашлы, илебеҙ йыйылма командаһының беренсе урын алған спортсыларына йыл дауамында 59 280 һум, икенсе урын өсөн - 57 200 һум, өсөнсө урын өсөн 55 120 һум түләнә. Чемпиондар әҙерләгән йыйылма команда тренерҙары - 26 000 һумдан 62 400 һумғаса, белгестәр иһә 26 000 һумдан 55 120 һумғаса аҡса алырға хоҡуҡлы.

✓Башҡортостандан МХО яугире Салауат Яласов Батырлыҡ ордены менән бүләкләнгән. Махсус операцияла ҡатнашыусы, "Башҡортостан" полкының Әхәт Әхмәтйәнов исемендәге уҡсылар ротаһының взвод командиры Салауат Яласов алғы һыҙыҡта ВСУ-ның терәк пунктын юҡ иткән. Лейтенант Яласов етәкселегендәге снайперҙар төркөмө яугирҙары сираттағы хәрби заданиены үтәгәндә артиллерия уты аҫтында объектты юҡ итеп, дошманды әсирлеккә алып, позицияға юғалтыуһыҙ әйләнеп ҡайтҡан.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин яңы байрам - Рәсәй фельдъегер элемтәһе көнөн булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйған. Уны 17 декабрҙә билдәләйҙәр. Дата тарихи традицияларҙы һаҡлау һәм үҫтереү, федераль фельдъегер элемтәһе органдарында хеҙмәт итеүҙең абруйын күтәреү өсөн булдырылған. Фельдъегер элемтәһе - мөһим һәм йәшерен документтар тапшырыу өсөн айырым элемтә системаһы, уны махсус хәрби хеҙмәткәрҙәр йәки хөкүмәт курьерҙары тормошҡа ашыра. Рәсәйҙә был функцияны Дәүләт фельдъегер хеҙмәте башҡара.

*✓ Мәскәүҙең Ҙур театрында традицион Яңы йыл тамашаһы булараҡ күрһәтеләсәк "Щелкунчик" балетына дүрт билет аукционда 1,02 миллионға һатылған (!). Тағы ла бер лот 780 меңгә киткән.*



көндәренә ҙур урын һәм иғтибар бүленгән. Бер яҡтан, был аңлашыла ла: ҡышҡы каникул мәлдәрен мөмкин тиклем файҙалы һәм ҡыҙыҡлы итеп үткәреү ғаиләләрҙең генә түгел, спорт секциялары, ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса түңәрәктәр, кино индустрияһы һәм телевидение хеҙмәткәрҙәренең дә туранан-тура бурысы. Мәктәптәр ҙә был көндәрҙә бикле торорға тейеш түгел. Эш көндәре ваҡыты булмағанлыҡтан, ата-әсәләргә уҡыусылар коллективы менән аралашып, класс етәксеһен, директорҙы күреп, ниндәйҙер мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкинлеге булырға тейештәр, моғайын.

Баш ҡалабыҙ Өфө лә Яңы йыл байрамдарына ентекләп әҙерләнде: Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу балаларҙы каникул буйына тамашаларҙа, спорт программаларында, уйындарҙа ҡаршы алып, оҙатып йөрөй. Был күңелле саралар Өфө ҡалаһының Спорт һарайы майҙансығында, Дим паркында, Ҡашҡаҙан һәм Якутов паркында, Кузнецов затонында, Юнармеецтар скверында, "Өфө муйынсаһы" йәйәүлеләр һуҡмаҡтары буйлап һәм спорт мәктәптәре катоктарында ойошторолдо. Театр һәм мәҙәниәт һарайҙарында, Боҙ аренаһында "Щелкунчик" шоу тамашалары, башҡа спектаклдәр бара.

Яйы сыҡҡанда күңелгә ятмаған бер хәбәрҙе лә өндәшмәй ҡалып булманы: АиФ-Мәскәү аҙналығы яҙып сығыуынса, Мәскәүҙең Ҙур театрында традицион Яңы йыл тамашаһы булараҡ күрһәтеләсәк "Щелкунчик" балетына дүрт билет аукционда 1,02 миллионға һатылған (!). Тағы ла бер лот 780 меңгә киткән. Бына шулай ял итә баш ҡала байҙары. Туйып һикереүме был әллә... кикереүме?

***Был айҙағы иҫтәлекле һәм күренекле көндәр:*** Яңы йыл, Бөтөн донъя тыныслыҡ хаҡына ғибәҙәт көндәре **(1)**, Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн фән һәм техника аҙналығы **(4-10)**, Раштыуа **(7)**, Балалар киноһы **(8)**, Халыҡ-ара "Рәхмәт" **(11)** көндәре, РФ Прокуратура хеҙмәткәрҙәре **(12)**, Рәсәй матбуғаты **(13)** көндәре, Иҫке Яңы йыл **(14)**, Рәсәйҙә ҡышлаусы ҡоштар көнө **(15)**, РФ Тәфтиш комитеты ойошторолған көн **(15 ғинуар, 2011 йыл)**, Халыҡ-ара кәңәшсе-тәрбиәсе, Уйлап сығарыусы балалар көндәре **(17)**, Рәсәйҙә балалар телевидениеһы, Бөтөн донъя ҡар, Бөтөн донъя дин көндәре **(18)**, Ҡырым Республикаһы көнө **(20 ғинуар, 2014 йыл)**, Рәсәй инженер ғәскәрҙәре **(21)**, Халыҡ-ара мәғариф **(24)**, Рәсәй студенттары (Татьяна) көнө, Халыҡ-ара Интернетһыҙ көн **(25)**, Ирле-ҡатынлылар **(26)**, Халыҡ-ара шәхси мәғлүмәттәрҙе яҡлау **(28)**, Халыҡ-ара Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу **(30)** көндәре.

***Һыуығайҙа тыуғандар:***

**3 -** диктор, Башҡортостандың халыҡ артитсы **Наилә Ғәләүетдиноваға - 80 йәш** (1946).

**5 -** композитор, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Нур Дауытовҡа - 70 йәш** (1956).

**7 -** тарихсы, тарих фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Ә.-З.Вәлидов, Р. Кузеев исемендәге премиялар лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Марат Ҡолшәриповҡа - 85 йәш** (1941).

**8 -** йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Светлана Арғынбаеваға - 60 йәш** (1966).

**15 -** тел белгесе, тарих фәндәре кандидаты, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Фәнил Байышовтың тыуыуына - 70 йыл** (1956-1993).

**25 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, тәржемәсе, драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәтәкәре, Рәми Ғарипов, Фәтих Кәрим исемендәге премиялар лауреаты **Тамара (Тимербикә) Ғәниеваға - 75 йәш** (1951).

**27 -** ҡурайсы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Азат Айыҫҡоловҡа - 70 йәш** (1956).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠОРАЛ КЕМДЕКЕ - ЗАМАН ШУНЫҠЫ

**Махсус хәрби операция барышындағы хәҙерге дрондар һуғышы бынан бер нисә йыл элек кенә әле фантастик күренеш булып күренер ине, моғайын. Ә бөгөн был замана ҡоралына күнегеп тә кителде инде. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә пилотһыҙ аппараттар бөгөнгө хәрби яу барышы хаҡында беҙҙең аңыбыҙҙы тамырынан үҙгәртеп ебәрҙе һәм хәрби ҡоралланыу өлкәһендә революция яһаны.**

МХО барышында беҙҙең яугирҙар пилотһыҙ системалар ҡулланыуҙа ҙур һәм бай тәжрибә тупларға өлгөрҙө. Шуның өсөн дә Верховный Баш командующийҙың был йүнәлештә айырым ғәскәр төрө булдырыу тураһындағы ҡарары бик ваҡытлы һәм дөрөҫ булды, ти хәрби эксперттар. Шулай итеп, күптән түгел РФ Ҡораллы Көстәр составында һауала, һыуҙа һәм ҡоро ерҙә пилотһыҙ дрондарҙы файҙаланыу юлы менән хәрби хәрәкәттәр алып барыу өсөн тәғәйенләнгән яңы төр - Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре (ВБС йәки ВБпС) - барлыҡҡа килде. Ләкин быны менән генә эш бөтмәй: хәҙер махсус курс-мәктәптәрҙә пилоттар әҙерләү башланды, шул уҡ ваҡытта дрондар етештереү дәүләт әһәмиәтендәге бурыс булараҡ ҡарала.

РФ Президенты Владимир Путин был мәсьәләне даими контролдә тота һәм яҡындан ҡыҙыҡһына. Пилотһыҙ аппараттар разведкалау, радиоэлектрон көрәш, территорияларҙы миналау йә булмаһа миналарҙан таҙартыуҙа ҡулланыла. Ләкин иң беренсе сиратта, Президент билдәләүенсә, улар ҡорал булараҡ юҡ итеү сараһы ла. "Улар бронетехниканы, терәк пункттарҙы, элемтә системаһын, транспортты, дошмандың тере көсөн сафтан сығарырға һәләтле. Бөгөн беҙҙең дрон операторҙары иҫәбендә дошмандың байтаҡ ҡына - 50 процентҡа яҡын техникаһы һәм объекттары юҡ ителде һәм зыян күрҙе",- ти Президент. Рәсәй Геройы, хәрби журналист Евгений Поддубный әйтеүенсә, дрондар ҡайһы бер осраҡтарҙа штурмлаусы авиацияны ла алыштыра ала һәм яу ҡырында пехотаның хәрби хәрәкәттәренә булышлыҡ итә. Дрондарҙың һуғыш тактикаһына ғына түгел, стратегик планлаштырыуға ла йоғонтоһо ҙур. Ҡыҫҡаһы, улар хәрби хәрәкәттәр алып барыу ысулдарын күпкә үҙгәртеүгә өлгәште.

Беҙҙең дрондар төрҙәренә килгәндә, иң тәүгеләрҙән булған "Упырь" дошмандың Днепр аша йөҙөп сығып, беҙҙең яҡта нығынырға маташыусы боевиктарҙың йөҙәрләгән кәмәһен һыуға батырҙы. Уны ябай гараж оҫтаханаһында хәрби тәжрибәһе булған ир-егеттәр йыйылып, деталдәрен үҙҙәре һатып алып, ҡулдан йыйып башлап ебәргәйне. Тағы бер дрон - "Ланцет" иҫәбендәге юҡ ителгән объекттар һаны меңәрләп иҫәпләнә. "Герань" камикадзе дроны ла киң билдәлелек яуланы һәм дошман боевиктарының ҡотон алыуын дауам итә. Разведкалаусы "Лелека", самолет рәүешендәге "Бобер" һәр береһе үҙ бурыстарын уңышлы башҡара. Ә бына бер юлы дүрт миномет снаряды аҫып осоусы "Мәскәй әбей" ("Баба Яга") иң күп таралған бомбаға тотоусы аппарат, ул өҫкө яҡтан Starlink спутник интернеты тәрилкәһенә тоташтырылған. Махсус операция барышында Һауа һөжүменә ҡаршы оборона (ПВО) көстәре тарафынан 80 меңдән ашыу һауалағы сәп юҡ ителгән булһа, шуларҙың 90 проценты әлеге беҙҙең дрондар өлөшөнә тап килә. Әйткәндәй, ҡоралланыу буйынса яңы дәүләт программаһы сиктәрендә эшләнеүсе тағы бер яңылыҡ - ПВО-ның универсаль системаһы элементы - лазер ҡоролмаһы. Әлеге ваҡытта ул полигондарҙа һынау үтә. Күҙгә күренмәҫ нур дошмандың самолет рәүешендәге осоусы аппараттарын ҡыйратып төшөрә ала.

Тағы ла шуныһын әйтергә кәрәк: уйлап сығарыу һәләтенә эйә, яңынан-яңы алымдар ҡулланыусы беҙҙең зирәк БПЛА операторҙары дошмандың "Мәскәй әбейе"нә һунар ойошторған. Эйе, боевиктар ҙа йоҡлап ятмай: украиндарҙың ауыр дрон-бомбалаусы аппараттары беҙҙең яугирҙар ҡанын әҙ боҙманы, иллә. Ниһайәт, уларға ҡаршы көрәш серен тапҡан беҙҙең отҡор егеттәр. 3 метрлыҡ диаметрлы ескә генә балыҡсы ауы пиропатрон ярҙамында атылып сыға ла, разведкалаусы "Мавик" дроны күрһәткән дошман дронының винттарын сырмап та ала. Быныһы инде тап халыҡсан зирәклекте күрһәтеүсе "ҡоралланыу" алымы һәм ул бик арзанға ла төшә икән. Сауҙа нөктәләрендә 70-100 мең торған был ауҙарҙы яугирҙар 3D принтерында сығарып алалар һәм ул ни бары 1200 һумға төшә, ә украиндарҙың "Мәскәй"е - һәр береһе 2 млн һум самаһы! Йыл ярым эсендә беҙҙекеләр 2,5 мең дошман дронын ошондай ысул менән бәреп төшөргән, тип яҙа KP.RU хәрби хәбәрсеһе Григорий Кубатьян үҙенең ошо хаҡтағы репортажында.

Ләкин украин дрондарын бәреп төшөрөү менән генә сикләнмәй икән егеттәр, һәр ғәмәлгә әмәл бар, тигәндәй, трофей аппараттарҙы улар яңынан осорға әҙерләп, уны дошмандың үҙенә ҡаршы тәғәйен задание менән кире осора. "Рәсәй сәнәғәте ҡоралланыу етештереүҙә ҡеүәтле һикереш яһаны, - тине РФ Президенты Владимир Путин ҡоралланыу дәүләт программаһы буйынса кәңәшмәлә.- Шәхси броняле һаҡлағыс саралары етештереү - 18 тапҡырға, юҡ итеү ҡоралдары һәм боеприпастар эшләп сығарыу 22 тапҡырҙан күберәккә артты". Бынан алдараҡ иһә Президент Рәсәйҙең донъяла тиңе булмаған алдынғы ҡоралланыуға өлгәшеүе хаҡында белдерҙе һәм илдәге ядро көстәренең заманса кимәле 92 процентҡа барып баҫыуы хаҡында әйтте. Шул уҡ ваҡытта ул "Орешник", "Циркон", "Сармат"кеүек ракеталар менән бер рәттән, яңы төр ҡоралдар иҫәбендә "Авангард" тауыш тиҙлегенән юғары аэробаллистик хәрби ҡоролма менән "Буревестник" алыҫҡа осоусы континенталь-ара ҡанатлы ракетаны ла иҫкә төшөрөп китеүҙе кәрәк тапты.

Ошондай көстәр тигеҙһеҙлеге шарттарында ла, РФ Сит ил эштәре министры урынбаҫары Сергей Рябковтын, Украина конфликты тамамланыуға күп ҡалманы, тип белдереүенә ҡарамаҫтан, Киев властары Евросоюз менән берлектә, теләһә ниндәй тыныс килешеүҙәрҙе лә ҡыйратырға икеләтә көс туплаясаҡтары хаҡында белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы Башҡортостан буйынса баш идаралығының элекке етәксеһе Марат Латипов Өфө мэрының граждандар оборонаһы буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. Бынан алдараҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Марат Латиповҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ҡотҡарыусыһы" тигән маҡтаулы исем биргәйне.

✓Тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса өфөләр Мостай Кәрим скверы исемен рәсмиләштерҙе, тип хәбәр итәләр баш ҡала хакимиәтенән. Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 98 проценты Киров һәм Мостай Кәрим урамдары киҫелешендәге скверға Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен биреү тураһындағы тәҡдимде хуплаған. Ҡаршы 2 процент ҡына (8 кеше) тауыш биргән.

✓Башҡортостанда "Айыҡ водитель" операцияһы бара. Шәхси составтың күпселегеге ошо эшкә йәлеп ителгән. Владимир Севастьянов һүҙҙәренсә, республикала йәшәүселәр Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының ышаныс телефоны (8-347-279-32-92), шулай уҡ телеграм мессенджерына эскән килеш рулгә ултырған водителдәр тураһында аноним рәүештә хәбәр итергә мөмкин. Йыл башынан республика юлдарында 286 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, 100 кешенең ғүмере өҙөлгән, 328-һе имгәнгән.

✓Һайланма тикшереү мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда 2025 йылдың июль - сентябрендә 15 йәштән өлкән эшсе көстәр һаны 1,883 миллион кешенән артҡан, тип хәбәр иттеләр Башстатта. Уларҙың 1,851 миллиондан ашыуы, йәғни эшсе көс-тәрҙең 98,3 проценты иҡтисади эшмәкәрлек менән мәшғүл. Тағы 32,3 мең (1,7 процент) - халыҡ-ара ойошма критерийҙарына тап килгән эшһеҙ халыҡ, йәғни эш йәки килемле шөғөлдәре булмаған, эш эҙләгән кеше-ләр.

✓Иғтибар: "Роскачество" биш сауҙа маркаһы ыуылдырығында эсәк таяҡсаһын тапҡан: "Московский рыбокомбинат", "Русское море", "Красное золото", "Деликатеска" һәм "Красная икра". Шул уҡ ваҡытта был өлгөләрҙә сальмонелла һәм стафилококк кеүек хәүефле патогендар, шулай уҡ паразиттар һәм уларҙың балағорттары табылмаған. Ведомство бөтәһе 62 сауҙа маркаһының ҡыҙыл ыуылдырығын тикшергән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Һутта - Илаһ ҡөҙрәте

Уй-хыялдарың менән ғаләмдәргә ашһаң, йыһандарҙа йөҙһәң дә, иң хозуры, хайран иткәне, арбағаны - ғәзиз ер! Тәбиғәт тылсымы ғәжәп: ниндәй генә үҫемлектәр үҫмәй, гөл-сәскәләр балҡымай, емеш-еләк өлгөрмәй?.. Еркәйебеҙ - йәннәт, үҙе бер мөғжизә! Кешенең йәме, йәне, сәләмәтлеге, оҙон ғүмере өсөн унда барыһы ла бар.

Күк һыуы менән ҡойонған, ысығынан сафланған, ҡояш нурҙарынан наҙланған сәскәләргә бал ҡорттары ҡуна, илаһи һутшәрбәт һура һәм хуш-еҫ аңҡытып торған йорттарына ташый. Һутта иһә - Илаһ ҡөҙрәте, тәндә һәм йәндә һауыҡтырыу, йәшәртеү тылсымы. Бал ҡорттары бар ғилемдә белеп тыуа, тиеүҙәре раҫтыр, күрәһең. Көнитмештәре - үрнәк, фәһем, ризыҡтары - им, шифа, асыл-булмыштары - сер-йомғаҡ...

Оҙаҡ йылдар ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеүселәр, бал ҡорттарының ҡылыҡ-ғәҙәттәрен күҙәтеүселәр уларҙың хәрәкәттәр, өндәр, еҫтәр ярҙамында аңлашыуын яҡшы белә. Эҙәрмән ҡорттар ҡайҙа һут, һеркә барлығын байҡау өсөн сәфәр ҡыла. Хәр урынды тапҡас, был хаҡта улар бик ентекләп эшсе ҡорттарға аңлата: ҡайһы тарафта, ниндәй алыҫлыҡта икәнен, ризыҡтың күпмелеген... Мәғлүмәт ғәмәлдә бейеү аша еткерелә. Эҙәрмән бал ҡорто кәрәҙ буйлап, йә һул, йә уң яҡҡа йүгереп, боролоп, түңәрәк яһап бейей. Был ҡыуаныслы хәбәр килтергән бал ҡорто бейеүе була ла инде.

Был күренештең асылы тәбиғәткә, үҫемлектәр донъяһына һәм йәшәүҙә дауам итеүгә ҡөҙрәт биргән ризыҡ табыуға бәйле. Балдың тылсымы - үҫемлектәрҙең күҙәнәктәренән сыҡҡан, һабаҡтарынан, япраҡтарынан йөрөгән, сәскәләр үрсеү өсөн бүлгән һут-шыйыҡсанан. Тап ошо илаһи һеркәләнеү мәлендә бал ҡорттары сәскәләрҙән һут йыя һәм уны эшкәртеп, йөгни биҙҙәрендәге ферменттар менән байытып, һыуын айырып, шифалы бал хасил итә.

### Ҡырағай бал ҡорто һәм солоҡ балы

Көньяҡ Урал төйәгендә, Башҡорт иленең тау-урмандарында ла донъяны йәнләндереп һәм йәмләндереп ҡырағай бал ҡорттары гөжләп, выжлап торған. Ағас ҡыуыштарына оялаған был ғәжәп бөжәктәрҙең балын татыу, артабан солоҡтар соҡоп, уларҙы бағыу, аҫрау боронғо башҡорттарҙың яраҡҡан шөғөлө булған. Солоҡ хужалыҡтары барлыҡҡа килеп, һәр хужа солоҡ ағасына үҙ тамғаһын киргкән. Оя бал ҡорттарына уңайлы шарттар тыуҙырып, йылыны һаҡларлыҡ итеп яһалған. Ояға һыуһар, айыу йоғонмаһын өсөн ауыҙ яғына тукмак эленгән. Бал ҡорттарына яҙғы байҡауҙа кҫтәр өҫтәлмә туҡландырылған, буш солоҡтар өсөн кәрәҙ алынған. Көҙгө байҡау мәлендә артыҡ бал йыйылған, оялар, кҫтәр ҡышлауға әҙерләнгән. Хәҙерге ваҡытта башҡорт бал ҡорто ағас ҡыуыштарында, солоҡтарҙа, түмәр умарталарҙа һәм таҡта умарталарҙа Бөрйән, Белорет, Ишембай, Йылайыр, Күгәрсен, Мәләүез төбәктәрендә һаҡланған һәм аҫрала. Ҡыйғы районының Ҡолбаҡ, Аҫылғужа ауылдары йәнәшендәге урмандарҙа ла солоҡ ҡорттары барлығы асыҡланды.

Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.
(Дауамы бар).

ДЕПУТАТ АҢЛАТА

# БУШЛАЙ ЯРҘАМ



**Күптәр үҙ хоҡуҡтарын белмәй, шуға йыш ҡына алдана, тейешле түләүҙәр һәм льготаларҙан мәхрүм ҡала. Ауыр тормош хәленә юлыҡҡандар ҡайҙа барырға белмәй зар-интизар була.**

Башҡортостанда бушлай хоҡуҡи ярҙам күрһәтеү дәүләт бюроһы эшләй. Төрлө кимәлдәге юридик ярҙам ғаризалар, ялыуҙар һәм башҡа документтар төҙөүҙә, шулай уҡ судтарҙа, дәүләт һәм муниципаль органдарҙа һеҙҙең мәнфәғәттәрегеҙҙе яҡлауҙы үҙ эсенә ала. Шуныһы мөһим, хәҙер был система сиктәрендә хеҙмәт бөхәстәре буйынса консультация ғына түгел, ә хеҙмәт хоҡуҡтарын яҡлау өсөн судта тулы хоҡуҡлы вәкиллек тә алырға мөмкин.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары "Рәсәй Федерацияһында бушлай юридик ярҙам тураһында"ғы федераль закон нигеҙендә бушлай юридик ярҙам алыу хоҡуғына эйә. Шулай уҡ аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр, етем йәки ғәрип балалар, I һәм II төркөм инвалидтары, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән күп балалы ата-әсәләр (өлкәненә 18 йәш йәки көндөҙгө уҡыуҙа 23 йәш тулғансы), баланы үҙ ғаиләһенә тәрбиәгә алырға теләүселәр (баланы тәрбиәгә урынлаштырыу мәсьәләләре буйынса); уллыҡҡа алыусылар (уллыҡҡа алыу мәсьәләләре буйынса); оло йәштәге граждандар һәм социаль хеҙмәтләндереү ойошмаларында йәшәгән инвалидтар һәм башҡалар бюроға мөрәжәғәт итә ала. Уҡыу осоронда ата-әсәһен юғалтҡан студенттарға мәнфәғәттәрен яҡлауға бәйле мәсьәләләр буйынса бушлай юридик ярҙам алыу хоҡуғы ҡаралған. Бюроның хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә район-ҡалаларға сыға, халыҡты ҡабул итә. Адрестар һәм телефондар менән тулыраҡ мәғлүмәт интернетта бюроның рәсми сайтында бар. Үҙ хоҡуҡтарығыҙҙы белегеҙ.

# БӘХӘСТЕ ХӘЛ ИТЕҮ



**"Рәсәй Федерацияһында умартасылыҡ тураһында" федераль Закондың 16-сы статьяһына һәм "Пестицидтар һәм агрохимикаттар менән хәүефһеҙ эш итеү тураһында" федераль закондың 22-се статьяһына үҙгәрештәр индерелде. Рәсәй умартасылар берләшмәһе үтенесе буйынса мин был закон проектын комитеттарҙа ентекле тикшереүҙәрҙә ҡатнаштым.**

2020 йылда умартасылар һорауы буйынса ауыл хужалығы ерҙәрендә ағыулы химикаттар ҡулланылаcағы тураһында алдан хәбәр итеү тураһында закон ҡабул ителгәйне. 2022 йылда умартасылар йәнә законға үҙгәрештәр индереүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Улар ауыл хужалығы предприятиелары баҫыуҙарҙы эшкәртеү тураһында ике ай алда йәки эш башланыуға бер көн ҡалғас хәбәр итә, алдан аныҡ датаны күрһәтмәй, тип зарланды. Умартасылар бер көн эсендә генә умарталарын алып өлгөрмәй, һөҙөмтәлә бал ҡорттары ағыулы матдәләрҙән ҡырыла икән.

Бал ҡорттарының ағыулы химикаттарҙан һәләк булыуына юл ҡуймау өсөн ауыл хужалығы предприятиелары умартасыларға һәм 7 км радиустағы тораҡ пункттарҙа йәшәүселәргә эш башланыуға 10 көндән дә алдараҡ һәм 5 көндән дә һуңға ҡалмайынса хәбәр итергә бурыслы.

Был осраҡта аграрийҙар ҡаршы сыҡты. Мәҫәлән, улар 10 көн алда "15 июлдә баҫыуҙарҙы ҡороҡкостарға ҡаршы пестицидтар менән эшкәртәбеҙ", тип хәбәр итә, әммә был көндө ямғыр яуа йәки көслө ел ҡуба икән, ти. Һөҙөмтәлә аграрийҙар баҫыуҙарҙы эшкәртә алмай. 16 июлдә иһә улар баҫыуҙарҙы эшкәртергә хоҡуклы түгел. Шуға күрә баҫыуҙарҙы эшкәртеү өсөн биш көн биреүҙе һоранылар. Мин быға ҡаршы булдым, сөнки йәйге эҫелә умарталарҙың биш-алты көнгә ябылыуы (пестицидтар менән эшкәртеү осоро) арҡаһында бал ҡорттары ҡырыласаҡ.

Умартасылар һәм аграрийҙар менән күп тапҡырҙар осрашыуҙарҙан һуң берҙәм фекергә килдек. Законда федераль, төбәк һәм урындағы (муниципаль) власть кимәлендә ғәҙәттән тыш хәл булғанда ғына умартасыларға 24 сәғәт эсендә пестицидтар ҡулланыуы тураһында мәғлүмәт биреү рөхсәт ителә тип билдәләнде. Шул уҡ ваҡытта беҙ ауыл хужалығы ойошмаларының пестицидтар ҡулланыу өсөн генә нигеҙһеҙ ғәҙәттән тыш хәл индереү мөмкинлеген тыйҙыҡ.

# ЭШЛӘҮСЕ АТАЙ-ӘСӘЙҘӘРГӘ



**Эшләүсе атай-әсәйҙәр өсөн 2026 йылдың 1 ғинуарынан ғаилә түләүҙәре индерелә. Был ике һәм унан күберәк бала тәрбиәләүсе ата-әсәләр, әгәр уларҙың килеме төбәк йәшәү минимумынан 1,5-тән кәм булһа, НДФЛ-дың бер өлөшөн кире ҡайтарасаҡ, тигәндә аңлата.**

18 йәшкә тиклем ике һәм унан күберәк балаһы булғандарға (бала көндөҙгө уҡыу формаһы буйынса белем алһа - 23 йәшкә тиклем) яңы түләүҙәр булдырылды. Эшләүсе атай-әсәйҙәрҙең (уллыҡҡа алыусыларҙың, опекундарҙың, попечителдәрҙең) 2025 йылдағы дөйөм килеменән тотолған физик шәхестәрҙең килеменә һалымдар (артабан - НДФЛ) түләнгән осраҡта һәм ғаиләнең йән башына уртаса килеме төбәктә билдәләнгән йәшәү минимумынан 1,5 тапҡырға артмаған осраҡта түләү алыуға хоҡуҡы буласаҡ. Бындай атай-әсәйҙәргә 2025 йыл өсөн түләнгән 13 процент НДФЛ-дың 7 проценты кире ҡайтарыла.

Миҫал өсөн ике бәлиғ булмаған бала (йәки береһе студент) үҫтереүсе ғаиләне алайыҡ. 2025 йылда атай-әсәйҙең йәки береһенең уртаҡ килеме 1 миллион һум тәшкил итә, ти. Уларҙан йылына 13 процент НДФЛ тотола, был - 130 мең һум. 2025 йылда Башҡортостанда йәшәү минимумы 15 782 һум күләмендә билдәләнгән. 1,5 тапҡырға ҙурыраҡ күләм был ғаиләнең һәр ағзаһы өсөн 23 673 һум тәшкил итә. Тимәк, уларға 70 мең һумды кире ҡайтарырға мөмкин. Сөнки ғаилә ағзаһына айлыҡ килем 1,5 тапҡыр йәшәү минимумынан түбәнерәк (ғаилә килеме айына 83 333 һум тәшкил итә, һәр береһенә - 20 833 һум). Һөҙөмтәлә, улар 2025 йылда НДФЛ-ды 13 процент түгел, ә 6 процент түләйәсәк. Был ярҙам менән түбән эш хаҡы арҡаһында ярҙамға мохтаждар файҙалана ала. Атай-әсәйҙәрҙең йәки уларҙың береһе рәсми рәүештә эшләүе мотлаҡ.

Зариф БАЙҒУСҠАРОВ,
Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ЙЫЛАН АУЫҘЫНА ИНМӘНЕК!




**Мин Черниковка биҫтәһендә тик урыҫтар ғына йәшәй икән тип уйлай инем. "Пролетарский район" тип атайҙар ине бит. Элек иғландарға "Черниковку не предлагать!" тип тә өҫтәп ҡуялар ине.**

Тик урыҫтар ғына йәшәй тип уйлап, мин дә урамда, магазиндарҙа тик рус телендә һөйләшәм. Бер көндө магазинда һөт ҡабын бер тапҡыр ғына ҡулланыла торған төргәккә төрөп, кассаға аҡса түләргә баҫтым. Һатыусы руссалап: "Нигә төрҙөгөҙ", - тип асыуланды. Мин шым ғына: "Уәт, бынан да әрләп ҡайтаралар", - тинем. Һатыусы, ҡыҙарынып, башҡортсалап: "Юҡ, әрләмәйем, былай ғына әйтәм бит", - тип ысҡындырмаһынмы. Әлбиттә, элегерәк һәр ризыҡты һатыусылар үҙҙәре төрөп бирәләр ине. Шулай тейеш ине. Тора-бара ул ғәҙәттәрен ташланылар. Әгәр мин рус телендә "Не ругайтесь!" тип әйтһәм, нисектер, ҡаты килеп сығыр ине. Ә башҡорт телендә йомшаҡ ҡына әйтелгән һүҙ һатыусының күңелен йомшартты. "Бәй, башҡортса аңлаған кеше бар икән", - тигән булып, һатыусыға йылмайҙым. Ул "Ғәфү итегеҙ", - тине.

Тағы бер көндө магазинға инеп, алаһы тауарымды алып, кассаға аҡса түләп, ризыҡтарымды сумкама һалып та өлгөрмәнем, артымдан сиратта торған ҡатын мине төртөп тигәндәй һатыусыға аҡса һона. Мин уға тыныс ҡына: "Ашыҡмағыҙ", - тип әйткәйнем, һатыусы ла, һатып алыусы ла минең әйткәндә аңлап йылмайышты. Күрәһең, үҙ туған телендә әйтелгән һүҙҙе ишетеү матур яңғырағандыр уларға ла. Ә мин, был магазинда ла башҡорса аңлаусылар бар икән, тип ҡыуандым.

Тағы бер магазинда икмәк һатып алдым да, рус телендә "Спасибо!" тигәйнем, һатыусы миңә ҡарап йылмайҙы. Уның йылмайыуына яуап итеп, "Рәхмәт, ҡыҙым!" тинем тағы ла. Ул аңланы һәм үҙенең дә башҡортса һөйләшеүен белдерҙе.

Шундай тәжрибә үткәреп йөрөй торғас, мине танып бөттөләр, ахры, үҙем йәшәгән йорт эргәһендәге магазиндарҙа. Хәҙер магазиндарҙа мине "Һаумыһығыҙ! Иҫәнмеһегеҙ!" тип сәләмләйҙәр. Миңә күңелле.

Беҙ мәктәптә уҡыған йылдарҙа "Әгәр төркөмдә бер кеше генә башҡорт телендә әйтелгән һүҙҙәрҙе аңламай икән, русса һөйләгеҙ, был ҡанун!" - ти торғайнылар. Был ҡануны

*✓ Рустар буш урынға күсеп килмәгән. Быға тиклемге осорҙарҙа Өфө ярымутрауы һәм уның тирә-яғы әүҙем рәүештә үҙләштерелә бара. Ҡала территорияһында күп һанлы археологик объекттар табылыуын ошоға дәлил итә.*



ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Фларит Сөнгәтов:*** Әйе, ошо территорияла, аҡрынлап булһа ла, тормош дауам иткән, рустар килгәнгә тиклем дә, артыҡ күп булмаған хәлдә лә, кешеләр йәшәгән, тип раҫлап була.

***Илшат Бәхшиев:*** Рустар буш урынға күсеп килмәгән. Быға тиклемге осорҙарҙа Өфө ярымутрауы һәм уның тирә-яғы әүҙем рәүештә үҙләштерелә бара. Ҡала территорияһында күп һанлы археологик объекттар табылыуын ошоға дәлил итеп килтереп була. Бында иртә урта быуаттарға ҡараған ҡомартҡылар менән бер рәттән, күп булмаһа ла, Алтын Урҙа дәүере һәм һуң урта быуаттар осоро менән даталанған археологик артефакттар ҙа табылды. Ғөмүмән, беҙ Башҡортостанда археологик тикшеренеүҙәрҙең иң динамикалы этабын кисерәбеҙ.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Хәҙер ниндәй датаны Өфөгә нигеҙ һалынған йыл итеп һанарға мөмкин? Ҡалаларҙың барлыҡҡа килеүе датаһын раҫлауҙың стандарт процедураһы бармы?

***Рәмил Рәхимов:*** Махсус рәүештә килешелгән һәм башҡарыла торған процедура юҡ. Ғәҙәттә, төрлө варианттар була: ҡаланың йәше яҙма сығанаҡтарҙа иҫкә алынған дата буйынса, археологик табылдыҡтарҙы иҫәпкә алып, риүәйәттәргә һылтанып, йә иһә теге йәки был ғилми монографияларҙа килтерелгән версиялар нигеҙендә билдәләнә. Йыш ҡына хронология урындағы элиталарҙың - чиновниктарҙың, ғалимдарҙың, төбәкте өйрәнеүселәрҙең, урындағы власть органдарының ҡараштарына ярашлы билдәләнә. Муниципаль власть органдары, мәҫәлән, ҡала советы билдәле бер йылды тәҡдим итеп, ҡалала йәшәүселәр риза булһа, шул дата ҡаланың йәшен билдәләй. Әлбиттә, был датаның ысынбарлыҡҡа тап килмәүе лә мөмкин.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** 2024 йылда Өфө рәсми рәүештә үҙенең фараз ителгән 450 йыллығын билдәләне, әммә, алдараҡ әйтелгәнсә, иҫәп башы итеп 1574 йылды күрһәтеү риүәйәттәрҙән алынған, шулай булғас, был датаны тейешле кимәлдә нигеҙле тип әйтеп булмай. Унан айырмалы рәүештә, иҫке режим замандында ҡабул ителгән 1586 йыл архив документтары менән раҫланған. Шул уҡ ваҡытта Өфө ярымутрауы территорияһында һәм уның тирәяғында барса урта быуаттар дауамында ҡала тораҡтары, ҡәлғәләр һәм ауылдар булыуы хаҡында нигеҙле дәлилдәр бар.

***Игорь Кызласов, тарих фәндәре докторы, РФА Археология институтының урта быуаттар археологияһы бүлегенең әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре:*** Бер генә лә рус административ үҙәге буш урында барлыҡҡа килмәгән. Иртә Мәскәү дәүләтселеге яңы ерҙәрҙә үҙенең ҡәлғәләрен, острогтарын, административ пункттарын төҙөткәндә электән килгән ҡағиҙә буйынса эш итә: яңы үҙәктәр быға тиклем дә административ нөктә ролен үтәгән урындарҙа хасил ителә. Күсем хандың Себерҙә Искер тигән ҡалаһы булған, ә уның янында Тобольск ҡәлғәһе төҙөтөлә. Әгәр ҙә Өфө территорияһында рустарға тиклемге административ үҙәк булмаһа, рустар ҙа бында үҙҙәренең острогын ҡуймаҫтар ине. Өфөнөң рус ҡалаһы булараҡ барлыҡҡа килеүе - тере, нормаль тарихи процесс һөҙөмтәһе, уны ошо ерҙә борондо дәүерҙәрҙән бирле барған урбанлашыуҙың бер этабы итеп ҡарарға кәрәк.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Өфө кешеләре үҙҙәре йәшәгән ҡалаға нисә йәш булыуы хаҡында бик күптән уйлана башлаған. Риүәйәттәр, баҫылып сыҡҡан документтар, ғаилә хроникалары Өфөлә йәшәүсе бәләкәй генә төркөмдөң күскенселәр өйөрҙәренә һәм Пугачев шайкаларына ҡаршы геройҙарса ҡаршы тороуы картиналарын һүрәтләй. Ҡала башлығы Дмитрий Волков "Уфимские губернские ведомости" гәзитендә баҫылған мәҡәләһендә Өфө тарихы хаҡында шундай уҡ тасуирлау алымын ҡулланған: "Это целый ряд насквозь промокших русской кровью страниц, говорящих о неслыханной стойкости..."

Православие донъяһының уны йәоторға теләүсе башҡа дини дошмандар диңгеҙендәге бәләкәй генә утрауы хаҡындағы нарративты Рустең дала менән әлмисаҡтан бирле көрәшеүе тураһындағы милли мифтың урындағы варианты итеп ҡарарға кәрәк. Шуға күрә XIX быуатта йәшәгән Өфө кешеләре өсөн, ҡаланың рустарға тиклемге осорон инҡар итеп, уның рустар дәүерен генә иҫәпкә алыуы тәбиғи.

**(Дауамы. Башы былтырғы 37-44-се, 46-51-се һандарҙа).**

---

кем уйлап сығарып, мейеләребеҙгә һеңдерҙе икән, тип уйлайым хәҙер. Башҡорт теленең дошманылыр ул. Хәҙер бына шул ҡанунды төҙәтә башланыҡ буғай. Күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәновтың туған телде ҡулланыуға иғтибарҙың артыуына ҡыуанып: "Әтеү, баҡылдай, баҡылдай йыландың ауыҙына инеп китеп бара инек бит", - тип кинәйәләп әйтеүе һәр саҡ иҫемдә.

**Айгөл УСМАНОВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

## ТАНЫШ БУЛЫҒЫҘ!

**Башҡорт теле көнөндә республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Сорғотта тыуған, әммә тормошон беҙҙең республика менән бәйләргә теләгән һәм быға һис тә үкенмәгән йәш яҡташыбыҙ хаҡында яҙып сыҡты.**

"Таныш булығыҙ, Савелий Функ. Уның әсәһе - Ишембай районынан. Атаһының нәҫеләндә башҡорттар, урыҫтар, немецтар булған, - тип яҙҙы Радий Хәбиров. - Савелий 4 йәшендә башҡорт халыҡ бейеүҙәре менән шөғөлләнә башлай. Ата-әсәһе уны "Шатлыҡ" ансамбленә бирә. Малай төбәктә уҙғарылған барлыҡ ижади конкурстарҙа әүҙем ҡатнаша. Ә 2018 йылда беҙҙең "Байыҡ-2018" республика телевизион конкурсында "Рәсәйҙә башҡорт бейеүен үҫтереүгә тос өлөш индергәне өсөн" дипломы менән бүләкләнә. Халыҡ бейеүҙәре менән шөғөлләнгәндә унда башҡорт мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уяна. Савелий Башҡортостанда йәшәргә һәм уҡырға хыяллана башлай".

Сорғотта Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалы - башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге эшләп килә. Тап ошонда, тарихи-мәҙәни үҙәк ҡарамағындағы йәкшәмбе мәктәбендә, Савелий башҡорт телен өйрәнә башлай. Бер нисә йыл элек төрлө төбәктәрҙә бер нисә шундай үҙәк асылды.

Уҙған йылдың мартында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты үткәргән "Беренсе" олимпиадаһы һөҙөмтәләре буйынса Савелий Функ гимназияға ҡабул ителде. Хәҙер егет 11-се класта уҡый һәм "Аҡ Йондоҙ" ансамблендә бейеү менән шөғөлләнә.

"Савелийға уңыштар теләйем. Араларҙың алыҫлығына ҡарамай, малайҙа туған теленә һәм мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләгән ата-әсәһенә, туғандарына рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм, - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров. - Туған телдең, Тыуған илдең ҡәҙерен беләйек!"

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Башҡорттарҙа бер ерҙә лә ҡошсолоҡ әһәмиәтле кимәлгә етмәгән. Шуға ла улар бары тик ҡаҙ һәм тауыҡ үрсеткән. Башҡорттар ҡасан ҡошсолоҡ менән шөғөлләнә башлаған, тигәндә, беҙ бары тик уларҙың XVIII быуаттың икенсе яртыһында ҡаҙ һәм тауыҡ аҫрағанын ғына беләбеҙ. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тураһында И.И. Лепехин, йәйләүгә күскәндә ҡаҙ һәм тауыҡ тотоусылар уларҙы ҡышлау урынында үҙ аллы аҙыҡ табыуға ҡалдырып киткән; көҙөн инде ҡышлауға ҡайтҡанда күпме ҡош-ҡорт тере ҡалһа, шуның менән мөрхәтһенгәндәр, тип яҙған. XIX быуат һуңында, XX быуат башында ла башҡорттар үҙҙәре аҫраған ҡош-ҡортҡа артыҡ иғтибарлы булмаған. Күл һәм йылға буйында йәшәүселәр, нигеҙҙә, ҡаҙ тотҡан. Ҡышлыҡҡа улар ике-өс инә, бер ата ҡаҙ алып ҡалған. Инә ҡаҙҙар йомортҡа һала башлаған апрель айында уларҙы талдан махсус үрелгән, диаметры 80 сантиметр булған ҡаҙ ояһына ултыртҡандар. Ояға һалам йәки күрән һалғандар. Бәпкәләр сыҡҡас, уларҙы ҡарау, хәстәрләү онотола. Йәйгеһен ҡаҙҙар бик һирәк осраҡта ғына йортҡа ҡайта. Ғәҙәттә, улар йылға йәки күл буйҙарында йөрөп, һалҡындар башланғас ҡына хужаларына ҡайтҡан. Ҡайһы бер ваҡыт башҡорттар ҡаҙ баҫырға ултырғанда уның аҫтына ҡыр ҡаҙҙарының йомортҡаһын да һалған.

Башҡорттар Урал буйында рустар ниндәй ҡаҙ аҫраған, шул тоҡомло ҡаҙҙарҙы үрсеткән. Көҙ еткә, улар оса башлаған һәм ҡайһы берҙә бик алыҫҡа ла осоп киткән; ҡыр ҡаҙҙары менән иген баҫыуҙарына ла төшкән. Ҡаҙҙарҙың итен аҙыҡ итеп файҙаланғандар, ә мамығынан мендәр һәм түшәк эшләгәндәр.

Тауыҡтарҙы һәр ерҙә һәм ҡаҙҙарға ҡарағанда күберәк күләмдә аҫрағандар. Улар бары тик ҡышлау урынынан йәйләүгә алыҫҡа сығып киткән ғаиләләрҙә генә булмаған. Әгәр башҡорттар ҡаҙҙарҙы бер ни тиклем тәрбиәләһәләр, тауыҡтарға бөтөнләй иғтибар итмәгәндәр. Улар өсөн ояларҙ, даими ябылған йәки ваҡытлыса ятмалар төҙөмәгәндәр, ашатмағандар һәм бер иғтибар ҙа бүлмәгәндәр. Һөҙөмтәлә башҡорттарҙа ярымҡырағай тауыҡтарҙың айырым тоҡомо барлыҡҡа килгән. Улар бәләкәй һәм еңел булған, алыҫ араларға еңел генә оса алған һәм шәп йүгергән. Үҙ алдарына баҫып үрсегән. Ҡырағайланған һәм үҙ аллыға әйләнгән башҡорт тауығы торлаҡ йорт эргәһендә үҙенә оя ҡорған. Бәпкә сығарғас, ул йыртҡыстарҙан бәпкәләрен һаҡлаған һәм хәүеф яҡынлашҡанда уларҙы ҡанаттары аҫтына йыйған. Башҡорттар тауыҡтарының бәпкә сығарыуын себештәр күҙгә салынғас ҡына белгән. Башҡорт тауығы сыҙам һәм талымһыҙ булған. Уның бигерәк тә ҡара-һоро, ҡуйы һары йәки ҡара төҫтәре киң таралған.

Ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар тауыҡтарҙы йәйләүгә үҙҙәре менән алған. Миңә йәйләү эргәһендә уларҙы тау йылғалары буйындағы ағаслыҡтарҙа, ағаста ултырғандарын һәм бер ағастан икенсеһенә ҡорҙар кеүек осоп йөрөгәнен күрергә тура килде.

Ғәҙәти шарттар булғанда, тауыҡтар майҙа йомортҡа һалыуҙан туҡтай һәм бары тик икенсе яҙға ғына ҡабат йомортҡа һала башлай. Был бигерәк тә йәш тауыҡтарға ҡағыла. Ҡарт тауыҡтар иһә оҙағыраҡ һәм күберәк йомортҡа һала. Йәғни йомортҡа һалыу араһы ҡыҫҡараҡ була.

Башҡорттар өйрәк тә үҫтергән, әммә бик һирәк һәм аҙ. Йышыраҡ улар ҡыр өйрәктәренең йомортҡаһын баҫҡан тауыҡ аҫтына һалған, ә көҙгөһөн үҫкән өйрәктәрҙең ҡанатын ҡырҡҡан. Башҡорттарҙың йорт ҡоштары араһында ҡыр өйрәктәренең дә осраһы ғәҙәти күренеш булған.

**(Дауамы бар).**

**Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған журналисы, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире Рәшиҙә Мәһәҙиева МДУ-ны тамамлағандан алып, бар ғүмерен журналистикаға арнаған шәхестәрҙең береһе. Үткән йылда "Әйтер һүҙем етһен кешеләргә" тип аталған күләмле йыйынтығының донъя күреүе ошо өлкәләге хеҙмәттәренең бер сағылышы булып тора. Рәшиҙә МӘҺӘҘИЕВА ҙур маҡсаттар менән янып йәшәй һәм шуларҙы тормошҡа ашыра, башҡорт журналистикаһын үҫтереүҙә, байытыуҙа һөҙөмтәле эштәр алып бара. Тәжрибәле белгескә, етәксегә һәм йәмәғәт эшмәкәренә бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН төрки халыҡтары араһында

**Алған профессионал белеме буйынса эшләгәндәр үҙҙәренә ошо йүнәлештә белем биргән юғары уҡыу йортон, гәҙиттә, тәрән ихтирам менән иҫкә алалар. Рәшиҙә Рәфҡәт ҡыҙы, Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетында алған өс төп тормош һабағын атап китегеҙ әле.**

- Хоҙайҙың бер бүләге тип ҡабул итәм мин Мәскәү дәүләт университетында уҡып сығыуымды. Илдең иң төп уҡыу йорто биргән һабаҡтарҙы айырым-айырым атап бирә лә алмамдыр. Сөнки ундағы мөхит беҙҙе үҙе үҫтерҙе һәм тәрбиәләне. Беҙ, Советтар Союзының союздаш һәм автономиялы республикаларынан йыйылған студенттар, бер төркөмдә уҡыныҡ. Көндәлек аралашыуыбыҙ төрлө милләттәрҙең мәҙәниәте менән танышыу һәм өйрәнеү ине. Төркмән, ҡырғыҙ, абхаз, тажик, азербайжан дуҫтарыбыҙҙың байрамдарында, тыуған көндәрендә ҡатнашыу, йыр-бейеүҙәрен тыңлау һәм күреү, ризыҡтарын ауыҙ итеү беҙҙе донъя мәҙәниәте тигән иҫ китмәле оло хазинаға яҡынайтты. Ул ваҡытта Мәскәүҙә төрлө республика көндәре үтә торғайны. Молдавия көндәрендә үҙем яратып ҡараған "Цыган" фильмында төп ролде башҡарған актер Михай Волонтирҙы күреп, Тажикстандың бөтә донъяға билдәле "Зебо" балалар бейеү ансамбленең сығыштарын ҡарап, хайран ҡалып ултырғаным бөгөнгөләй хәтеремдә.

Беҙ күмәкләп ошондай кисәләргә, театрҙарға, күргәҙмәләргә йөрөнөк, тыуған көндәрҙе бергәләп үткәрҙек. Ҡалмыҡтарҙың тоҙло сәйҙәрен эсеп, төркмән егеттәренең иҫ киткес тәмле былауын ашап ҡунаҡ булғандан һуң, мин дә үҙебеҙҙең милли ризыҡтарыбыҙҙы бешереп, тыуған көн үткәргәйнем. Әсәйем посылка ебәрҙе, һалма, ҡорот, ҡыҙыл эремсек һалғайны, ҡайҙандыр бал да таптыҡ, сәк-сәк бешерҙек.

Башҡа халыҡтар араһында йәшәү үҙаңды үҫтерә, рухты күтәрә бит ул. Һин үҙең генә булыуҙан туктап, тыуған республикаңдың лайыҡлы вәкиле, туған халҡыңдың лайыҡлы ҡыҙы булырға тырыша башлайһың. Быны ошондай ҙур яуаплылыҡ та йөкмәтеп ҡайтарҙы Мәскәү.

Журналистика факультеты Ҡыҙыл майҙан менән йәнәш кенә урынлашҡан, берәй сәбәп менән дәрестәр булмаған саҡта беҙ гел шунда йөрөй торғайныҡ. Ә унда һәр ваҡыт халыҡ шығырым тулы, сит илдәрҙән күпләп киләләр, Ленин мавзолейына таңдан алып сиратҡа торалар. Ошолар барыһы ла ил тойғоһо, интернационализм тойғоһо тәрбиәләмәй ҡалмай, әлбиттә.

Уҡытыусылар менән студенттар араһында демократик мөнәсәбәт булды, профессорҙарҙың ихтирамлы ҡарашы, ябайлығы һоҡландыра торғайны. Дәрескә йөрөмәүселәргә ҡарата бер ниндәй ҙә санкциялар ҡулланылманы. Уҡыу өсөн бөтә шарттар ҙа бар, әммә сессияны бирә алмайһың икән, үҙеңә үпкәлә. Быны ошолай үҙ иркенә ҡуйылыу маҡсатыңды анығыраҡ билдәләргә өйрәтә, көндәлек тормошонды файҙалыраҡ итеп ойоштороу тураһында уйландыра. Беҙҙең факультеттан Рәсәй журналистикаһының сағыу вәкилдәре (Владислав Листьев, Инна Руденко, Татьяна Миткова, Аркадий Мамонтов, Ирина Лесневская, Елена Масюк һ.б.) сығыуын мин ана шул бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалмаҫҡа тырышыуҙан киләләр, тип уйлайым.



Мәскәүҙә булырға тура килгән һайын факультетҡа барып китергә тырышам. Былтыр мине унда диссертация советы ултырышына саҡырҙылар. Анна Гладкова исемле доцент докторлыҡ диссертацияһы яҡланы. Беҙ уның менән мин БДУ-ның журналистика кафедраһын етәкләгән саҡта таныштҡайныҡ. Бергәләп "Рәсәй этник матбуғат саралары атласы"н төҙөүҙә ҡатнаштыҡ, мин Башҡортостан тураһында бүлекте әҙерләнем. Әле Анна Александровна этник матбуғат темаһын Башҡортостан, Татарстан, Сыуашстан республикалары миҫалында өйрәнеп, яҡлауға сыҡты. Мин уға үҙебеҙҙең республиканың матбуғат саралары хаҡында материалдар менән ярҙам иттем.

Диссертация советында фекер алышыуҙа ҡатнашыуымды һәм милли баҫма етәксеһе булараҡ сығыш яһауымды һоранылар. Форсаттан файҙаланып, иң тәүҙә факультетыбыҙға рәхмәтемде белдерҙем, уның китапханаһына үҙемдең студенттар өсөн яҙылған уҡыу әсбаптарымды бүләк иттем. Уңышлы яҡлауы менән ҡотлап, Гладковаға "француз" яулыҡ бүләк иттем. Яулыҡтың тарихын Мәскәү профессорҙары бик ҡыҙыҡһынып тыңланы, рәхмәт әйттеләр. "Сығышығыҙ рәсми сарабыҙға бер биҙәк булды", - тинеләр.

Күрәһегеҙ, факультет менән бәйләнешем өҙөлгәне юҡ. Әле беҙ бергәләп журналист эшендә нейроселтәрҙәрҙе ҡулланыу темаһына тотондоҡ. "Беҙ" тиһәм дә был минең өсөн өҫтәлмә эш кенә, әлбиттә. Илдең иң төп юғары уҡыу йортонда алып барылған ғилми тикшеренеүҙәрҙән Башҡортостан ситтә тороп ҡалмаһын тип тырышам.

**Ниндәй ул бөгөнгө журналистика? Публицистика жанрына унда урын бармы? Әллә тормош талаптары ла үҙгәрәме?**

- Бөгөн журналистика ныҡ үҙгәрҙе. Нейроселтәрҙәр ярҙамында текстар яҙыла, төҙәтелә, һүрәттәр төшөрөлә. Классик журналистика жанрҙары юҡҡа сыҡты, улар урынына тиҙ уҡыла торған, күҙ йүгертеп кенә алыуға ҡулайлаштырылған форматтар, подкастар барлыҡҡа килде.

Яһалма интеллект ярҙамында мәҡәлә яҙған, текстарҙы мөхәррирләгән кешеләр уның өҫтөнлөгө хаҡында һөйләй. Айырыуса эштең тиҙ башҡарылыуы, ваҡытты күп алмауы уңайлы, тиҙәр. Был көндәлек ваҡ хәбәрҙәр яҙыу өсөн яҡшы, әлбиттә. Петербургта үткән иҡтисад форумында хатта журналист яҙған мәҡәләгә махсус билдә ҡуйырға кәрәк буласаҡ тиҙҙән, тигән фекер ҙә яңғыраны. Әммә нейроселтәр хис-тойғоларҙы сағылдыра алмай. Ә журналистика ул ҡоро һандар һәм факттар ғына түгел, унда кисерештәр, тәьҫораттар ҙа бар.

Сентябрҙә Сочила үткән "Бөтә Рәсәй" форумында ошолар хаҡында һөйләшеүҙәр күп булды. Хәҙер редакциялар гәзит-журнал сығарыуҙан тыш, мессенджерҙарҙа эшләй, аккаунттар алып бара. Ҡайһы берҙә төп иғтибар шуларға йүнәлтелеп тә китә. Ә бит улар икеһе ике нәмә. Әйтәйек, "Ватандаш" журналы менән уның "Бәйләнештә" селтәрендәге сәхифәһе бер-береһен ҡабатламай.

Мәғлүмәт технологияларының үҫеше дөйөм журналистикаға йоғонто яһамай ҡалмай, әлбиттә. Уҡыусыға ҡыҫҡа ғына хәбәрҙәр, бәләкәй генә тарихтар кәрәк, уларҙы видео аша ҡабул итергә яраталар. Тәрәндән әҙләнеп, проблеманың төбөнә төшөргә тырышып яҙған журналистар хәҙер юҡ кимәлендә, публицистика жанры онотола бара.

**Йәш журналистар өсөн бөгөн иң ауыр проблема нимәлә? Ғөмүмән, йәштәр журналистиканы үҙ итәме?**

- Бөгөнгө матбуғатта йәш журналистарҙың булмауы - иң ауыр проблема. Айырыуса милли матбуғат баҫмаларында. Йыл һайын университеттан журналистика буйынса нисә дипломлы белгес сыға, ә Матбуғат йортона берәү ҙә килмәй. Радио-телевидениеға бара бер нисәүһе, ҡалғандары нимә менән мәшғүлдер - әйтә алмайым. Яңыраҡ Дәүләт Думаһында бер закон проекты ҡаралды. Унда медицина университеттарын һәм колледждарын тамамлаусылар өс йыл мотлаҡ һөнәре буйынса эшләргә бурыслы, тиелә. Дауаханаларҙа табиптар етешмәгәнлектән эшләнә был. Беҙҙең өлкәлә лә шундай закон кәрәк.

Яңыраҡ ҡына беҙ, баш мөхәррирҙәр, Башҡортостан Фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина менән осрашыуҙа кадрҙар, вуздарҙа журналист булырға теләгәндәр өсөн бюджет урындары булдырыу, уҡып сыҡҡандарҙың һөнәре буйынса эшкә барыуын контролдә тотоу мәсьәләһен күтәрҙек. Мотлаҡ дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейешле был мәсьәлә.

**Мәскәүҙә уҡығанда төрлө милләт вәкилдәре менән аралашыу бәхете тейә. Бөгөн улар менән бәйләнеш бармы? Бер-берегеҙгә бөгөн нимә менән ҡыҙыҡлыһығыҙ, йәки файҙалыһығыҙ?**

- Бәйләнеш хәҙер юҡ тигәндә лә була. Сөнки төркөмдәштәребеҙҙең күбеһе сит илдәрҙә ҡалды. Рәсәйҙә хәҙер тыйылған фейсбук, инстаграм кеүек социаль селтәрҙәр аша аралаша торғайныҡ, хәҙер ул да өҙөлдө. Ике йыл элек Абхазияла йәшәгән Инна Өфөгә килеп китте. Ул телевидениела эшләй. Уның аша Саида исемле группалашыбыҙҙың грузиндар менән 1992-1993 йылдарҙа булған бәрелештә һәләк булғанын ишеттек. Әбүлфәт менән Бакуҙа күрештек. Уҡып бөткәндән һуң ул оҙаҡ йылдар Ҡарабахта хеҙмәт иткән, бик һуң ғына төп һөнәренә ҡайтып, хәрби гәзиттә эшләне. Старостабыҙ Мушег Овсепян һәм тажик Пулод Гаджиев менән аралашыуыбыҙ фән тирәләй барҙы. Мушег Ереван дәүләт университетында кафедра мөдире ине, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ике йыл элек китеп барҙы. Пулод Урта Азиялағы боронғо ҡалаларҙың береһе Худжанд ҡалаһында (элегерәк Ленинабад тип аталды) университетта уҡыта, видеобәйләнеш аша ул ойошторған фәнни-ғәмәли конференцияла ла ҡатнашҡаным булды. Бер дуҫыбыҙ Ҡырғыҙ телевидениеһында етәксе булып эшләй, төркмән ҡыҙҙары университетта уҡы-

✓ *Яуызлыҡ кеше тарафынан аллаһыҙлыҡты аңлатыр өсөн уйлап сығарылған һүҙ генә. Алла яуызлыҡты тыуҙырмаған. Яуызлыҡ - кеше йөрәгендә Аллаһҡа мөхәббәт булмауының һөҙөмтәһе.*



та. Яйы тура килгәндә бер-беребеҙгә сәләмдәр, күстәнәстәр ебәрергә тырышабыҙ.

Тиҙҙән университетты тамамлауыбыҙға 40 йыл була, Мәскәүҙә бер осрашып алырға ине, тигән ҙур теләк бар.

**Йәш быуында рухиәтебеҙгә, тарихҡа ихтирам тәрбиәләү - һәр саҡ көнүҙәк. Туған телдә иркен һөйләшкән быуын, тигән саҡта ла, уйланырға тура килә. Балаларығыҙ туған телде яҡшы беләме? Бөгөнгө йәштәргә нимә кәңәш итер инегеҙ?**

- Аллаға шөкөр, балаларым туған телебеҙҙә иркен аралаша. Башҡорт телен белеүҙең өҫтөнлөгө бар икәнен эштәрендә лә тойҙолар. Икеһе лә Мәскәүҙә юридик компанияларҙа эшләй.

Ҡыҙыбыҙ Гөлнәзирәнең Төркиәләге ҡыҙығын һөйләйем әле. Унда оҙайлы командировкала булып ҡайтҡайнылар. Компанияларынан өс кеше барҙылар. "Тәүге мәлдә өсәүләп магазинға барып инәбеҙ, коллегаларым һатыусылар менән инглизса һөйләшә, ә мин ҡарап йөрөйөм: икмәк - екмек, һыу - су, дәфтәр - defter. Барыһы ла беҙҙеңсә тиерлек, тип уйлайым. Бер көндө тағы эштән һуң магазинға ингәйнек, русса

Оҙайлы ялдарға килгәндә, йәй үҙебеҙҙә матур. Башҡортостанда булабыҙ, тыуған яҡҡа ҡайтабыҙ. Бер нисә йыл элек Талҡаҫ буйындағы Иҫән ауылында өй һалдыҡ - барғы килеп кенә тора.

Ә инде мөмкинлек булғанда сит илдәргә сығып, донъя күреп килергә тырышабыҙ. Гөлнәзирә Төркиәлә булғанда Стамбулға барҙыҡ, Байрас Үзбәкстанда эшләгәндә Ташкентҡа барып, Сәмәрҡәнд, Бохара ҡалаларын да күреп ҡайттыҡ. Ҡытайҙа, Мысырҙа, Ғәрәп Әмирлектәрендә, Кипрҙа, Грецияла, Черногорияла, Чехияла, Болгарияла булғаным бар. Ситтә күберәк булған һайын шуға нығыраҡ инанам, иң матуры, йәшәү өсөн иң уңайлыһы - үҙебеҙҙә. Ҡыҙыҡһынып барабыҙ ҙа ашҡынып ҡайтабыҙ, Башҡортостаныбыҙҙан айырмаһын!

**Алты тиҫтә йыл арыу ғына ғүмер арауығы. Һығымталар яһала, сөнки бай тормош тәжрибәһе тупланған. Быларҙы үҙеңдә генә ҡалдырыу мөмкин эш түгел. Күләмле китап әҙерләүегеҙ шуның менән бәйлелер. Төп иғтибар нимәгә йүнәлтелде?**

- Эйе, 30 йылдан ашыу матбуғатта эшләү осоронда ижад ителгән яҙмаларымды йыйынтыҡ итеп тупланым. "Әйтер һүҙем етһен кешеләргә" тип атала, уға очерктарым да, интервьюлар ҙа, шиғырҙар ҙа, юлъяҙмалар ҙа индерелде. Былтыр февраль айында - З.Вәлиди исемендәге Милли китапханала, сентябрҙә Баймаҡ үҙәк китапханаһында исем туйын үткәрҙек.

# БЕЛҺӘҢ...

## үҙ кеше булаһың

ла, инглизса ла белмәгән һатыусы тура килде. Беҙҙекеләр нисек аңлатырға белмәй торғансы, мин тоттом да башҡортсаға төрөксә ҡушып һөйләй башланым. Аҙаҡ миңә "Телдәрен белгәнеңде нишләп баштан уҡ әйтмәнең?" - тип аптыранылар".

Ике айҙан эштәрен тикшерергә Мәскәүҙән ҙур ғына етәкселәре барып төшә. Ҡаршы алалар, бергәләп ашап-эсеп, һөйләшеп ултыралар. Һуңынан отелгә ҡайтырға такси саҡырталар. Таксистың да төрөксәнән башҡа тел белмәүе асыҡлана. "Гөлнәзирә, һин, давай, алға ултыр ҙа юлды үҙең аңлат", - тип, коллегалары артҡа инеп ултыра. Текә генә хужаларына ла шунда тығылыуҙан башҡа сара ҡалмай. Барып төшкәс, беренсе һорауы шул була: "Гөлнәзирә, һеҙ ике ай эсендә нисек төрөксә өйрәндегеҙ?"

Шулай итеп, башҡортса белеүҙең өҫтөнлөгөн дә, файҙаһын да тулыһынса тойоп, аңлап ҡайтты ҡыҙыбыҙ.

Улыбыҙ Байрас та "Индустар менән һөйләшеүгә мине ебәрергә тырышалар. Сөнки уларҙың акценттары яман, инглизса һөйләгәндәрен башҡалар аңлай алмай, башҡортса белмәһәм, миңә лә ҡыйын булыр ине", - тигәне бар. Бына шулай, балаларыбыҙ туған телебеҙҙе һаҡлаһа, телебеҙ уларҙың үҙҙәрен үҫтерә.

Йәштәргә шуны әйтер инем. Донъя нык үҙгәрҙе хәҙер. Европа илдәренән Көнсығышҡа йөҙ борҙоҡ. Ер йөҙөндә 250 млн кеше төрки телдәрендә һөйләшә, тимәк, башҡорт телен белһәң, Азияла, Көнсығыш Европа илдәрендә һин үҙ кеше була алаһың, тигән һүҙ. Туған телде белергә кәрәк!

**Тормош гел эш мәшәҡәттәренән генә тормай. Ял да - илһам сығанағы, ҡайҙа ял итергә яратаһығыҙ?**

- Ял көндәрем минең баҡсала үтә. Шунда булышып, ерҙә соҡоноп йөрөргә яратам. Эштән арып, мунса төшөп ҡайтыу иң ҙур ял минең өсөн.

Ижадым һәр ваҡыт мөхәррирлек эше менән бергә бара. Хәҙер "Ватандаш"ты етәкләүемә лә 10 йыл булып килә. Төрлө проекттар уйлап табыу, конкурстар ойоштороу - улар ҙа ижад, улар ҙа ваҡыт, аҡыл һәм күңел көсө талап итә. Иң һуңғыларын ғына әйтеп үтәйем. Былтыр беҙ эҙәрмәндәр менән берлектә Бөйөк Ватан һуғышында хәбәрһеҙ юғалғандарҙы эҙләү буйынса "Батырҙар эҙһеҙ юғалмай" тигән акция ойошторғайныҡ, уны йыл һайын үткәрергә уйлайбыҙ. Сөнки Башҡортостанда һуғыш ваҡытында 127 000 һалдат һәм офицер хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнә. Һәр ғаиләлә тип әйтерлек уларҙың яҙмышы менән ҡыҙыҡһынған кешеләр бар, шуларға ярҙам итке килә.

Шулай уҡ былтыр "Бәйләнештә" селтәрендә "Мостай беҙҙең арала" тигән фотоконкурс алып барҙыҡ. Райондарҙан, ауылдарҙан бик матур, йылы фотоһүрәттәр, иҫтәлекле яҙмалар алдыҡ.

Ә инде, һеҙ әйткәнсә, алты тиҫтә йыл ғүмер эсендә башҡарылғандарға йомғаҡ яһағандан һуң, тупланған тәжрибә нигеҙендә киләсәккә ҡараш ташлайһың бит инде. Түбәндәге шиғырым ошо хаҡта:

*Килер йылдар - башланмаған китап:*
*Унда ниҙәр, нисек яҙылыр?*
*Әйтер һүҙем етһен кешеләргә,*
*Булмаһын да һүҙем яҙлығыр.*

*Килер йылдар - яңы бер йыр һымаҡ,*
*Ниндәйерәк булыр, тим, көйө?*
*Моңһоҙлоҡтан Хоҙай аралаһын,*
*Ни йәшәүең бер ғәмһеҙ көйө!*

*Килер йылдар - матур сәйәхәттер*
*Ҡайһы юлдар ҡайҙа илтерҙәр?*
*Рухташ була күрһен юлдаштарым*
*Юлды бергә дауам итерҙәй.*

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ИМАНҺЫҘ ҠУРҠАҠ БУЛЫР



**Ҡапылғарай уйлағанда, иманһыҙ кеше, киреһенсә, ҡурҡаҡ та булмаҫҡа тейеш һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, башҡаларға зыян килтереп яһалған яуыз ҡылыҡтары өсөн намыҫ, выждан ғазаптары кисереүҙән ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәгән кеше башҡаһынан да ҡурҡмайҙыр, тигән уй нығынған. Иманһыҙ кеше шул уҡ ваҡытта батыр ҙа түгел һымаҡ. Әммә иманһыҙ кеше яһаған батырлыҡтың башҡаларға яҡшылыҡ килтереүе лә бар бит әле. Әйтәйек, ниәтһеҙ генә, осраҡлы рәүештә. Был осраҡта нисек икән? Ҡыҫҡаһы, "Иманһыҙ ҡурҡаҡ булыр" әйтеме, беҙ уйлағанса, ябай ғына йөкмәткеле түгел. Ошо өс кенә һүҙҙән торған әйтемгә бер үк ваҡытта оло мәғәнә һәм оло ҡапма-ҡаршылыҡ һалынған. Булмаһа, әйтемдең йөкмәткеһен ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер юҫығында тикшереп ҡарайыҡ.**

- Донъялағы һәр нәмә Хоҙай тарафынан барлыҡҡа килтерелгәнме? - тип һораған университет профессоры үҙенең табиптарынан.

- Эйе, барыһы ла Аллаһ Тәғәлә ҡөҙрәтенән, - тип ҡыйыу ғына яуап биргән бер студент.

- Хоҙай донъялағы бар нәмәне лә яралтҡанмы? - тип артабан һораған профессор.

- Эйе, - тип яуаплаған студент.

- Әгәр ҙә Аллаһ Тәғәлә барыһын да барлыҡҡа килтергәс, донъялыҡтағы яуызлыҡты ла ул бар иткән булып сыға бит. Икенсенән, һәр кемдең ҡылған ғәмәле уның асылын, булмышын билдәләй, тигән принцип буйынса ҡараһаҡ, яуызлыҡты бар иткән Аллаһ Тәғәлә үҙе лә яуызлыҡ булып сыға түгелме, улай булғас?

Студент профессорҙың был һорауына бер нисек тә яуап ҡайтара алмаған. Был хәлдән профессор оло ҡәнәғәтлек кисергән. Ул студенттары алдында Аллаһ Тәғәләгә ышаныуҙың буш нәмә икәнен иҫбатлауы менән маҡтанырға тотонған. Шул саҡ бер студент ҡулын күтәргән дә профессорға шундай һорау биргән:

- Һеҙгә һорау бирергә мөмкинме, профессор? Донъяла һалҡынлыҡ бармы?

- Шул да булдымы һорау? Нишләп булмаһын ти, һалҡынлыҡ, бар. Ниңә, һинең бер ваҡытта ла өшөгәнең булманымы ни?

Башҡалар профессорға ҡушылып, был студенттың мәғәнәһеҙ һорауынан көлөргә тотонған. Студент артабан һүҙен шулай дауам иткән:

- Ысынында иһә, сэр, һалҡынлыҡ донъяла юҡ ул. Физика закондары буйынса, беҙ нимәне һалҡынлыҡ тип атайбыҙ, ул бары тик йылылыҡтың булмауын ғына иҫбатлай. Кешене һәм предметты физикала энергия барлығы йә тапшырыуға һәләтле булыуы күрһәткестәре буйынса ғына өйрәнергә була. Фаренгейт буйынса, минус 460 градус абсолют нулгә, йәғни йылылыҡтың тулыһынса булмауына тиң. Бындай температурала материя инертлыға, йәғни бөтөнләй һәләтһеҙгә әүерелә. Тимәк, беҙ "һалҡынлыҡ" терминын йылылыҡтың юҡлығын аңлатыр өсөн генә файҙаланабыҙ. Улайһа, мин һеҙгә, профессор, йәнә бер һорауымды бирәм: донъяла ҡараңғылыҡ бармы?

- Бар, әлбиттә...

- Һеҙ тағы ла хаталанаһығыҙ, сэр. Ҡараңғылыҡ та юҡ донъяла. Ысынында ул яҡтылыҡтың булмауын аңлата. Ни өсөн тигәндә, беҙ яҡтылыҡты өйрәнә алабыҙ, әммә ҡараңғылыҡ бындай өйрәнеү объекты була алмай. Беҙ хатта Ньютондың призмаһы ярҙамында аҡ нурҙы бер нисә төҫтәге өлөшкә бүлеп, һәр өлөштөң тулҡын оҙонлоғон да үлсәй алабыҙ, әммә ҡараңғылыҡты был рәүешле үлсәй алмайбыҙ. Ябай ғына нур шәлкеме ҡараңғылыҡ донъяһына килеп инә лә уны юҡҡа сығара. Ниндәйҙер йышлыҡтың ни дәрәжәлә ҡараңғы булғанын белеү ҙә мөмкин түгел бит. Беҙ ҡараңғы донъяның яҡтыра башлауын ҡараңғылыҡ үлсәме менән түгел, яҡтылыҡ үлсәме менән билдәләйбеҙ. Шулай түгелме ни? Ҡараңғылыҡ - ул яҡтылыҡ булмаған осраҡта кешенең был хәлде аңлата торған төшөнсә. Сэр, ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, яуызлыҡ бармы был донъяла?

- Әлбиттә, мин был хаҡта башта уҡ әйттем бит инде. Беҙ яуызлыҡ менән көн һайын осрашабыҙ. Ер йөҙөндә сәғәт һайын, минут һайын кеше кешенең ғүмерен ҡыя, яуызлыҡ ҡыла, теге йәки был урында мәңге тынмаҫ һуғыштар бара. Былар барыһы ла яуызлыҡтың донъяла барлығын иҫбатлай инде, - тип яуаплаған профессор хәҙер инде үҙ һүҙенең хаҡлығына ышанмаған һәм икеләнеүгә ҡала барған кешеләй.

- Сэр, яуызлыҡ донъяла юҡ ул. Яуызлыҡ - аллаһыҙлыҡ күрһәткесе. Яуызлыҡ шул уҡ ҡараңғылыҡ, һалҡынлыҡ кеүек, кеше тарафынан аллаһыҙлыҡты аңлатыр өсөн уйлап сығарылған һүҙ генә. Алла яуызлыҡты тыуҙырмаған. Яуызлыҡ яҡтылыҡ, йылылыҡ ише ышанысты һәм мөхәббәтте аңлатмай. Яуызлыҡ - кеше йөрәгендә Аллаһҡа мөхәббәт булмауының һөҙөмтәһе. Яуызлыҡ йылы булмағандағы һалҡынлыҡҡа, яҡтылыҡ булмағандағы ҡараңғылыҡҡа оҡшаған.

Профессор уға яуап итеп йә үҙ дәғүәһен белдереп, бер һүҙ ҙә әйтә алмаған һәм студенттары алдында оятҡа ҡалған. Ә был ҡыйыу һәм төплө фекерле студент кем булған тиһегеҙме? Әлбиттә, ул киләсәктәге мәшһүр ғалим Альберт Эйнштейн булған.

Хәҙер инде профессор менән Эйнштейндың бәхәс логикаһы буйынса "Иманһыҙ ҡурҡаҡ булыр" әйтемен уға ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғәнәләге икенсе бер "Алланан ҡурҡмағандан ҡурҡ" тигән әйтем менән йәнәш ҡуйып ҡарайыҡ. Тик уларҙы йәнәш ҡуйып ҡарағанда ғына хәҡиҡәткә яҡыная барабыҙ кеүек. Ни өсөн тигәндә, иманһыҙҙың, асылда, ҡурҡаҡ булыуы йөрәгендә Аллаһ булмауынан килә һәм фәҡәт Аллаһтан ҡурҡыу ғына ысын мәғәнәһендәге ҡурҡыу тойғоһо булып иҫәпләнергә тейештер. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки Аллаһтан ҡурҡыу тойғоһо йөрөгән йөрәктә берҙәй үк кимәлдә Хаҡ Тәғәләгә һөйөү ҙә булалыр һәм йөрәгендә бындай тойғоно йөрөткән кеше башҡа бер нәмәнән дә ҡурҡмайҙыр, тип аңларға була бында. Хоҙайҙан ҡурҡмағандан ҡурҡырға кәрәкме һәм ни өсөн? Сөнки бындай кешенең йөрәгендә Аллаһтан ҡурҡыу тойғоһо ла, Уға һөйөү тойғоһо ла булмағанлыҡтан, ул, ысынлап та, ҡурҡыныс кеше, сөнки ул иманһыҙ, йәғни ҡурҡаҡ кеше. Йөрәгендә Аллаһты йөрөтмәгән кеше мөхәббәтле лә була алмай, сөнки профессор менән студенттың юғарыла килтерелгән бәхәсендәгесә, ҡараңғылыҡ, һалҡынлыҡ кеүек үк, ҡурҡаҡлыҡ, мөхәббәтһеҙлек тойғолары ла кеше күңеленең һәм йөрәгенең аллаһыҙлығын белдереүсе төшөнсәләр генә.

Ҡөрьәндең "Әл-Мәәидәһ" (Аш табыны) сүрәһенең 44-се аятында Хаҡ Тәғәлә әҙәм балаларына түбәндәгесә өндәшә: "Кешенән ҡурҡмағыҙ, Минән ҡурҡығыҙ! Минең аяттарымды бушҡа алмаштырмағыҙ!..."

Быға Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың киң билдәле шиғырын шулайыраҡ итеп үҙгәртеп өҫтәргә лә була:

Йөрәгендә Аллаһ булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

***✓ - Юҡ, улым, Фәрхәт - ул үзбәк батырының исеме. Әсәйеңдең дуҫтары һиңә шул батыр исемен уның кеүек булһын, тип ҡушҡан бит инде. Исемеңде ярат, улым, - тине ҡарт, - исемен үҙгәрткән кешенең яҙмышы ла үҙгәрә.***



**Гөлнур АҘНАБАЕВА**

# ФОРТУНА

*Йәшләй генә һәләк булған ватандаштарым батырлығына бағышлайым.*

Әнисә менән Дәриғәт буй еткереп килгән өс балалары менән көтмәгәндә Ташкенттан ҡайтып төштөләр. Алыҫ йәшлектәрендә бар байлыҡтары бер-береһенә оло мөхәббәт кенә булған ике йәш кешене ҡолас йәйеп ҡаршы алған үзбәк иле 90-сы йылдарҙа "икенсе йөҙөн" күрһәтте: белемдәре, тырышлыҡтары менән вертолет заводының иң яҡшы хеҙмәткәрҙәренә әйләнгән был ике кешегә, башҡа ватандаштары кеүек үк, ҡала уртаһындағы өс бүлмәле фатирҙарын, гараж-баҡсаларын, хатта машиналарын да ҡалдырып, тиҙ арала ҡайтып китергә тәҡдим иттеләр. Нисә йылдар бергә балаларын үҫтерешеп йәшәгән дуҫтары ла өнһеҙ булдылар. Ярай әле, береһе оло улы Ғайсаны үҙендә пропискаға индереп ҡалдырырға, донъялар тынысланғас, хатта белем алырға ла мөмкин булаcағын әйтә алды.

Шулай иттеләр ҙә. Ҡайтып килеү менән дә бит, бында ла бөтәһе лә ал да гөл түгел шул. Аҡсаһыҙлыҡ, эшһеҙлек быуа, тиҙ генә эшкә инеү ҙә мөмкин түгел икән. Әнисәнең ауылдағы ҡарт әсәһе һәм атаһы бер таяныс та ул. Уларға ҡайтып йығылыуҙа ике яҡлы. Балалығы етемлектә үтеп, үҙ көсө менән егет булған Дәриғәт кейәүҙәрен бик ярата лар ҙа улар. Тик улар йәшәгән Көйөргәҙе ерендәге данлыҡлы совхоз үҙегенең дә хәҙер тарҡалып, эшселәренә эш хаҡы түләй алмай, таратылып, меңәр гектар ерҙәрен ташландыҡҡа әйләндереп, тиҫтәләгән фермаларын ҡоротоп яткан сағы. Унда ҡайтып торор өсөн дә эш кәрәк, эше булмағас, ашы ла юҡ, тигәндәй. Әле, ярай, йәй ваҡыты, ҡунаҡ булып йөрөйҙәр, ата-әсәләренең малы, ҡош-ҡорто ла күп, аты ла бар, бәрәңгене лә ҡутарғансы сәскәндәр. Өйҙәге эште, бесән эшләшеп, йәй үтеп тә бара.

Ҡыҙҙары Альбинаны Өфөгә уҡырға енел алдылар. Ҡасаҡтар өсөн ойошторолған вузға инеү программаһына эләгеп, йөҙөү буйынса Ташкентта ярыштарҙа яулаған грамоталары менән ул үҙе теләгән физкультура факультетына уҡырға инеп китте. Ана, олаталары һарыҡ бәрәне салып, иртүк йүгергеләп, ейәнсәренең шатлығын ҙурларға әҙерләнеп йөрөй. Минегәрәй ҡарт менән ҡарсығы Мәстүрә уҡыу ҡәҙерен беләләр ҙә ул: нисек кенә тырышмаһындар, үҙҙәренең дүрт балаһының тик береһе - ошо оло ҡыҙҙары Әнисә генә "ҙур уҡыуға" инде. Өфөнөң данлыҡлы башҡорт интернат-мәктәбен матур тамамлап, яратҡан һөнәре буйынса инженерлыҡҡа уҡыта торған институтҡа инеп китте, шунда Дәриғәт кейәүҙәрен осратып, етәкләшеп ҡайтып килделәр. Бына хәҙер шуларҙың оло ҡыҙҙары уҡырға ингән бит! Ауылда, кеше араһында кемдеке - уныҡы, бер һарыҡ һуйып йыйып ҙурларҙар. Дәриғәт кейәүҙәре тап үзбәксә былау бешерер, ит ҡурыр, урам тулып ҡунаҡ булырҙар. Йәй һайын ҡунаҡҡа ҡайтҡанда ла шулай итәләр ине: йылы яҡтан ҡайтҡан емеш-еләге, сәйе, ҡауыны ғына ни тора! Әле балаларҙың ҡыйын саҡтары, һарыҡ ни, тағы бәрәсләр әле, Аллаһ бойорһа!

Әбейе магазинға сығып киткәс, Минегәрәй ҡарт синнектең ишегенән башын тығып:

- Фәрғәт, Ғайса, падъем, торогоҙ, эш бар, - тип һөрәнләне.

Йоҡоло күҙҙәрен ыуа-ыуа килеп сыҡҡан егет ҡорона ингән ейәндәренә ҡарап, ҡартлас һөйөнөп ҡуйҙы: Әнисәләренә оҡшап, тәҫкә үтә матурҙар, кейәүҙәренә оҡшап, урта бармаҡ кеүек таҙалар, мыҡты кәүҙәлеләр, күркәмдәр. Йәшлек дәрте менән янып, гел йылмайып, башҡортса һөйләшергә тырышалар, ҡайҙалыр ашығып торалар. Беләләрмеюҡмы, һәр эшкә тиҙ тотоналар, хатта Фәрғәте матур итеп бесән сабып өйрәнде. Әсәһен аптыратып, олоғара яланды һыпыртып сабып ҡуйҙы. Уныһы бигерәк көйәҙ шул. Батҡаҡлы урамға ла, клубҡа барыр булһа, ап-аҡ нәски кейеп ала. Ана, кәртә башын тултырып, тағы шуларҙы йыуып элгән.

- Көн һайын ниңә нәски йыуаһың, ана, ҡаранап алып кей, бысрағаны күренмәҫ, - тигәйне бер көн олатаһы, Фәрғәт:

- Их, улатайка, беләһенме, клубта бөтәһенең дә ҡара нәски, ә минең бер үҙемдеке - аҡ! Миндә - авторитет! Фортуна минең яҡта! - тине көләп.

- Фартуна, фартуна, исемеңде боҙоп ней, малай-шалай ҙа шулай тип ҡыҫҡыра бит!

- Ә миңә оҡшай, олатай, әйтһеңдәр!

- Юҡ, улым, Фәрхәт - ул үзбәк батырының исеме. Әсәйеңдең дуҫтары һиңә шул батыр исемен уның кеүек булһын, тип ҡушҡан бит инде. Исемеңде ярат, улым, - тине ҡарт, - исемен үҙгәрткән кешенең яҙмышы ла үҙгәрә.

- Кит, юҡҡа юрап торма, - тине ҡарсығы йөрәкһеп. - Ана, һине бер кем дә Минегәрәй тимәй, Сирек ти ҙә ҡуялар, ә һин һис тә үҙгәрмәйһең!

Ҡартына ауыл халҡы тарафынан тағылған был ҡушамат уның һәр эштән һуң:

- Ҡана, юҡмы шунда берәй сирек нәстән? - тигән һорауына бәйләнгән. Йәшәй-йәшәй йәше һикһәнгә етеп килһә лә, шул "сиректәген" ҡабып алырға ярата шул ҡарт. Бына әле лә урамда ҡоролған күркәм табында ҡарттың күҙенә һимеҙ ит тә, кейәүҙе бешергән былау ҙа, күстәнәс тәм-том да салынманы. Фәрғәт улы ҡарсығы йәшереп ҡуйған ерҙән табып алып биргән "ялтыр" күнелен күтәрә. Бер-икене һалып алғас:

- Фәрғәтте армияға ебәрмәйем! Үҙем ваҡытында ете йыл йөрөп ҡайттым, етәр! Военкоматҡа алдан барам, ебәрмәйем тигәс, ебәрмәйем! Ана, Ғайса барһын, ул абыҙый бит! - тип хәбәр һалды.

- Атай, Фәрғәт сәйәхәт итергә ярата ул, ил күреп ҡайтыр, барһын, ул үҙе лә телəй, - тине кейәүе.

- Эйе, улатай, мин барам армияға!

- Бармайһың, ана чечендар һуғыш асып ята. Бөтөн мосолман егеттәрен шунда оҙаталар, ебәрмәйем ут эсенә! - тип ныҡышты ҡарт Фәрғәтте ҡосаҡлап алып. Әйтерһең, уны хәҙер үк алып китеп баралар!

- Улатай, мин бит Фортуна! Миңә бер ни ҙә булмай, мине Фортуна һаҡлай, - тине Фәрғәт көләп.

Табын тағы күңелле төҫ алды. Әнисә малайына ҡарап, әллә ниндәй тойғо кисерҙе: үлеп яратыуҙан бигерәк, ғорурлыҡ күтәрелде күкрәгендә:

- Атай, тыныслан, Фәрғәт тә уҡырға инәсәк, ул уҡып бөткәнсе, донъя тынысланыр, Аллаһ бойорһа.

- Шулай тиң, әтеү, ана, Ғайсаң Ташкентҡа китергә йөрөй, малайҙарҙы юғалтып ҡуймағыҙ! - тип ярһыны олатай булған кеше.

- Ғайса, быныһы ни тигән һүҙ? - Дәриғәт ялт итеп оло улына ҡараны, уның һуңғы ваҡытта нисектер уйсан йөрөүен иҫенә төшөрҙө.

- Атай, әсәй, үҙегеҙ ишетеп тораһығыҙ бит, Чечняла һуғыш бара. Башҡортостандан алынған һәр өсөнсө һалдат шунда эләгә. Әгәр мин Үзбәкстандан саҡырылһам, шунда хеҙмәт итәсәкмен бит! Училищены тамамланым, тимәк, мине көҙгә саҡырасаҡтар. Шуға миңә Ташкентҡа китергә кәрәк! Мөмкин тиклем иртәрәк китергә кәрәк! Ә Фәрғәт бында вузға инер.

- Дөрөҫ, улым, бесәнде генә ташып алайыҡ та, кит Ташкентҡа. Атаң-әсәң мына тиген йәшәнеләр, һин дә юғалмаҫһың!

Табындағылар бер-береһенә ҡарашып, ҡарттың һүҙенән уйға ҡалдылар. Берсә йәшлектәре үткән, ғүмерҙәренең иң матур осорон кисергән ерҙәр, ундағы дуҫтары менән бәйләнешә алыу бәхете һөйөндөрҙө, икенсе яҡтан, йөрәк ярып сыҡҡан балаларын билдәһеҙлеккә оҙатыу бөгөрҙө телдә.

Альбинаның шатлыҡ кисен шулай берсә көлөп, берсә көйөп үткәрҙеләр.

Балалар клубҡа ҡуҙғалғас, тәмле аш табыны янына күршеләргә лә өндәштеләр, Үрге ауылдан өй хужаһының әнеһе Карам ҡатыны менән килеп өлгәште. Уҡытыусы килене илдәге болғансыҡтарҙың көндән-көн көсәйеүен, чечен һуғышы ҡорбандарының яҡынтирә ауылдарҙан да ҡайтарылыуын һөйләп әсендерҙе. Киске табын, һүрән генә баҫып барған ҡанһыраған ҡояш нурҙары кеүек таралды. Шундa уртаҡ уйға килеп, ысынлап та, Ғайсаны тиҙерәк Ташкентҡа ебәрергә ҡарар иттеләр. Аҙна эсендә бесән эшен тамамлап, Ғайсаны юлға төйнәнеләр. Альбина уҡырға китер алдынан ғына Ғайсанан да яҡшы хәбәр килеп төштө: Ташкентҡа яҡын ғына торған хәрби гарнизонға хеҙмәткә саҡырылғайны ул.

Ул арала Дәриғәттең элекке һабаҡташтары Өфө эргәһендәге бер ауылда төҙөлөп бөтмәгән йорт һатылыуы тураһында хәбәр ебәрҙеләр. Дәриғәт менән Әнисә Шишмә юлында ятҡан был ауылға килеп, үҙ ҡулдары менән өс бүлмәле фатирҙың бер бүлмәһен төҙөп бөтөп, ҡыш сығырлыҡ иттеләр. Ярай әле, Фәрғәт егәрле, бар эште үҙе белеп эшләй, атаһынан күреп, кирбесте лә ҡупшы итеп һала, бысраҡ эш тип тормай, тиҙерәк йәбешә эшкә! Таныш түгел ерҙә лә тиҙ генә дуҫтар табып, кистәрен клубҡа сығып киткән улдары өсөн берсә көйөндә, берсә һөйөндә ата менән әсә. Фәрғәтте ауыл мәктәбенә ярҙыусы итеп эшкә алғас, бер аҙ тормоштары көйләнгәндәй булды. Ғайса ла яҙып тора, Альбина ла ялға ҡайта, уҡыуы уңышлы бара.

Йылы яҡтарҙан һуң бындағы һалҡын ҡышҡа ғына өйрәнеүе ҡыйын булды. Шулай ҙа ауылдағы тәҙәләш эштәренә саҡырылғас, Дәриғәткә лә йән өргәндәй булды. Аталыуллы эшкә китәләр, Фәрғәткә иһә ҡарлы-буранлы ҡыш бик тә оҡшаны, уның ҡабатланмаҫ матурлығын, сафлығын тәүге мөхәббәте менән бәйләне. Сөнки ябалаҡлап ҡарҙар яуғанда бурандар эсенән бер сер кеүек килеп инде уға һөйөү. Ҡуйы ҡара сәстәрен ҡупшы итеп төйнәп ҡуйған, оҙон керпекле мөләйем бер ҡыҙ уның йәшәү йәменә мәғәнә өҫтәне, ҡәҙерле кешеһенә әйләнде.

Йәшлек мөхәббәте Фәрғәтте тағы ла күркәмерәк итте. Хәҙер инде армияға барыу уның өсөн намыҫ эше булып күренде. Һөйгән ҡыҙы алдында армияла булып ҡайтыуҙы ирҙәр эше тип ҡабул итте һәм яҙын, тәүге тамсылар мәлендә, әсәһенең тыуған көнөндә саҡырыу ҡағыҙы алды. Армияға китәһе көнгә аҙна самаһы ҡалғас, Таймаҫҡа ҡайтып, олаталарын күреп китергә булды. Армияға китәсәген хәбәр иткәс, олатаһы менән өләсәһе бәләкәсәйеп ҡалғандай булды, тынып ҡалдылар. Ейәненең ҡупшы кәүҙәһенә һылашып торған кейеме, үҙенсә көйҙәлек менән ҡайтарылған күлдәк яғаһы, ышаныслы ҡарашы уның малайлыҡтан сығып, тормошҡа үҙаллы мөнәсәбәте барлығын күрһәтеп, үҙ һүҙле Минегәрәйҙе лә тынып ҡалырға мәжбүр итте.

- Олатай, һин мине уҡтан тура атырға өйрәттең. Бына хәҙер шулар кәрәге лә инде,- тине Фәрхәт уларҙың күңелен күреп. Өләсәһе ҡарттарса түҙемһеҙләнеп:

- Алға сыҡма, башыңды баҫып ҡына йүгер, кешегә атма, улар бит дошман түгел, үҙебеҙҙекеләр...- тип үкһеп ебәрҙе.

- Өләс, тыныслан инде, беләм, мин унда эләкмәм, Себер яғына ебәрерҙәр, бәлки, но унда һыуыҡ...

- Һыуыҡҡа түҙерһең, утҡа түҙеп булмай, улым, әллә ниндәй утлы осорға тура килде әрмең!

- Ничего, олатай, Чечняға эләкһәм, минең авторитет күтәреләсәк...

- Ай, шул холҡондо! - тип әсендә өләсәһе,- һин йәшһең, бер ни белмәйһең! Афтаритит. имеш, - Мәстүрә әбей урыныннан йәштәрсә ырғып торҙо ла йоҡо бүлмәһенә инеп китте, комодтан ниҙер алды, ҡайсы менән ниҙер ҡырҡты, унан ишекҡә йүнәлде:

- Хәҙер бер нәмә бирәм. Һине һаҡлар ул, балам.

Тиҙҙән тыштан кескәй генә төйөнсөк тотоп килеп инде. Үҙе яратып ябынған һары ҡыҙыл ерлекле яулығынан ҡырҡылған кескәй ҡульяулыҡҡа ниәмәләр төрөп алғайны.

- Мә, бәләкәсем, үҙең менән алып кит, тупһа янынан ғына алынған тупраҡ бында. Ул һине һаҡлар.

Фәрғәт тәүҙә көлдө, аҙаҡ ҡарттарҙың болоҡһоу йөҙҙәренән уларҙың ни кисергәнен аңланы. Уларҙы ырғып тороп ҡосаҡлап алды, үҙенсә тынысландырҙы, ҡапыл күҙҙәренә йәш килде: улар кеүек менәрләгән әсәй-өләсәйҙәр, бәлки, ошо минутта үҙҙәренең улдары менән хушлашаларҙыр...

✓ ***Арыҫлан уны һарайынан юрамал алдап сығарып алғандарын, биләмәләре буйлап йөрөтөп, халҡының мохтажлыҡтарын, нисек йәшәүен күрһәткәндәрен аңлап ҡала. Ошо көндән алып Арыҫлан урман әһелдәренә бик иғтибарлы була.***

...Фәрғәттән тәүге айҙарҙа бик күп хаттар килде. Ул үҙенең тәбиғи бөхтәлеге менән барса хаттарға ла яуап яҙырға ваҡыт тапты, Тоцкиҙан Чечняға эләккәс, үҙенең тиҙ арала снайпер мәктәбен үтеп, иң яҡшылар араһында Грозныйҙы азат итеүҙә ҡатнашасағына ғорурланып хат та яҙҙы: "Секретта ултырам: ҡараһам, һыйыр килеп сыҡты. Атырғамы, юҡмы? Атһаң, йәл, атмаһаң, минала шартлаясаҡ. Тиҙ генә етәкләп, егеттәр янына алып килдем. Егеттәргә - һөт, ә миңә - авторитет!". Икенсе хатында: "Секретта ултырһам, бер дух килә. Атырғамы, юҡмы? Атһам, кеше үлә, атмаһаң, хәрби ант боҙола! Күҙҙе йомдом да, аттым. Күҙҙе асһам, дух та юҡ, мәйет тә юҡ. Мылтығы ғыны ятып ҡалған. Егеттәргә - мылтыҡ, миңә - авторитет! Бына нисек һуғышам мин, миңә фортуна ярҙам итә. Хәҙер минең исемде ҡыҫҡартып "Фора" тип йөрөтәләр. Миңә оҡшай, һеҙгә нисек?".

Олатаһының холҡон яҡшы белгәнгәме, уға рухлы хаттар яҙҙы: "Олатай, ышан, ошо һуғыштан ҡайтҡас, үҙемдеке кеүек мылтыҡты табып, саңға әйләндергәнсе бысҡылайым, ә әле миңә уны ныҡ һаҡларға ҡуштылар. Ул һуңғы талаптарға яуап бирерлек итеп эшләнгән, дошман ҡулына төшөргә тейеш түгел".

Үҙәк радио һәм телевидение октябрҙә иң ҡурҡынчлы алыштар барғанлығын һөйләп торҙо. Тап шул мәлдән Фәрғәттән хаттар туҡтаны. Тәүҙә тыныс булырға тырышып көттөләр, аҙаҡ военкомат юлын тапап көттөләр, ике ай үткәс, Дәриғәт ике туған ҡустыһы менән юлға сыҡты. Ҡот осҡос хәлгә әйләндерелгән Грозный буйлап, айҙан ашыу эҙләнеләр: тереләр араһында Фәрғәт юҡ ине. Бәлки, пленға алынғандыр, тигән өмөт йәшәне. Ләкин... һуңғы сиктә унын полкының һуғыштың иң ҡыҙыу нөктәһенә эләгеүе асыҡланды. Ярҙамға килгән йәш кенә лейтенант Фәрғәттең снайпер булғанлығын белгәс, өмөтһөҙ генә ҡул һелтәне.

Дәриғәт инде үҙе лә өмөтһөҙлөккә бирелә башлағайны. Һуңғы рефрежераторҙар, ундағы йөҙәрләгән йәш егеттәр. Йәп-йәш балалар. Әллә ниндәй ирҙәрҙе лә күҙ йәшенә тығылдырыр күренештәр. Ҡәбер көтөп ятыусы изге йәндәр. Үлеләр араһында ла булмағас, Дәриғәт улын иҫәндер, тип тынысланырға тырышты, инде ҡайтыр юлға ла йыйына башланылар. Тимер юл вокзалына килгәс, Әнисәгә хәбәр ебәрергә лә уйланы, ләкин билдәһеҙлек уны туҡтатты. Инде ҡайтыр юлға көйләнгән поезға ултырырға торғанда, поезды оҙатыусы хәрби кейемдәге майор Дәриғәткә:

- Вокзал ситендә һеҙҙең яҡҡа китергә тейешле рефрежераторҙы йыялар, әле дүрт кенә вагон, унға тиклем йыялар, шунда барып кил, - тип кәңәш итте.

Дәриғәт әйберҙәрен ҡалдырып, еңелсә генә шул яҡҡа табан йүгерҙе. Бындағы мәшхәрҙе ул, моғайын, бер ваҡытта ла онота алмаҫ! Ҡот осҡос хәлдә һәләк булған балалар ята. Уларҙы танырлыҡ та түгел. Әле әсә һөтө лә кибеп етмәгән ирендәр. Үлем менән күҙгә-күҙ осрашҡан күҙҙәр. Емерелгән маңлайҙар. Өҙөлгән ҡулдар, аяҡтар. Һәм бына инде һуңғы вагонда ҡапыл Дәриғәттең сикәһен көйҙөрөп, йөрәген һурып алып, бер таныш һын күҙгә салынды. Контракттағы һалдат кейемендә, маңлайына ҡара таҫма бәйләгән һалдаттың гимнастерка төймәһе ысҡынған һәм... унан һары ҡыҙыл кескәй генә тоҡсай күренә. Был бит Фәрғәттең амулеты! Ә кейеме ниңә ундай? Йөҙө танырлыҡ түгел, ҡара янған. Иҫән ҡалған ҡуйы ҡара ҡаштар ғына уныҡы! Инде яраларының ҡаны кибеп ҡатҡан кәүҙәне Дәриғәт күкрәгенә ҡыҫты, нисәмә көндәр йөрәген бешереп торған күҙ йәштәре үҙәк өҙгөс аһ-зар менән инрәп сыҡты:

- Ҡотҡарығыҙ! Ҡотҡарығыҙ минең улымды! - үҙе шунда улына ҡапланды.

Тауышҡа килеп еткән хәрбиҙәр Дәриғәтте тынысландырырға тырыша, носилка менән Фәрғәттең үле кәүҙәһен вагондан алып сыға башланылар. Шунда уҡ һәр танылыу үткән һалдаттар өсөн әҙерләнгән цинк табутҡа һалып ябырға әҙерләнделәр. Үҙен ҡулға алып, Дәриғәт улын тағы бер ҡат ҡарап сыҡты: контрактниктар гимнастеркаһы кейгән егетте диагональ яһап, пулялар тишкеләгән. Тимәк, дошмандар ҡулына эләккән. Нимә булған? Ниңә ул быңдай кейемдә? Бында үткәргән ике ай ваҡыт эсендә Дәриғәт чечендарҙың ҡыҫҡа сроклы һалдаттарҙы атмай, пленға алыуҙарын, ә контракттағыларҙы юҡ итеүҙәрен ишеткәйне инде. Фәрғәттең кем икәнлеген асыҡлағас, унын полкынан бер нисә егет килеп етте. Улар араһында Фораның дуҫы Саша ла бар ине. Ул хәлде атай кешегә йәшенә быуыла-быуыла һөйләп бирҙе:

- Фора бик мәргән снайпер ине, уны иң яуаплы урындарға ебәрәләр ине.

Ул һәләк булған көндө лә беҙҙе, өс снайперҙы, яуаплы заданиеға ебәрҙеләр. Атака алдынан духтарҙың снайперҙарын алырға тейеш инек. Фора бик оҫта ине, бик яҡшы позиция табып, духтарҙы берәмберәм сүпләне, беҙгә ун ике ҡатлы йортта нығынып ҡалған дошмандарҙы бәреп сығарырға юл әрсене. Атака башланғас, башҡалар менән ул да яуға ташланған сағында дошман пуляһы унын һул яҡ сикәһенә тейгән. Беҙ унын яраһын бәйләп, тәүге ҡаттың баҫҡысы аҫтына йәшерҙек, алыш бөткәс, сығырға ҡушып, бәрелешкә ташландыҡ. Фора тыныс ята буламы һуң! Ул йәшеренгән ерҙән сығып, снайпер мылтығына табан шыуышҡан. Хәрби антына тоғро ҡалып, ул ҡоралын дошман ҡулына эләкмәҫлек итеп, үҙе шартларлыҡ итеп ҡуйған. Тап шул саҡ йәшенеп ҡалған дошмандар төркөмө унын янына килеп сыҡҡан һәм Фораны, контракттағы һалдат тип уйлап, бөтә кәүҙәһенә пуля яуҙырғандар... Беҙ ул төркөмдө тоттоҡ, Фора өсөн үс алдыҡ, тик ул юҡ шул... Ҡупшы кейенергә яратты. Шул һәләк итте уны. Кистән: "Быңдай яуаплы алышҡа иң матур кейемдә барырға кәрәк", - тип, контрактта хеҙмәт итеүселәрҙән алған гимнастеркаһын кейеп алды, маңлайына ҡара таҫма бәйләп: "Беҙҙең менән Фортуна! Беҙ еңербеҙ!" - тип, барыһын дәртләндереп йөрөнө...

Улының һуңғы минуттарын тағы-тағы күңеленән кисереп, Дәриғәт һуғышты ҡәһәрләне. Тик нисек итһен? Иң яратҡан улы цинк табутта! Был ҡайғыға Әнисә нисек түҙер, ҡарттар ни эшләр? Ҡарттың бер генә лә ебәргеһе килмәй ине. Бер төн ибәтәйһеҙ төш күреп уяныуын һөйләп: "Ҡасаҡтар өсөн закон бар, бар военкоматҡа, ебәрмәйек малайҙы", - тип ялбарғайны олатаһы. Иғтибар бирмәне, Әнисәгә лә һөйләмәне, ил өҫтөнә килгән ҡайғы итеп ҡабул итте, һәр киткән һалдат ут эсенә эләгәме ни, тип үҙен-үҙе йыуатты. Ә ҡайныһы үпкәләне, Фәрғәт армияға киткәс, күҙ йәшһеҙ генә иланы, төшөндә ейәнен йотҡан Балыҡлыкүлгә балыҡҡа йөрөүҙән туҡтаны. Бына нисек килеп сыҡты. Нисек ҡайтып инергә?..

Фәрғәтте оҙатырға ҡоралды алты һалдат ебәрҙеләр. Хәрби машинаға ике яҡлап менеп ултырҙылар ҙа атай кешегә өнһөҙ генә ымланылар, йыуатманылар ҙа, һүҙ ҙә ҡушманылар. Күрәһең, йәш кенә булһалар ҙа, ҡайғыны күп күргәндәр, уны өнһөҙ, тештәрен ҡыҫып, сикә сәстәрен йолҡоп үткәреп өйрәнгәндәр... Ә бит уларҙың бесән сабып, ҡыҙҙар һөйөп кенә йөрөр сағы!.

Юлда үткән өс көн сикһеҙ уйҙар сыуалсығы, йәшһеҙ генә инрәү булды. Етмәһә, әсәһенең тыуған көнөнә тура килде улар ҡайтып төшкөн көн. Әсә кеше нисек кенә ялбарһа ла, табутты асманылар. Военкоматтан килгән кеше ерләүҙе ойошторҙо. Иптәштәре теҙелеп, ҡәбер янында залп бирҙе. Әйтерһең дә, тереләргә, бындағыларға дары еҫен татытырға теләнеләр. Илдең иң юғары наградаһы "Рәсәй батыры" орденына лайыҡ булған дуҫтары ҡәберенән улар тағы ут эсенә ашыҡтылар, тиҙ арала машиналарына тейәлделәр, Әнисә бешергән юл аҙығын алдылар ҙа ҡуҙғалып та киттеләр.

Шунда әсә йөрәгенән сыҡҡан йән әрнеткес һүҙҙәр яңғыраны:

- Беҙҙең уландарҙың ни гонаһы бар?

- Кешеләр, балаларҙы һаҡлайыҡ, улар йәшәргә тейеш бит!.

Ә ҡәбер һәйкәленән ун туғыҙ йәшлек сибәр егет ҡарай ине. Һәр һалдат конвертына үҙе төшөрөп ебәрә торған аҡһыл болот һүрәте эсенә "Фортуна" тип яҙылған. Аҡһыл болот булып ҡайтты Фәрхәт батыр! Йыназаға килеүселәр өҫтөнә ваҡ ҡына тәүге ямғыр тамсылары түгелде. Ҡапыл болот аҫтынан сағыу нур шәлкеме ялтырап китте: әйтерһең, Фәрғәт ап-аҡ тештәрен күрһәтеп бер йылмайҙы ла, кешеләргә һуңғы бүләген һипте...

## БАЛАҢА УҠЫ!



## ШАЯРЫУ

Урман уянып та өлгөрмәгән йәйге бер иртә. Ағастарҙың тығыҙ япраҡтарында ҡалған ысыҡ тамсылары ла кибеп бөтмәгән. Йөнтәҫ тиреле һәм ҡанатлы-ҡауырһынлы урман әһелдәре үҙҙәренең һуңғы төштәрен күрәләр. Ошо таң һарыһы беленә башлағанда кемдер урман хужаһы Арыҫландың ҡапҡаһын ҡаты итеп шаҡырға керешә. Хужа был тиклем иртә менән борсоғандарына ҡәнәғәтһеҙләнеп, ҡапҡаһын аса. Ул үҙенең алдында йүгереп тыны бөткән, ҡурҡышынан йән-яғына ҡаранған баш министры Юлбарыҫты күрә.

- Урманда берәй хәл булдымы? Был тиклем дә иртә менән нимә ҡарап йөрөйһөң? - тип һорай

- Йоҡлап булманы... Ҡурҡышынан, балаларҙың илауынан, Арыҫлан. Нәфрәтләнмә инде, батшам...Төнө буйы алдағы билдәһеҙлектән урман халҡы бөтөнләй керпек ҡаҡманы, - тип яуаплай ҡалтыранған тауышы менән Юлбарыҫ.

- Нимә булды? Һуҙма! Һөйлә тиҙерәк! - тип бойора Арыҫлан.

- Урманда күҙгә күренмәгән ниндәйҙер йән эйәһе пәйҙә булған... Төндәрен ҡурҡыныс тауыш менән үкерә, барыһын да ҡурҡыта... Урман халҡы өңдәренән танауҙарын да сығарырға ҡурҡалар... Улар һинең был ҡот осҡос имәнес нәмәне табыуыңды һәм тынысландырыуыңды һорайҙар...

- Бар, барыһына ла иғлан ит! Мин уны табасаҡмын, үҙ урынына ултыртасаҡмын һәм тәртип урынлаштырасаҡмын!

Юлбарыҫ унын бойороғон урман халҡына йәһәтерәк еткерергә, тип ашығып китеп бара. Арыҫлан тәрән уйға ҡала: "Барыһын да ҡурҡыуға һалған был йән эйәһен нисек табырға?" Юлбарыҫты ебәргәненә үкенеп тә ҡуя, сөнки уға юл күрһәтеүсе кәрәк бит. Ул биләмәһен һирәк ҡарап сыға, шуға ла урманды насар белә.

Эргәләге ҡарағай башында ултырған ҡарт Ҡарға был мажараны иғтибар менән күҙәтә. Батшаның урманды ҡарап сығыу теләген белгәс, ағас башынан уға ҡысҡыра:

- О, минең батшам! Һинең нимә эҙләгәнеңде мин беләм! Миңә өҫтән бар урман яҡшы күренә! Ҡаррр! Әйҙә, минең арттан, һиңә юлды күрһәтеп барырмын!

Урманға ҡайҙандыр килгән, барыһын да үҙенең ҡурҡыныс тауышы менән ҡурҡытҡан билдәһеҙ йән эйәһен эҙләргә икәүләп сығып китәләр. Ҡарға ҡайын сауҡалығынан йүкә ағаслығына, имәнлектән ҡарағайлыҡҡа осоп үтә, ҡамыш баҫҡан йырындар өҫтөндә өйөрөлөп-өйөрөлөп йөрөй, кеше үткеһеҙ сәтләүеклек һәм ҡурай eләктәре ҡыуаҡтары ла ситтә тороп ҡалмай. Ләкин бер ерҙә лә билдәһеҙ йән эйәһен осратмайҙар. Батша янына килеп, йәнлектәр үҙҙәренең ҡайғыларын һөйләйҙәр. Бына дауыл мәлендә ҡартайған имән ҡолап, йылғаны быуған икән, хәҙер аҫҡы урманда йәшәүселәр һыуһыҙ ҡалғандар. Бал ҡорттары кәрәҙҙәрен туҙҙырған айыуға зарланалар. Төлкөнөң алдауынан, һайыҫҡандың ғәйбәт ташыуынан урманда йыш ҡына әрләшеүҙәр, хатта һуғышыуҙар ҙа була икән. Батша иҫе китеп быларҙың барыһын да тыңлап, шуны аңлай: халҡының нисек йәшәүен ул бөтөнләй белмәй икән! Ләкин шуныһы асыҡлана - берәү ҙә ҡот осҡос билдәһеҙ йән эйәһен күрмәгән! Ҡараңғы эңергә тиклем Арыҫлан шишмәләр аша һикереп, тиреһен һыҙырған ҡуйы сәнскеле ҡыуаҡлыҡтарҙы йырып, бейек ҡалҡыулыҡтарға менеп, тәрән йырындарҙы үтеп, Ҡарға артынан сапҡан да сапҡан...

Бөтөнләйгә хәле бөтөп, арып, ағас төбөнә килеп ята. "Көнө буйы әллә нимә эҙләнек? Ҡайҙа ул?" - тип Ҡарғаға ҡысҡыра. Уға яуап биреүсе булмай, ул күптән инде ҡайҙалыр осоп киткән була. Шунда ғына Арыҫлан уны һарайынан юрамал алдап сығарып алғандарын, биләмәләре буйлап йөрөтөп, халҡының мохтажлыҡтарын, нисек йәшәүен күрһәткәндәрен аңлап ҡала. Ошо көндән алып Арыҫлан урман әһелдәренә бик иғтибарлы була, ҙур яуаплылыҡ менән урман тормошон күҙәтә һәм етәкселек итә. Артабан ул ишеткән хәбәрҙе башта үҙе тикшерергә ғәҙәтләнеп китә.

**"Әгәр Аллаһу Тәғәлә кемгәлер мосолман эштәрен ышанып тапшырһа, ә ул кеше Унын алдында ишектәрен ябып ҡуйһа, Аллаһ та Үҙ бәрәкәтен ябып ҡуйып, ул кешене үҙенең мохтажы менән ҡалдырыр", тиелә хәҙистәрҙә.**

✓ Аяуһыҙ уйындар менән кешенең үҙен агрессив тотоуы араһында бәйләнеш бар. Ҡан түгелгән, көс ҡулланыу сәхнәләре асыуҙы нык көсәйтә. Ошо рәүешле күңел асыуҙы хуп күреүселәрҙең яйлап холҡо ла, үҙен тотошо ла үҙгәрә.



ИНТЕРНЕТТАН



# КОМПЬЮТЕР УЙЫНДАРЫ...

## холоҡто үҙгәртә

■ Төнгөлөккә ашарға ярамай, тип раҫлай бөтөн табиптар ҙа. Тик әгәр ҙә ваҡытында ашап өлгөрмәгәндәргә нимә эшләргә һуң? Төнгә ҡарай ашауҙы зыянһыҙ итергә тырышығыҙ, тип кәңәш бирә диетологтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ас көйөнсә йоҡларға ятыуҙың шулай уҡ кире яҡтары бар. Ғалимдар күптәр раҫлаған, тамағы туҡ кеше яҡшырай йоҡлай. Йоҡлар алдынан нимәләр ҡапҡылап алыу ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә. Шулай итеп, һуңға ҡалған киске аш майһыҙландырылған йогурттан тора ала. Унда диетик протеин бар, ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫасаҡ, иң яҡшыһы - йогурт артыҡ татлы булмаһын. Эремсек тә сәләмәт туҡланыу рационынан. Йәшелсәләр шулай уҡ ярайһы ғына туҡлыҡлы ризыҡ, калориялары ла аҙ. Аҡ ит организмдың углевод менән майҙарҙы энергияға әйләндереүен яйлата.

■ Анар ҡан тамырҙарына яҡшы йоғонто яһай, ул майҙарҙы яндырып, тамырҙарҙың стенаһын һығылмалыраҡ итә. Анар емеше файҙалы матдәләргә, шул иҫәптән антиоксиданттарға һәм полифенолға бай. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын һаҡлай, шуға ла ҡан тамырҙары яҡшыраҡ тарая һәм киңәйә, был иһә ҡан әйләнешен нормала тота. Әселәндереүгә ҡаршы матдәләр атеросклерозды булдырмай, был ҡан тамырҙарына оҙаҡ ваҡыт һығылмалылығын һаҡларға булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был емеш һөт биҙҙәре яман шеше ихтималлығын кәметә. Бынан тыш, продукт насар холестерин сығанағы булған түбән тығыҙлыҡтағы майҙарҙы яндыра, ә файҙалы майҙарҙы, киреһенсә, күбәйтә.

■ Америка психология ассоциацияһы белгестәре раҫлауынса, компьютер уйындарының аяуһыҙ төрҙәре кешелә агрессия уята. Ғалимдарға был тикшеренеүҙәрҙә үткәреү өсөн 20 йыл кәрәк булған. Аяуһыҙ уйындар менән кешенең үҙен агрессив тотоуы араһында, ысынлап та, бәйләнеш бар, ти улар. Ҡан түгелгән, көс ҡулланыу сәхнәләре асыуҙы нык көсәйтә. Ошо рәүешле күңел асыуҙы хуп күреүселәрҙең яйлап холҡо ла, үҙен тотошо ла үҙгәрә. Ғалимдар былдай уйындарҙы уйлап табыусыларға уйындарҙа көс ҡулланыуҙы кәметергә, ә ата-әсәләргә балаларына атыш уйындарын тыйырға кәңәш итә.

■ Фин ғалимдарының яңы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, кеше үҙен сәләмәт тойһон өсөн уға тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлау мотлаҡ. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, йоҡоһо туйған хеҙмәткәрҙәр һирәк ауырый. Ғалимдар йоҡо менән ауырыу сәбәпле эшкә бармай ҡалған көндәр тураһындағы мәғлүмәттәрҙе берләштереп, йоҡо өсөн иң уңайлы ваҡытты иҫәпләп сығарған. 30 йәштән өлкән 1875 ҡатын-ыҙ менән 1885 ир-егеттәр ҡатнашҡан һынауҙар күрһәтеүенсә, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар йышыраҡ ауырый икән. Ә кем тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлай, улар дауахана тупһаһын һирәгерәк тапай. Ир-егеттәр өсөн төнгө йоҡо 7 сәғәт 46 минут, ә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 7 сәғәт тә 38 минут тәшкил иткән. Йоҡо туймағанда кеше яңы мәғлүмәтте ҡабул итә алмай, иғтибарлылыҡ, хәтер насарая. Бындай кешеләрҙең энергияһы түбән, кәйефе насар була.

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...

# ЙЫЛҠЫ МЕНӘН УТ -

## уңыш сығанағы



**Көнсығыш календары буйынса 2026 йыл Ут төҫөндәге Ҡыҙыл Йылҡы билдәһе аҫтында уға хас көс-ҡеүәт, хәрәкәт, дарман һәм үҙгәрештәргә ынтылыш кеүек сифаттар менән оҙатылып барасаҡ.**

Ҡыҙыл төҫ һәм Ут стихияһы Йылҡының тәбиғи сифаттарын көсәйтеп, был йылды ваҡиғаларға һәм үҙгәрештәргә уғата байытасаҡ ҡына. Әйткәндәй, йондоҙнамәлә Йылҡы менән Ут берҙәмлеге бик һирәк - 60 йылға бер тапҡыр ҡабатлана һәм ысын мәғәнәһендә уңыш сығанағы булып танылған, ти астрологтар. Тап шуның өсөн дә ниндәйҙер эш башларға йә булмаһа эшмәкәрлегендә йүнәлешен үҙгәртергә, берәй яңылыҡ ҡулланырға ниәтләнгән кешеләр өсөн был иң ҡулай, уңышлы йыл буласаҡ. Ҡыҙыл Йылҡы йылында коммуникация, лидерлыҡ, сәнғәт, спорт, маркетинг, шоу-бизнес һәм технологиялар менән бәйле һөнәрҙәр сәскә атасаҡ. Йыл бизнес шөғөлөнә, эшҡыуарлыҡҡа үҫеш бирә. Яңыса ҡарарҙар, стандарт булмаған форматтар, яңы баҙарҙар, эшкә креатив мөнәсәбәт яҡшы һөҙөмтәгә килтерер. Йылҡы йылы Юлбарыҫ, Эт, Ҡуй һәм Йылан билдәләренә яҡшы мөнәсәбәттә булып, уларҙың һәр гәмәлен ҡанат аҫтына алыр. Шул уҡ ваҡытта, һәр стихияға хас булғанса, Йылҡының да "күләгәле" яҡтары бар: түҙемһеҙлек, тоҡанып китеү ғәҙәте, баш бирмәү. Йылҡы баҫым яһағанды яратмай, ә был иһә мөнәсәбәттәрҙә көтөлмәгән ҡылыҡтарға, хис-тойғо ҡойонона һәм кәйеф үҙгәрештәренә килтереүе ихтимал.

***Астрологтар 2026 йылда йондоҙнамәнең һәр билдәһенә түбәндәгесә юрауҙарын белдерә:***

***СЫСҠАН (1948, 1960, 1972, 1984, 1996, 2008) -*** көтмәгәндә ниәттәрегеҙ үҙгәреүе йә булмаһа тотҡарланып тороуы ихтимал, шуға күрә бындай хәл менән тура-нан-тура көрәшмәгеҙ, ә һығылмалы тактика һайлағыҙ. Яңы шарттарға яраҡлаша алыуығыҙ аша ҡулығыҙға аҡса инер. Бөтә нәмәне лә контролдә тоторға тырышмағыҙ. Был йыл тормошҡа һәм билдәһеҙлек шарттарында эш итеүгә лә хатта ышаныс менән ҡарауҙы талап итә. Сәләмәтлеккә айырым иғтибар бүлеү кәрәк, сөнки хис-тойғо көсөргәнеше, йоҡоһоҙлоҡ, ҡан баҫымы тирбәлеүҙәре кисереүегеҙ бар. Шуға күрә көн режимығыҙҙы боҙмағыҙ, тейешле ялдан үҙегеҙҙе мәхрүм итмәгеҙ.

***ҮГЕҘ (1949,1961, 1973, 1985, 1997, 2009) -*** Йылҡы йылы һеҙҙә тынғыһыҙлығы менән йонсотор: тотороҡлоҡ был билдәгә хас нәмә түгел, ә Үгеҙгә, киреһенсә, тыныслыҡ кәрәк, ул яйыраҡ ҡуҙғалыусан. Финанс хәлегеҙ тирбәлеүсән булмаҡсы, айырыуса йылдың икенсе яртыһында. Шуға күрә элекке юлығыҙҙы ташламауығыҙ хәйерле булыр, яңы проекттар башламай тороғоҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙгәрештәргә лә ҡаршылашмағыҙ, иң мөһиме эске тотороҡлоҡ булһын. Һаулыҡ яғына килгәндә, арҡа, быуындар, ашҡаҙан-эсәк юлдары иғтибар талап итә. Көсөргәнмәгеҙ, күберәк ял итегеҙ.

***ЮЛБАРЫҪ (1950, 1962, 1974, 1986, 1998, 2010) -*** карьера, финанс өлкәһендә һеҙҙең йыл килә. Йылҡы Юлбарыҫты күтәрмәләп, һеҙҙең лидерлыҡҡа һәләтегеҙҙе, энергияғыҙҙы һәм һөйкөмлөлөк сифаттарығыҙҙы тағы ла көсәйтә төшә. Һеҙҙе дан һәм танылыу көтә. Һәр эшкә лә ышаныслы тотона алаһығыҙ, тик үҙегеҙҙең теләктәрҙе генә ҡайғыртмағыҙ, башҡаларҙы ла һанлағыҙ - шул шартта ғына был һеҙҙең йыл буласаҡ. Шәхси башланғыстарығыҙ һәм эшкә ижади мөнәсәбәт килем килтерер. Иңегеҙгә яуаплылыҡ алыуҙан ҡурҡмағыҙ. Һаулыҡ Юлбарыҫтарға ла кәрәк: йөрәк һәм терәк-хәрәкәт системаһын контролдә тотоғоҙ.

***ҠУЯН (1951, 1963, 1975, 1987, 1999) -*** карьера һәм финанс йәһәтенән ябай ғына йыл булмаҫ төҫлө. Йондоҙлоҡтағы ҡайһы бер билдәләр кеүек уҡ, йылдың көсөргәнешле килеүе һәм үҙгәрештәр һеҙҙең дә күңелегеҙгә ятып бөтмәҫ, ләкин үҙ темпығыҙҙы һаҡлағыҙ, дөйөм ығы-зығыға бирелмәгеҙ һәм үҙ көйөгөҙҙә "боҙмағыҙ", хәрәкәттән туктамағыҙ. Конфликттарҙы урап үтегеҙ, энергияғыҙҙы һаҡлағыҙ. Сәнғәт, хәстәрлек, һөнәрселек менән бәйле эшмәкәрлек килем килтерер. Ниндәй хәлдәрҙә лә тыныс булып ҡалыу хәйерле, үҙ ритмығыҙҙа ҡалығыҙ, башҡалар саба тип, сапмағыҙ, ләкин туҡтап та ҡалмағыҙ. Сәләмәтлеккә ҡағылышлы аш һеңдереү һәм тын юлдары системаһы борсоуы бар, йылы ризыҡ, массаж, һулыш гимнастикаһы тәҡдим ителә.

***АЖДАҺА (1952, 1964, 1976, 1988, 2000, 2012) -*** карьера һәм финанс йәһәтенән йыл һеҙгә яҡшы мөмкинлек бирә, айырыуса киңерәк фекерләү өлкәләрендә. Публикала күренеү, PR, һөйләшеүҙәр өсөн уңайлы ваҡыт. Башҡаларҙы йәлеп итерлек мөләйем сифаттарығыҙҙы ҡулланығыҙ, тик артыҡ мауығып та китмәгеҙ: бөтөн мәсьәләләрҙе лә һөйкөмлөк сифаты менән хәл итеп булмауын, аҡыл һәм стратегия ла кәрәк икәнлеген онотмағыҙ. Аҡса йәһәтенән килешеүҙәргә ҡағылышлы һаҡ булыу талап ителә. Бөтәһе лә яҙма рәүештә теркәлеп барырға тейеш. Һаулыҡ мәсьәләһендә ҡан баҫымын, стресс кимәлен күҙәтеүҙә тотоу, көсҡеүәтегеҙҙе дөрөҫ бүлеү мөһим.

***ЙЫЛАН (1953, 1965, 1977, 1989, 2001) -*** һеҙҙең өсөн йыл аулаҡта эшләү, хәл-ваҡиғаларҙы анализлау, рухи эшмәкәрлектәр өсөн уңай. Йылҡының шау-шыуын үҙ итмәҫһегеҙ, ләкин "һоро кардинал" ролендә кеше күҙенә салынып бармаһағыҙ ҙа, йоғонто һәм власть ҡеүәтенә эйә булырһығыҙ. Финанс йәһәтенән әллә ни үҙгәрештәр күренмәй, ләкин килем үҫеше тотороҡлоҡ шарттарына бәйле. Үҙегеҙгә ҡағылмаған эштәргә ҡыҫылмау хәйерле, аралыҡ һаҡлағыҙ, ләкин үтә алыҫлашып та китмәгеҙ. Һаулыҡ өлкәһендә гормональ фон, иммунитет системаһын, организмды таҙартыу һәм туҡланыу балансын күҙәтеүҙә тотоу талап ителә.

***ЙЫЛҠЫ (1954, 1966, 1978, 1990, 2002) -*** үҙ йылығыҙҙа карьера һәм финанс мәсьәләләренә юл асылыр, шул уҡ ваҡытта һынауҙар ҙа булғылар. Был йыл ҡояш нуры һеҙгә мул төшөр һәм ниәттәрегеҙҙең күпселеге бойомға ашыр, тик тарҡаулыҡҡа бирелмәгеҙ. Бөтөн иғтибар һәм ижадиһатығыҙҙы төп проектҡа һалығыҙ. Финанс йәһәтенән һеҙҙе уңышлы йыл көтә, уның ҡарауы, байтаҡ көс һәм хис-тойғо сарыф итерһегеҙ. Ваҡиғалар үҙегеҙҙә булыуығыҙ - һеҙҙең өсөн мөмкинлек тә, һынау ҙа ул. Шуны иҫтә тотоғоҙ: лидерлыҡ - ул етәкләү генә түгел, башҡаларҙы тыңлай һәм ваҡытында туҡтала ла белеү. Нервылар системаһын, йөрәк эшмәкәрлеген көйләгеҙ.

***ҠУЙ (1955, 1967, 1979, 1991, 2003) -*** карьера һәм финанс өлкәһендә был йыл һеҙгә күләгәнән сығырға ярҙам итер. Шундай тәҡдимдәр алырһығыҙ: тәүҙәрәк баҙап ҡалһағыҙ ҙа, ул һеҙгә киң юл асыр. Башланғыстар күрһәтеүҙән ҡурҡмағыҙ. Ижад һәм социаль проекттар өсөн бик уңышлы мәл килә, финанс йәһәтенән хәлегеҙ тотороҡло булыр. Көтөлмәгән килем алырһығыҙ. Ваҡиғалар ағышына ышаныслы тотаһығыҙ, тик сиктә үтеп китмәгеҙ. Йыл һеҙҙең өсөн еңел һәм емешле булыр, тик бөтөн эште үҙ елкәгеҙгә генә һалмағыҙ. Һалҡын тейҙереүҙән, артыҡ көсөргәнештән һаҡланығыҙ, тын һәм аш һеңдереү юлдарын контролдә тотоғоҙ.

***МАЙМЫЛ (1956, 1968, 1980, 1992, 2004) -*** карьера һәм финанс өлкәһендә үҙегеҙҙе ышанаслы тотаһығыҙ, йылғырлыҡ һәм хәл-ваҡиғаларҙан файҙалана белеүегеҙ уңыш килтерер. Тик хәйләгә юлына баҫмағыҙ. Көтөлмәгән тәҡдимде ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Аралашыуҙар, креатив һәм стандарт булмаған юлдар килем килтерер. Иғтибарығыҙҙы иң мөһим темаларға туплағыҙ. Ылыҡтырған нәмәләр күп булыр - шулар араһынан иң кәрәклеһен һайлап ала белеү мөһим. Һаулыҡ йәһәтенән кәйеф тотороҡһоҙлоғо, йоҡоһоҙлоҡ, арып-талсығыуҙар булыр. Спорт, музыка, бейеү һәм режим тотоу уларҙы энергә ярҙам итер.

***ӘТӘС (1957, 1969, 1981, 1993, 2005) -*** Йыл эске көйәләнеүҙәргә килтереүе бар: буталсыҡлыҡ, тәртип булмауы һеҙҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырыр, ләкин системаға ҡаршы барыу түгел, ә уның көйөнә эш итеү мөһим. Эшегеҙҙә үҙгәрештәр килеп тыуыуы бар. Финанс мәсьәләһе көйлә, ләкин тотороҡлоҡ юҡ. Үҙегеҙҙе бер генә йүнәлеш менән сикләмәгеҙ. Бөтөн әйләнә-тирәгеҙҙәгеләрҙе ойошторорға, тәрбиәләргә тырышмағыҙ. 2026 йыл эске азатлыҡ талап итә. Башҡаларға һабаҡ биреүгә ҡарағанда, үҙегеҙҙең үҫеш кимәлен үҫтереү буйынса эшләгеҙ. Тамаҡ, тауыш, иммунитет өлкәләрен иғтибарҙа тотоғоҙ. Хис-тойғо көсөргәнеше соматик билдәләргә килтереүе ихтимал.

***ЭТ (1958, 1970, 1982, 1994, 2006) -*** Әгәр һеҙҙең эшмәкәрлек өлкәһе йәмғәтселек, юриспруденция, мәғариф менән бәйле булһа, уңышлы йыл көтә. Йылҡы менән Эт союздаштар һәм был һиҙелерлек һөҙөмтәләрен бирә. Яңы партнерлыҡ мөмкинлеге, сит илдә эш, ирекмәнлек шөғөлө бар. Финанс хәлегеҙ яйлы. Үҙ эшегеҙҙе мөкиббән башҡарығыҙ, башҡаларҙың ығы-зығыһына ҡушылмағыҙ: һеҙҙең көсөгөҙ тыныс ынтылыш һәм намыҫлылыҡ икәнде онотмағыҙ. Һаулыҡ торошо буйынса терәк-хәрәкәт аппараты, арҡа, аяҡ быуындары һыҙлауы бар. Саф һауала йөрөү, бер көйлө әүҙемлек һәм тәбиғәттә ял көс бирер.

***ҠАБАН (1959, 1971, 1983, 1995, 2007) -*** Ҡабан шулай уҡ Йылҡы тиҙлегенә өйрәнә алмай йонсоу бар. Был - уңайлылыҡ түгел, ә хәрәкәт йылы. Шул уҡ ваҡытта, әгәр ҙә уҡыһағыҙ, яңы күнекмәләргә эйә булып алһағыҙ, ошо хәрәкәттә үҙ тулҡыныһығыҙҙы табырһығыҙ. Финанс өлкәһендә ғаилә һәм йорт өсөн көтөлмәгән сығымдар булыуы бар. Үҙгәрештәрҙән ҡурҡмағыҙ, ығы-зығыға бирелмәгеҙ. Йыл уның көйөнә тигеҙләнгән аҙымдар яһауҙы көтә. Һаулыҡ иғтибар кәрәк: аш һеңдереү, бауыр, лимфалар системаһы эшен күҙәтеп барығыҙ. Йылы ванна, массаж, тәбиғи ризыҡтар менән туҡланыу кәрәк.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
әҙерләне.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТАБЫНДА - БАШҠОРТ РИЗЫҠТАРЫ

**Хәҙер, шөкөр, барыһы ла бар, табындар муллыҡтан һығылып тора. Тик хәҙер икенсе нәмә башты ҡаңғырта: табынға ҡунаҡтарҙы аптыратырлыҡ ниндәй ризыҡ әҙерләргә һәм уларҙы нисек төрләндерергә? Ә, бәлки, мода артынан ҡыуып, төрлө салат-малаттар, яңынан-яңы рецептар буйынса әҙерләнгән табындарҙы бер яҡ ситкә ҡуйып тороп, үҙебеҙҙең башҡорт милли ризыҡтарына өҫтөнлөк бирербеҙ, йәмәғәт? Ни тиһәң дә, табиптар ҙа, ғалимдар ҙа, кеше ниндәй ерҙә тыуған, уның организмы шул ерҙә үҫтерелгән ризыҡты яҡшыраҡ үҙләштерә, тип белмәй әйтмәйҙәр. Бына, мәҫәлән...**



## Бишбармаҡ

Башҡорт милли ризыҡтары табынында, моғайын, төп урынды бишбармаҡ алып торалыр. Уны бешереү өсөн мотлаҡ майлы ит кәрәк. Әгәр ит майлы булмаһа, һурпаға ҡаҙ ите ҡушып ебәрергә лә мөмкин. Итте, ҡайнап сыҡҡас, тандыр утта бешерәбеҙ (ҡаҙ итен мотлаҡ ҡайнар һурпаға һалырға!), бешеп сығырға ярты сәғәт ҡала тоҙ һалабыҙ. Бишбармаҡ өсөн бешкән иттең һурпаһы туҡмаслы аштыҡы кеүек күп булырға тейеш түгел.

Аш ҡайнаған арала ҡамыр баҫып, уны йоҡа итеп йәйәбеҙ. Бишбармаҡ һалмаһы ҡаты булмаһын өсөн ҡамыр баҫҡан йомортҡаға бер аҙ һурпа ҡушабыҙ. Ҡамыр ҡулға йәбешмәҫлек итеп баҫып, уны бер аҙға табаҡ менән ҡаплап һалып ҡуябыҙ. Һуңынан йоҡа йәймә итеп йәйеп, яҡтары 3-4 сантиметрлы ромбиктар ҡырҡабыҙ.

Ит бешеп сыҡҡас, һурпаны һарҡытабыҙ ҙа, уға ромбиктарҙы һалып бешерәбеҙ һәм бешеп сыҡҡас, уларҙы дуршлагка алып, бер аҙ һарҡытҡас, тәрән тәрилкәләргә йәйеп һалабыҙ, өҫтөнә тигеҙ киҫәктәргә туралған ит, ҡулса йәки ярымҡулса итеп туралған һуған һалабыҙ. Табынға һурпаһын айырым һауытта, йәшел тәмләткестәр ҡушып бирәбеҙ. Ҡорот та тәҡдим итергә мөмкин.

## Бауырһаҡ

Дүрт йомортҡаны күпергәнсе туҡып, уға дүрт ҡалаҡ һыу өҫтәп, бер семтем тоҙ һалып, иләнгән, йылыла ултырған он ҡушып, ҡалаҡ менән генә туҡыйбыҙ. Әүәләрлек масса барлыҡҡа килгәс, онда еңелсә әүәләп, өҫтөнә табаҡ йәки таҫтамал ябып, 30 минутҡа ҡалдырабыҙ. Ошо арала бешереү өсөн май әҙерләйбеҙ. Ҡайнатыуға күп өлөштә көнбағыш майы алына, уға һары май йәки ҡаҙ майы ҡушырға кәрәк.

Ярты сәғәт үткәс, бысаҡ менән кәрәгенсә ҡамыр киҫеп алып, уның киҫелгән яғын онға манып, бау кеүек итеп әүәләйбеҙ. Ошо "бау"ҙы аҙға ғына һалып тороп, шуны тигеҙ генә өлөштәргә ҡырҡабыҙ. Ҡамыр ныҡ онло булмаһын. Бысаҡҡа йәбешмәһен өсөн бысаҡты онға манып-манып алабыҙ, бысаҡҡа ҡамыр йәбешһә, уны икенсе бысаҡ менән ҡырып төшөрәбеҙ.

Майҙы ҡайнатырға ҡуйып, уның ҡыҙғанлығын белеү өсөн бер бауырһаҡты һалып ҡарайбыҙ, ул ҡапыл ҡабармай, яйлап ҡына ҡабара икән, бауырһаҡтарҙы һалырға мөмкин. Бауырһаҡтар ҡабарып сыҡҡас, утҡа ултыртабыҙ һәм уттың ҡыҙыулығын яйлап арттырабыҙ. Бер туҡтауһыҙ болғап торабыҙ. Шулайтһаң, тигеҙ бешә.

Бешкән бауырһаҡтарҙы дуршлагка һарҡытып алғанда майҙы уттан алып торорға, икенсе партияны һалғанға тиклем майға тағы бер аҙ май өҫтәп, уның бер аҙ һыуынғанын көтөргә тура килер, сөнки ҡыҙыу майға һалһаң, бауырһаҡтар ярыла. Бешкән бауырһаҡтарҙы тәрән табаҡҡа һалып, уның өҫтөнә шәкәр пудраһы һибеп болғарға ла мөмкин.

## Ваҡ бәлеш

Һөттө ҡайнатып, йылымыс ҡына итеп һыуытабыҙ йәки һыу ҡушабыҙ ҙа, йылымыс булғас, әсетке һалып әсетәбеҙ. Мәҫәлән, бер стакан һөткә бер стакан һыу, ярты стакан көнбағыш майы, әсетке, самалап тоҙ һәм саҡ ҡына шәкәр ҡомо һалабыҙ. Йылы урынға ҡуйып ҡабартабыҙ. Ҡабарғас, ҡамырҙан бер формалағы ваҡ ҡына түңәрәктәр эшләп таҡтаға һалабыҙ. Улар ҡабарғансы фарш әҙерләйбеҙ. Фарш йомшаҡ һәм һутлы булһын өсөн уға бер аҙ һөт йә һурпа ҡушыла, тәмләткестәр һалып болғатыла. Шулай уҡ төрлө ит (һыйыр малы, һарыҡ, ҡаҙ йәки ат ите) ҡушылған фарш та тәмле килеп сыға. Ҡамыр ҡабарғас, уларҙы ҡул менән генә йәйгеләп, әҙер фаршты уртаһына йәйеңкерәп һалабыҙ, фарш тигеҙ булып ятһын. Ҡамырҙың ситтәрен тартыбыраҡ бөрәбеҙ, тап уртаһында тишек ҡалдырабыҙ. Табала май ҡыҙҙырып, ваҡ бәлештәрҙе майға түңкәреп, йәғни тишекле яғын майға тәүҙә һалабыҙ, сөнки киреһенсә эшләгәндә фарштың һурпаһы һуңынан майға төшөп, май ян-яҡҡа сәсрәйәсәк. Табынға йылы килеш сынаяҡтарға йәшел тәмләткестәр һалынған һурпа менән бирергә мөмкин.

## Бәлеш

Теләһә ниндәй бәлеш бешерер өсөн сөсө ҡамыр уңайлы. Ондо майға баҫабыҙ, саҡ ҡына һөт, самалап тоҙ һалабыҙ. Ҡамыр йомшаҡ ҡына итеп баҫыла. Әҙер булғас, уны ике өлөшкә - береһен ҙурыраҡ, икенсеһен бәләкәйерәк итеп бүлергә кәрәк. Ҙурыраҡ өлөштө табаның ситенә сығырлыҡ итеп йәйергә, табаға һалғас, уны алдан әҙерләнгән эслек менән тултырырға кәрәк (эслеккә дөгө менән йөҙөм, ит менән картуф, йәки балыҡ менән дөгө, кәбеҫтә һ.б. һалырға мөмкин). Эслек һалынғас, уның өҫтөнә иретелгән һары май ҡойорға. Йәки эслекте болғаған ваҡытта уҡ уға иретелгән һары май һалып болғарға кәрәк. Аҡ май бармай, сөнки иреһә, уның һыуы сыға. Ҡамырҙың икенсе өлөшөнән йәймә йәйеп, уны бәлештең өҫтөнә ҡапларға, ситтәрен тоташтырып, төрлө формала семәрләргә мөмкин. Бәлеш ҡамырының өҫтө ҡабарып тормаһын өсөн уны тигеҙ генә итеп сәнске менән тишкеләп сығырға кәрәк. Духовкала тандыр ғына утта бешерәбеҙ.

## Ҡаҙылыҡ

Ҡаҙылыҡты йыуабыҙ ҙа (уның яртыһы май, яртыһы ит булһа яҡшы), самалап тоҙ һөртөп, бер аҙ туңдырабыҙ. Тултыра торған эсәкте ебетеп, уның бер башын бәйләп, 3-4 иле ҡалынлығында таҫма һымаҡ итеп ҡырҡылған ҡаҙылыҡты тултырабыҙ. Ҡаҙылыҡты бик оҙон итергә лә ярамай. Уртаса оҙонлоҡта булғас, бәйләп, элеп ҡуябыҙ. Бешергәндә ярылмаһын өсөн һыуға һалыр алдынан энә менән тишкеләп сығабыҙ.

## Бауырҙан паштет

Бауырҙы артыҡ ваҡ итмәй генә турап, тоҙ һалып бешерәбеҙ. Бешеп сыҡҡас, һарҡытып, ит турағыстан үткәрәбеҙ, уға һуған, борос, самалап тоҙ ҡушабыҙ. Килеп сыҡҡан массаға аҡ май һалып баҫабыҙ ҙа, табаға һалып, өҫтөнә ҡырғыстан сыр ҡырып, майонезға болғап, бешкәндә аҡмаһын өсөн паштеттың уртаһында саҡ ҡына соҡор яһап, шунда тултырабыҙ. Кишер менән һуғанды табала майҙа ҡыҙҙырып һалырға ла була.

**З. ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Һарығош, үтәбикә

**(Иволга)**



Сыйырсыҡтан ҙурыраҡ ҡош, кәүҙәһе оҙонораҡ. Атаһы - сағыу һары, ҡанаттары ҡара, суҡышы ҡыҙыл. Инә һәм йәш ҡоштар һарғылт-йәшел, түштәрендә аҡ төҫтәге таптары бар. Тауышы - бесәй мыяулаған кеүегерәк. Тәбиғәткә яҡын йәшәгән халыҡ уны "Үтәбикә бейә һау, үтәбикә бейә һау" тип һайрай тип "ишеткән". Исеме лә ошонан алынған.

Урманда ла, баҡса, парктарҙа ла йәшәй. Ағастың олонона ултыра. Нәҙек кенә ботаҡтарға һырындырып, оя яһап ҡуя. 3-4 йомортҡа һала.

Бөжәктәр менән туҡлана. Йөнтәҫ ҡарышлауыҡты үтәбикәнән башҡа бер ҡош та ашамай тиерлек. Шулай уҡ емеш-еләк - уның төп ризығы.

Төбәктең бөтөн территорияһында ла оя ҡороп йәшәгән ғәҙәти ҡош.

## Сыйырсыҡ

**(Обыкновенный скворец)**



Ялтыр ҡара төҫтә, суҡышы аҡһыл, ҡанаты киң һәм ослайып тора. Ҡойроғо ҡыҫҡа. Тиҙ оса.

Төрлөсә һайрай: һыҙғыра, шыҡырлай, башҡа ҡоштарҙы, тауыштарҙы эләкләй.

Тотош Европала таралған. Республикала иң билдәле һәм барыһы ла таный торған ҡоштарҙың береһе. Үҙе өсөн әҙерләнгән махсус ояларға, ағас ҡыуыштарына, стена ярыҡтарына оялай. Урмандан ҡурҡа.

Ҡар ирей башлағас ҡайта. Мәҫәлән, 2006 йылда Өфөлә сыйырсыҡты беренсе тапҡыр апрелдең 3-өндә теркәнек. Ата ҡош оя һайлай һәм инә ҡоштоң иғтибарын йәлеп итеү өсөн йырлай башлай. Инә ҡош тәүҙә ояны ҡарап сыға һәм уны оҡшатһа ғына был ҡошто пар итеп һайлай. Әгәр ҙә оя йылы түгел, тишектәренән ел иҫеп тора икән, инә ҡош артабан китә. Шуға ла оя яһауҙа башлыса ата ҡош үҙе генә ҡатнаша. 4-8, күбеһенсә 5-6 йомортҡаһы була. Икәүләп баҫалар, төнөн тик инә ҡош ҡына баҫа. 11-13 көндән бәпкәләре сыға, 20-22 көндән ояны ташлап сығып та китәләр. Был яҡынса май урталары-аҙаҡтарына тура килә.

Сыйырсыҡ ямғыр селәүсендәре менән туҡлана. Яландарҙа, еүеш урындарҙа бөжәктәргә һунар итә. Еләк тә ашай.

Йәш ҡоштар көҙгә ҡарай бергә туплана. Августа йылы яҡҡа оса башлайҙар һәм был осор япраҡтар ҡойолоп бөткәнгә тиклем һуҙыла. Көньяҡ Европала, Төньяҡ Африкала, Үҙәк һәм Көньяҡ Азияла ҡышлай. Беҙгә билдәле иң оло сыйырсыҡ 20 йәшкә тиклем йәшәне.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



## 12 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 0.40, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.25 Х/ф "Особенности национальной охоты в зимний период". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "За полчаса до весны". К 85-летию со дня рождения Владимира Мулявина". [12+]
23.40 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.30, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лимитчицы". [12+]
0.40 Т/с "Невеста комдива". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Новости года (на рус. яз).**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 Интервью. [12+]**
**17.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф О чем говорят Памятники. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Торжественный вечер, посвященный 85-летию Союза композиторов РБ. [12+]**
**1.30 Х/ф "Новогодний пассажир". [12+]**
**3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 13 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 13.40, 14.20, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "За полчаса до весны". [12+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.30, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лимитчицы". [12+]
0.40 Т/с "Невеста комдива". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.20 Хоккей. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 "Поем все вместе. Хиты". [12+]**
**1.15 Х/ф "Тушите свет". [12+]**
**2.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 14 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "За полчаса до весны". [12+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.30, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лимитчицы". [12+]
0.40 Т/с "Невеста комдива". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Генералы Башкортостана. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Веселые гастроли на Черном море". [12+]**
**1.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**3.15 Әлләсе. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 15 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "За полчаса до весны". [12+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.30, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лимитчицы". [12+]
0.40 Т/с "Невеста комдива". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 22.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Формула здоровья. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Д/ф О чем говорят Памятники. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.50 Хоккей. "Лада" (Тольятти) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.00, 4.00 Республика LIVE. [12+]**
**0.00 Х/ф "Я украду тебя у всего мира". [16+]**
**1.30 Спектакль "Салават". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 16 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
3.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Лимитчицы". [12+]
1.35 Х/ф "Понаехали тут". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**21.15 Деловая среда. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.00 Х/ф "Музыка крыш". [16+]**
**1.45 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 17 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Наталья Селезнева. "Мне легче шутить, чем плакать". [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Д/ф Премьера. "Золотые люди". [12+]
15.30 "30 лет вместе". "Игры, в которые играют люди". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Кубок мэра Москвы. [16+]
23.50 Д/ф "Герой с душой клоуна". История Вэла Килмера". [18+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30 "Аншлаг. Старый Новый год". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Праздник жизнь". [16+]
0.45 Х/ф "Любить и верить". [12+]
4.14 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Аль-Фатиха. [12+]**
**8.15 Сәләм представляет... [12+]**
**8.30 Весело живем! [12+]**
**8.45 Автограф. [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Ҡурсаҡ. [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Колесо времени. [12+]**
**16.50 Хоккей. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**19.00 Новости (на баш. яз).**
**19.30 Генералы Башкортостана. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Байыҡ представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.45 Х/ф "Император". [16+]**
**2.15 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 18 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Премьера. "Хочется праздника". [0+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.30 Премьера. "Будем жить!". [16+]
14.25 Спецпроект. "30 лет вместе". [12+]
16.15 Д/ф "Песняры" - молодость моя". К 85-летию со дня рождения Владимира Мулявина". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Три аккорда". [16+]
21.00 "Время".
23.00 Х/ф "Броненосец "Потемкин". К 100-летию фильма". [16+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 1.35 Х/ф "С приветом, Козаностра". [16+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 Асыш. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Преображение. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Концерт Салавата Мухаметьярова. [12+]**
**19.30 Әлләсе. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Концерт Азата Бикчурина. [12+]**
**1.15 Х/ф "Вне зоны доступа". [12+]**
**3.00 Х/ф Лопе де Вега. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (23) дүшәмбе | 7:35 | 9:33 | 13:30 | 15:25 | 17:14 | 19:05 |
| 13 (24) шишәмбе | 7:34 | 9:32 | 13:30 | 15:27 | 17:16 | 19:07 |
| 14 (25) шаршамбы | 7:34 | 9:32 | 13:30 | 15:29 | 17:17 | 19:08 |
| 15 (26) кесе йома | 7:33 | 9:31 | 13:30 | 15:30 | 17:19 | 19:09 |
| 16 (27) йома | 7:32 | 9:30 | 13:30 | 15:32 | 17:21 | 19:11 |
| 17 (28) шәмбе | 7:32 | 9:28 | 13:30 | 15:33 | 17:23 | 19:12 |
| 18 (29) йәкшәмбе | 7:31 | 9:27 | 13:30 | 15:35 | 17:25 | 19:14 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

**2026 йылды - Көнсығыш календары буйынса Йылҡы йылын ҡаршы алдыҡ.**

Хатта "Ҡыҙыл ут Йылҡы йылы", тип тә ебәрәләр уны. Ул бик етеҙ, үҙгәрештәргә бай, тыйылғыһыҙ үҫеш йылы булыуы бар. Әлбиттә, арбаһына ултырып өлгөргәндәр өсөн. Һәм был йылда "дилбегәне" ныҡ тоторға кәрәк, шунһыҙ "атығыҙ" сығынсылап китеп, барлыҡ эштәрҙе харап итеүе лә ихтимал. Юҡҡа ғына борон ата-бабаларыбыҙ һәр мөсәлгә үҙенең ҡылыҡһырламаһын биргәндә Йылҡы йылы - ҡаты йыл, һаҡлыҡ менән ҡаршы ал, тимәгәндәр.

Бына шулай, һәр кем үҙенең эҙмышын ауыҙлыҡлап, дилбегәһен ышанысы тотоп, кәрәк ерҙә сабып, кәрәк саҡта юртып, туҡтап ял итә-итә, күбеккә батырмай, яндырмай ғына юлын үтергә тейештер. Һәр хәлдә, ҡыуаныс-шатлыҡҡа, яҡшылыҡҡа, изгелеккә, тоғролоҡҡа, тыныслыҡҡа ышаныс менән киләсәккә бағайыҡ. Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ, һәм башватҡыста Йылҡы йылына арналған матур шиғри юлдарҙың авторҙарын табырға тәҡдим итәбеҙ.






**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡалма. Өнйәгес. Ыҙа. Сәүкә. Гелүк. Үт. Реле. Бит. Ҡаҡ. Ләпәк. Аманат. Әрлән. Ара. Сәрмә. Йола. Алла. Бәлеш. Әңкәл. Дана. Аксаков. Ҡурай. Теретуй. Нисә. Уй.

**Вертикаль буйынса:** Бөгәлбәп. Ситмиллик. Ҡуян. Ала. Өҙәк. Киҫтән. Әүҡат. Ҡайсы. Аласа. Керешә. Айранмай. До. Аве. Айсыҡ. Йәй. Гел. Сабаҡ. Әпсә. Әпем. Күк. Әлшәй.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 ғинуар "Ҡыҙ урлау"** (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

**9 ғинуар "Аҡ ҡанатлы хыялым"** (А.Симуков, Р.Насибуллина инсц. Ф. Ғарипов), музыкаль әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 6+



**10 ғинуар "Аҡ ҡанатлы хыялым"** (А.Симуков, Р.Насибуллина инсц. Ф. Ғарипов), музыкаль әкиәт. 11:00. 6+

**10 ғинуар "Ах, был мөхәббәт!.."** (А. Чехов, А. Абушахманов, А. Әмиров). 12+

**14 ғинуар "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 ғинуар "Две Бабы-яги"** (М. Күлбаев), әкиәт. 10:00. 0+

**9 ғинуар "Батыр йөрәк"** (Р. Хәкимов), әкиәт. 11:00. 0+

**9 ғинуар "Ханума"** (А. Цагарели, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 18:00. 12+

**10 ғинуар "Оҙон ҡолаҡтың Яңы йыл мажаралары"**, әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 6+

**10 ғинуар "Зимняя небылица"**, музыкаль әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 6+

**11 ғинуар "Золушка"** (Ш. Перро, М.Күлбаев), әкиәт. 12:00. 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 ғинуар "Волшебные сказки Беатрис Поттер"** (Д. Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+



**9 ғинуар "Коллекция смеха"** (О.Куценко). 18:00. 16+

**10 һәм 11 ғинуар "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов). 12:00 һәм 15:00. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**9 ғинуар "Йәнекәйем, мин өйләнәм"** (С. Юзиев), лирик комедия. 16+

**10 ғинуар "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский), әкиәт. 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**9 ғинуар "Әсәй, бына һиңә килен…дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 12+

**10 ғинуар "Как-то раз на Новый год..."** Яңы йыл тамашаһы. 0+

**11 ғинуар "Морозко"** бейеү театры, рус халыҡ инструменттары оркестры концерты. 0+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**13 ғинуар "Камера! Мотор!"** Яңы йыл ретро-концерты. 6+

*✓ Уйҙар - беҙҙең дуҫ һәм дошман. Уйҙар - ул беҙҙең осош та, түбәнгә ҡолап төшөү ҙә. Уйҙар беҙҙе ожмахҡа ла, тамуҡҡа ла илтеүсе. Ҡылыҡтар күренеп тора, ә уйҙар йәшерелгән.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТОРАТАУ ТУРАҺЫНДА...



**25 декабрҙә күптән көтөлгән "Торатау. Боронғо диңгеҙҙәр сере" фәнни-популяр документаль фильмының премьераһы булды. Күләмле проект тамашасыны боронғо океандың эпик тарихына сумдыра һәм республикала йылдың иң амбициялы кинопроекттарының береһе булырға вәғәҙәләй.**

Туризм министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, фильм Башҡортостандың көньяғының төп символы - легендар Торатауға бөтөнләй яңы ҡараш тәҡдим итә. Был боронғо океандың тере организмы - ғәйәт зур рифтың мауыҡтырғыс тарихы. Заманса визуализация технологияларын ҡулланып һәм фәнни мәғлүмәттәргә таянып, картинаның ижади төркөмө рифтың барлыҡҡа килеүен күрһәтә, тамашасыларға беҙҙе йөҙҙәрсә миллион йыл айырып торған дәүерҙең шаһиты булырға мөмкинлек бирә.

Сценарий совет геологтары теорияһына таянып яҙылған. Уға ярашлы, Торатау боронғо Көнсығыш Европа плитаһы буйлап 2000 километрға һуҙылған барьерлы рифтың бер өлөшө генә булған. Фильм ғилми-популяр кино һәм масштаблы фильм-һәләкәт элементтарын берләштерә. "Торатау. Боронғо диңгеҙҙәр сере" фильмының премьераһы Ишембай ҡалаһының "Маяк" кинотеатрында булды. Бынан һуң картина Башҡортостандың башҡа ҡалалары кинотеатрҙарында күрһәтәлә.

# "ЕҢЕҮ ПОЧТАЛЬОНЫ"

**Башҡорт режиссеры Айнур Асҡаров Белоруссияла Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған "Еңеү почтальоны" тигән яңы нәфис фильм өҫтөндә эшләй.**



Күләмле Евразия проекты совет халҡының ҡаһарманлығы тураһында хәтерҙе һаҡлап ҡалыу өсөн Ҡаҙағстанды, Рәсәйҙе һәм Белоруссияны берләштерҙе. Премьера Бөйөк Еңеүҙең 81 йыллығына планлаштырыла. Был иһә 35 йыл эсендә Евразия киңлегендәге өс илдең берлектәге кинопроизводствоһы сиктәрендә төшөрөлгән тәүге тулы метражлы фильм, тип хәбәр итте ижади төркөм.

Фильм өҫтөндә Ҡаҙағстан, Рәсәй һәм Белоруссиянан халыҡ-ара кинематографистар командаһы эшләй. Фильмдың постановкаһын билдәле башҡорт режиссеры Айнур Асҡаров етәкләй. Проекттың генераль продюсеры - Ҡаҙағстандың Кинематографистар лигаһы идараһы рәйесе Айҙар Баталов. Сценарий авторҙары - Татьяна һәм Дмитрий Зиминдар, Айҙар Аҡманов.

Фильм Минск янында төшөрөлә, ҡуйы урмандарҙа һәм һаҙлыҡтарҙа әле лә тарих һулышы һиҙелә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тап ошо урындарҙа ҡаты алыштар барған. "Был картина өҫтөндә эшләй башлағас, мин беҙҙең өсөн дәүерҙе кәүҙәләндереү генә түгел, ә хәл-вәҡиғалар барған ерҙең һулышын тойоу мөһим икәнен аңланым. Белоруссияла тарих үҙе һөйләй. Бында һәр урман, һәр һыҡмаҡ, һәр һаҙлыҡ һалдаттарҙың аҙымдарын һәм һуғыш осороноң һулышын хәтерләй. Беҙ үткәндәр тураһында ғына фильм төшөрмәйбеҙ - уның тауышын ишетеп, бөгөнгө тамашасыға еткерергә тырышабыҙ", - тип билдәләне Айнур Асҡаров.

Картинаның жанры - тарихи реализм элементтары менән хәрби драма. "Еңеү почтальоны" фильмы йәш һалдат тураһында, уның яҙмышында һуғыш михнәте һәм эске көсө, хәҡиҡәтте эҙләү бергә үрелеп бара. Бында ысын батырлыҡ тураһында хыялланған 18 йәшлек почтальон хаҡында бәйән ителә. Төп ролдә Ҡаҙағстандан йәш актер Алихан Нуржауов уйнай. Интернациональ командала - өс илдең артистары, улар араһында Юлия Лазовская, Василий Копейкин, Сергей Маркеев, Константин Адаев, Валерий Бабкин һәм Владислав Солодов бар.

# ШУНДАЙ ТЕЛЕКАНАЛ!

**Баш ҡаланың "Арт-Квадрат" киңлегендә яңы "Сәнғәт" мәҙәни телеканалы рәсми рәүештә сафҡа индерелде. Проект Президенттың "Мәҙәни башланғыстар" фонды ярҙамында тормошҡа ашырылды.**

"Сәнғәт" телеканалы үҙен, Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың музыка, театр, кинематограф, бейеү, һынлы сәнғәт һәм башҡа сәнғәт төрҙәренә, мәҙәниәттең бар йүнәлештәренә арналған махсус медиа майҙансыҡ, тип билдәләй. Телеканал тапшырыуында спектаклдәр һәм концерттар, Башҡортостан кинематографистарының төрлө осорҙағы фильмдары, республика районларының музейҙары менән таныштырыусы эфирҙар һәм тарихи-мәҙәни мираҫтар хаҡында документаль проекттар тәҡдим ителә. Яҡын арала төрлө сәнғәт эшмәкәрҙәре менән интервьюлар һәм мәҙәни саралар репортаж менән программалар эфирға сығасаҡ. Телеканал авторҙары мәҙәниәт өлкәһендә эшләүселәрҙең һәм тематик контент яһаусыларҙың барыһы менән хеҙмәттәшлек итеүгә асыҡ икәнен белдерҙе.

"Сәнғәт" телеканалының художество советына ихтирамға лайыҡ билдәле эшмәкәрҙәр инде: Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының художество етәксеһе Асҡар Абдразаҡов, мәҙәниәт хеҙмәткәре профсоюзының республика ойошмаһы рәйесе Александр Кузьменко, Башҡортостандың халыҡ артисы, БР Театраль эшмәкәрҙәре союзы рәйесе Алмас Әмиров. "Башҡортостан" киностудия директоры Юнир Әминев әйткәнсә, каналдың уңышы төрлө ижади ойошмалар һәм республиканың муниципалитет эшмәкәрҙәре менән хеҙмәттәшлек итеүҙә, шуға күрә ул ижади ҡарашлы кешеләрҙе телеканал редакцияһы менән әүҙем хеҙмәттәшлек итергә өндәне.

# БАШҠОРТ КИТАБЫ - ТӨРКИӘЛӘ

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте Истанбулда 42-се Халыҡ-ара китап күргәҙмәһендә республиканы күрһәтте. Istanbul Book Fair күргәҙмәһе 1982 йылдан алып үткәрелә, унда йыл һайын ярты миллионға яҡын кеше ҡатнаша.**

Халыҡ-ара китап күргәҙмәһе барышында стендта Башҡортостандың иң сағыу баҫмалары: изге "Ҡөрьән Кәрим", башҡорт әкиәттәре һәм легендалары, башҡорт йолалары тураһында китаптар һәм "Урал батыр" китаптары тәҡдим ителде. Күргәҙмәлә Башҡортостандың Рәсәйҙең Төркиәләге Сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы вәкиле Марат Таңһыҡҡужин был ваҡиғаның мәҙәни бәйләнештәрҙе артабан үҫтереү өсөн әһәмиәтле булыуын билдәләне. "Беҙ халыҡ-ара кимәлдәге ошондай сарала беренсе тапҡыр ҡатнашабыҙ. "Китап" нәшриәтенең күргәҙмәлә ҡатнашыуына айырыуса һөйөндөк. Быны Төркиә менән берлектә эшләй башлау өсөн яҡшы башланғыс тип иҫәпләйбеҙ", - тип билдәләне Таңһыҡҡужин.

Нәшриәт директоры Эльмира Хәйретдинова республикабыҙҙың ошондай сарала ҡатнашыуының мөһимлеген әйтеп үтте: "Был ҡаҙаныштарыбыҙҙы донъяға танытыу, мәҙәни бәйләнештәрҙе киңәйтеү һәм башҡорт китаптарына иғтибарҙы йәлеп итеү өсөн шәп мөмкинлек булып тора".

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АСЫУ АЛДАН ЙӨРӨР,

## аҡыл арттан йөрөр

Бай байлығын итә: ай һайын ҡатын ала, ауыл һайын йорт һала.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙ ҡулдары менән булдырмай тороп, камиллыҡтың ни икәнен кеше белмәҫ.

**(Гарриет Мартино).**

Бәхетһеҙҙәрҙе аҡыл да ташлап китә...

**(Овидий Назон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Күңеле аҙғын бер ҡатын йәшәгән, әммә уны был ҡылығы һәр саҡ борсоған: үҙе теләмәһә лә, ниндәйҙер яуыз көс уны шундай алама уйҙар уйларға этәрә һымаҡ тойолған уға. Ул бик йыш ғашиҡ булған, әммә уның был гонаһы уйҙарында ғына булғас, иренә хыянат итәм тип уйламаған. Шулай бер саҡ ул, Хоҙайға мөрәжәғәт итеп:**

**- Аллам, ни өсөн мин күңелем сафлыҡҡа сарсай тороп, шундай аҙғын уйҙарға тартылам? Мин барыбер гонаһлымы? - тигән.**

**- Уйҙар гонаһы ҡылыҡтар гонаһынан кәсләрәк, сөнки ҡылыҡ бер тапҡыр ғына булырға мөмкин, ә уйҙарҙың иге-сиге юҡ. Шуға ла уйҙар гонаһының да иге-сиге юҡ. - тигән Хоҙай. - Ҡылыҡ - инде ҡылынған гәмәл, ә уй - ҡылынмаған гәмәл. Әгәр ҙә ярамаған ҡылыҡ өсөн төрлө ғазаптар рәүешендә яза бирелһә, уйҙарға, ул тормошҡа ашмай тороп, яза бирелмәй.**

**- Улай булғас, мин оҙаҡ ғазапланасаҡмынмы ошондай гонаһлы уйҙарым арҡаһында?- тигән ҡатын.**

**- Мейеңдәге уйҙарыңды тормошҡа ашырмай һәм уның өсөн яза алмай тороп, һин ғазапланыуҙан туҡтамаясаҡһың, - тигән Хоҙай.**

**Ысынлап та, ҡартлыҡта ла күңеле тыныслыҡ тапмаған ҡатындың. Тамам хәлдән яҙғас, фәхишәләр йортона илткән юлдың бер яҡ ситенә сығып ултырған да, үткән бер кешегә үҙенең тарихын ҡыҫҡырып һөйләргә тотонған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың кемеһелер уның һөйләгәнен тыңлап, юлынан боролоп, тормошон үҙгәртергә ҡарар иткән. Кемдер аҡылдан яҙған ҡарсыҡтан мыҫҡыл итеп көлгән. Был тарихты ишеткән аҡыл эйәһе башҡаларҙы аҙғын юлдан дүндереү өсөн риүәйәт уйлап сығарған...**

**Шулай итеп, уйҙар - беҙҙең дуҫ һәм дошман. Уйҙар - ул беҙҙең осош та, түбәнгә ҡолап төшөү ҙә. Уйҙар беҙҙе ожмахҡа ла, тамуҡҡа ла илтеүсе. Ҡылыҡтар күренеп тора, ә уйҙар йәшерелгән. Уйҙарҙа гонаһ ҡылыу еңел. Сөнки уны бәрәү ҙә күрмәй, уның өсөн бәрәү ҙә һине гәйепләмәй. Ләкин Хоҙайҙан бер ниҙе лә йәшереп булмай. Кеше ҡылыҡтары менән дә, уйы менән дә ҡылған гонаһтары өсөн үҙ ғазаптары менән түләй барыбер..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 30.12.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 30.12.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 9.01.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 23